ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# КискеӨфө

21-27 апрель (алағарай) 2018

№ 16 (798)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Ҡырғыҙстанға сәфәр**



4

**Мең ере - мең берлеге**



7

**Миллилегебеҙҙең көҙрәте...**

халыҡ йырҙарында, моңобоҙҙа



8-9

**Баландың балаһы...**

"өләсәй" тип әйтһен һинә



12-13

**ТВ-программа** 14

***Донъяла торған ваҡытта шатлыҡтарҙы һөйләр, ҡайғыларҙы сисер йәғни бушатыр өсөн иң яҡын бер кешегә мохтажлыҡ була. Атай-әсәйегеҙҙән башҡа бындай яҡын кеше булмаç. Сөнки улар баланың шатлығы һәм хәсрәттәре өсөн ҡулдан килгән бөтә сараларҙы алдан күрергә тырыша. Шуның өсөн серҙәрегеҙҙе ата-әсәгеҙгә һөйләгеҙ.***

***Ризаитдин нәсихәттәренән.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Календарҙа 22 апрель әле һаман Владимир Ильич Лениндың тыуған көнө булараҡ билдәләнә. Ләкин бөгөнгө заман кешеләре өсөн был шәхестең биографияһы, эшләгән эштәре әһәмиәтен юғалта бара түгелме? Уны нисек хәтерләйһегеҙ?***

***Ғәбдинур ЯМАЛОВ, 70 йәш, хеҙмәт ветераны:*** Эйе, бөгөнгө заман йәштәре Владимир Ленинды илебеҙҙең баш ҡалаһындағы мавзолейҙа ятҡан ялтлас башлы кеше итеп кенә күҙ алдына баçтыра. Ә минең йәштәштәр, беҙҙән бәләкәйерәктәр һәм хатта XX быуаттың 80-се йылдарында тыуғандар ҙа Владимир Ленинды бөйөк шәхес булараҡ ҡабул итеп, уға һоҡланып, уның әйткән һүҙҙәрен девиз итеп күтәреп йәшәнек. Октябрят, пионер һәм комсомол сафына ҡабул ителгән саҡта уҡыған һүҙҙәрҙе хәҙер булһын яттан беләм. Ошо сараларға ни тиклем етди әҙерләнеүебеҙ, значок, унан ҡыҙыл галстук таҡҡандан һуң үҙебеҙҙе бер башҡа үçеп киткәндәй тойоу хисе күңелдәрҙә мәңге юйылмаç хәтирәләр булып һаҡлана. Комсомолға инеү, ә һуңынан партия сафына алыныуыбыҙ беҙҙе балалыҡтан оло тормош юлына аяҡ баçтырған мәл. Беҙҙең берҙәм идеяны үҙәккә ҡуйып йәшәүебеҙ, тотош илдең дөйөм бер маҡсаты булыуы - былар барыһы СССР тигән илдең башланғысында торған Лениндан килде. Әллә күпме быуын уның идеалдарында тәрбиәләнде һәм, әйтергә кәрәк, һөҙөмтәләр насар булманы. Һәр хәлдә, бөгөнгө аңлашылмаған, буталсыҡ заманда үçкәндәр менән сағыштырғанда, беҙ күпкә тәрбиәлерәк тә, намыçлыраҡ та булдыҡ.

Владимир Ленинды беҙ революцияның символы һәм идеяһы образында күрҙек һәм уға үҙебеҙ һымаҡ уҡ ябай кеше итеп ҡарай алманыҡ. Бөгөнгө көндә уның тураһында нимә генә һөйләмәһендәр, Лениндың эшмәкәрлеген юҡ итергә тырышмаһындар, ул уникаль тарихи шәхес булыуҙан туҡтамай. Нисә быуат үтһә лә, уның исеме халыҡ телендә буласаҡ. Шәхсән үҙем Владимир Ильич Ленинды халыҡты батша ҡоллоғонан һәм иҙеүенән ҡотҡарған, крәçтиәнгә - ер, эшсе халыҡҡа завод-фабрика алып биргән бөйөк юлбашсы булараҡ ҡабул итәм.

**(Дауамы 2-се биттә).**

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЭЙЕЛҺӘН - ТАБЫРҺЫН...

**Ул көндә Сипайлово биçтәһенең Ҡариҙел яры буйындағы дамба ҡырмыçҡа иләүендәй мәж килде. Бындай йәнлелек, ғәҙәттә, ҡыш һырғалаҡ, саңғы шыуғанда йәки йәйге томрала һыу ингән мәлдәрҙә генә күҙәтелһә, яҙғы бысраҡ осорҙа күңелһеҙ тынлы хөкөм һөрә торғайны. Сөнки ҡар ireп, ошонда йыл буйы тупланған сүп-сар һәм бысраҡ араһында йөрөргә шикле үçмерҙәр төркөмө, бомждар һәм берәҙәк эттәрҙән башҡа, иртәле-кисле йүгереп үтеүсе бер нисә спортсының ғына йөрәге еткәндер.**

Бәхеткә күрә, һуңғы йылдарҙа ҡала властары ошо урынға ла иғтибарын йүнәлдерҙе: Ҡариҙел буйы уңайлы ҡала мөхите булдырыу маҡсатын күҙаллаған өçтөнлөклө федераль проектҡа индерелеп, кисекмәçтән төҙөкләндереү эштәрен башлап ебәрҙе: дамба күтәртелеп, уның яр яғы битләүҙәренә бетон плитәләр түшәлде, йәйәүлеләр өсөн тротуар һәм оло юлға асфальт йәйелде, йылғаға төшөү урындарында баçҡыстар эшләнде. Хатта дамбаның үрге осо яр яҡлап матур тимер рәшәткәләр менән кәртәләнә лә башлағайны. Былтыр эш яртылаш башҡарылған ерҙән туҡталып ҡалды. Яҡшыраҡ булһын, тип теләгәйнек тә, һәр ваҡыттағыса килеп сыҡты, тигән ҡанатлы һүҙҙәр бик тап килә был тәңгәлдә, сөнки бөтөн ергә иманһыҙ ҡулдарын һуҙырға әҙер генә торған вандалдар бында ла емерткес эштәрен башлап ебәргән: әлеге матур рәшәткәләрҙең баштарын ҡырҡып алып, ташып та бөткәндәр. Юл ситендәге бордюрҙар ҙа "хәрәкәткә килгән": урыны менән туҙып, таралып яталар. Баҡтиһәң, һәр машина эйәһе үҙ йорто тапҡырында төшөү урыны "яһап" та ҡуйған шулай.

**(Дауамы 5-се биттә).**



12+

✓ *Кеше күңеленә был ғәмде йәмәғәт ойошмалары ла һалырға тейеш. Урындағы халыҡ менән йышыраҡ осрашырға, уртаҡ проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләргә, кәңәшләшергә, әйҙәргә кәрәк.*



## ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төнөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# УЙЛАНАЙЫҠ!

***Ханнан ИШМЫРҘИН, Ғафури районы, шәхси эшҡыуар:*** Осор ниндәй генә булмаһын, еңел саҡта ла, ауыр мәлдә лә, кешегә көслө рухлы булыу кәрәк. Яҡшылыҡты ла күтәрә белергә, һынауҙарҙы ла үтеп сығырға кешенең күңелендәге ышаныс, рухы ярҙам итә. Бөгөн беҙ артыҡ ауыр заманда йәшәйбеҙ, тип әйтеп булмай. Теләге булған кеше үҙ йүнен үҙе күреп, тормош көтөргә бер сараһын табып тора. Тик арабыҙҙа, һәр кем үҙ мәнфәғәтен үҙе ҡайғыртҡан заман тип иҫәпләп, дөйөм халыҡтың, милләттең именлеге тураһында уйламаған вайымһыҙ, моңһоҙ кешеләр булыуы ғына борсолдора. Халыҡ мәнфәғәтен ҡайғыртмаған кеше үҙенең һәм балаларының да киләсәгенә битарафлыҡ күрһәтә. Тимәк, уның тыуасаҡ быуын-быуындары тамырһыҙ, рухһыҙ буласаҡ, тимәк, урыҫтар "стержень" тип, беҙ "рух көсө" тип йөрөткән, кешегә был тормошта йәшәү көсө биргән иң мөһим нәмә уларҙа булмаясаҡ.

Шуға ла милләттәштәремә, вайымһыҙланып, киләсәгебеҙҙе ҡайғыртмай йәшәмәйек, хәстәрлекле булайыҡ, тип өндәшкем килә. Әлбиттә, кешенең вайымһыҙлығын күп сәбәптәр менән аҡларға мөмкин, эш булмауы, мөмкинлектәр сикләнеүе, тормош көтөүе ауыр булыуына ла япһарырға була. Ләкин иң төп сәбәп - кеше үҙе уйларға теләмәй, ә бит уй-ҡайғыһыҙ ғына донъя көтөп булмай. Нисек итеп хәлеңде яҡшырта алыуың тураһында көн-төн уйланырға, һуңынан хәстәрлек күрергә, тырышып эшләргә кәрәк. Кеше күңеленә был ғәмде йәмәғәт ойошмалары ла һалырға тейеш, тәү сиратта, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты ағзалары, башҡа зыялыларыбыҙ. Урындағы халыҡ менән йышыраҡ осрашырға, уртаҡ проблемаларҙы хәл итеү юлдарын эҙләргә, кәңәшләшергә, әйҙәргә кәрәк. Үткән быуаттың 90-сы йылдарында эшләгән башҡорт ойошмалары халыҡ менән бик тығыҙ эшләне. Аҙна һайын йыйылыштар, конференциялар үтә ине һәм унда милләттәштәрҙе вайымһыҙлыҡтан сығарыу маҡсатында бар көсөн һалып эшләүсе иң әүҙем, ғәмле кешеләр сығыш яһай торғайны. Хәҙер халыҡ араһына сығып йөрөгән лидерҙар ҙа һирәк бит. Ә ябай кешенең күңелендә ғәм, өмөт уяныһ өсөн шәхестәр менән осрашыу бик мөһим. Район етәкселәре менән генә осрашып китергә күнегеп алды беҙҙең билдәле шәхестәр. Ябай кеше телевидение, радио, интернет селтәрендәге төрлө сығанаҡтарҙан төрлөсә яҡтыртылған мәғлүмәтте күреп, нимәгә ышанырға, нисек уйларға белмәй аптырап ҡала. Шомланып, гел уйланып ултырмайым әле, тип тә кеше битарафлыҡ күрһәтә башлай һуңынан. Быны шул саҡта аҡыллы һүҙ, кәңәш, ярҙам кәрәк. Беҙ күренекле шәхестәрҙе милләттең таянысы тип ҡабул итеп өйрәнгәнбеҙ. Ошо хаҡта улар ҙа онотмаһа, халыҡ та вайымһыҙ булмаҫ.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Календарҙа 22 апрель әле һаман Владимир Ильич Лениндың тыуған көнө булараҡ билдәләнә. Ләкин бөгөнгө заман кешеләре өсөн был шәхестең биографияһы, эшләгән эштәре әһәмиәтен юғалта бара түгелме? Уны нисек хәтерләйһегеҙ?***



**(Башы 1-се биттә).**

***Сәкинә УЛМӘСХОЛОВА, 30 йәш, дәүләт органы хеҙмәткәре:*** Ваҡытында Владимир Ленинды ныҡ идеаллаштырып йөрөтәгәндәр. Минең атай-әсәйем дә бөтә күңелдәре менән Ленин идеяһына ышанған, уны күтәргән коммунистар булды. Улар өсөн ул бөйөк, шәфҡәтле, халыҡ тураһында уйлаусы, уның йәшәйеше һәм яҡты киләсәге ҡайғыртыусы юлбашсы. Бала саҡтан уның тураһында тик яҡшы хәбәрҙәр генә ишетеп үҫтем һәм, тәбиғи, минең күңелдә ошондай саф, экскерһеҙ кеше тураһында күберәк белергә, тигән теләк уянды. Шуға күрә, тарих факультетына уҡырға барыуыма ла нәҡ Ленин "ғәйепле". Студент йылдарында уның хаҡында күп уҡыным. Ә элекке йәшерен документтар киң йәмәғәтселек иғтибарына сығарылғас, Лениндың ҡултамғаһы ҡуйылған указ, ҡарар, хаттары менән таныштым һәм уларҙың ҡайһы берҙәренән сәстәрем үрә торҙо. Мәҫәлән, 1905 йылда Швейцариянан Петербург йәштәренә яҙған хаттарында ул полиция хеҙмәткәрҙәрен кислота менән ҡойондорорға, һалдаттар өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға, уларҙың аттарын йәрәхәтләү өсөн сөй ҡулланырға һәм башҡа ошондай саҡырыуҙар менән мөрәжәғәт итә. Шулай уҡ уның атырға, киҫергә, аҫырға тигән фармандарҙы йыш биргәнлеге лә билдәле. Ундай язаға дусар ителгәндәр рәтендә һалдаттар, сиркәү хеҙмәткәрҙәре, байҙар, казактар һәм башҡалар күп. Кавказ тарафтарына ла ошондай уҡ йөкмәткеләге телеграммалар йыш "осҡан". 1917 йыл аҙағында, Ленин хөкүмәт дилбегәһен үҙ ҡулына алған саҡта, илдә эшһеҙлек ныҡ сәскә атҡан булған. Тормошто яйлау, нисек тә булһа эш урындары булдырып, халыҡты эш, аҡса менән тәьмин итергә тырышыу урынына, ул һәр унынсы эрәмтамаҡты атырға тигән тәҡдим менән сығыш яһаған. Проблеманы хәл итеүҙең иң еңел юлы. Бәлки, ул ваҡытта ошондай аяуһыҙлыҡ илдә тәртип урынлаштырыу йәһәтенән үҙен аҡлағандыр. Ләкин минең аңым быны ҡабул итмәй. Тимәк, хәҙерге ваҡыттағы тирандар ҙа изгеләр рәтенә күтәрелергә мөмкин. Был дөрөҫ түгел. Ленинды тик яҡшы яҡтан ғына ишетеп өйрәнгән кешеләргә был фактарҙы ҡабул итеү ауыр, әлбиттә. Тик уның образын солғап алған ап-аҡ пәрҙәнең дә ҡара таптары булыуын танырға тура килә.

***Илмир ДИНИСЛАМОВ, 5 класс уҡыусыһы:*** Ленин - ул Ҡала советы эргәһендә торған һәйкәл. Өләсәйем миңә уның тураһында һөйләгәйне. Ул революция эшләүсе ҡарт бабай. Хәҙер ул мавзолейҙа ята. Элек кеше сиратҡа баҫып, оҙаҡ көткәндән һуң ғына Ленинды ҡарарға мавзолейға инә алған. Хәҙер күрһәтәләрме икән - белмәйем. Элек Ленинград тигән ҡала булған. Лениндың хөрмәтенә ҡушҡандар. Ләкин бөгөн ул Санкт-Петербург тип атала.

***Данил ЙОСОПОВ, 9 класс уҡыусыһы:*** Ленин большевиктар партияһын төҙөгән кеше. Хөкүмәт башлығы булғанға тиклем ул һәр ваҡыт тиерлек батша власынан ҡасып йөрөгән һәм һөргөнгә булған. "Искра" гәзитен дә ул сығара башлаған. Кәләше - Надежда Крупская. Балалары юҡ шикелле. Әллә бармы шул? Хәтерҙән сыҡҡан...

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!



**1 апрелдән 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә - 560 һум 82 тингә, Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары һәм инвалидтары - 505 һум 08 тингә, 50673 индекслы (юридик ойошмалар һәм предприятиелар) "Киске Өфө"гә 590 һум 82 тингә яҙыла һәм квитанцияларығыҙҙы редакцияға ебәреп, матур китаптарға эйә була алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ!**

● **Ә инде гәзитебеҙгә 2018 йылдың икенсе яртыһы өсөн февралдә һәм мартта яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргән уҡыусылары:**

Учалы районы Рысай ауылынан Хәтижә Сәғитова - **"Ҡөрьән-Кәрим сүрәләренә шиғри аңлатма"**;

Нефтекама ҡалаһынан Дим Әхмәҙиев - **Илгизәр Бураҡаевтың "Башҡорт көсө"**;

Өфө ҡалаһынан Йәүһәрә Зәйниева - **"Антология поэзии Башкортостана"**;

Сибай ҡалаһынан Нурзилә Ҡорманова - **Варис Ғүмәровтың "Тыуған яҡтың шифалы үҫемлектәре"**;

Баймаҡ районы Темәс ауылынан Фәрит Йосопов - **Йәдкәр Бәшировтың "Башҡорт хан"**;

Баймаҡ районы Әбделкәрим ауылынан Йәмних Ҡашҡаров - **Флүр Ғәлимовтың "Яңы башҡорт"**;

Өфө ҡалаһынан Рауил Шәйәхмәтов - **Рәшит Назаровтың "Ер һәм йыһан йыры"**;

Баймаҡ районы Ярат ауылынан Зөһрә Ҡарамырҙина - **Мәрйәм Бураҡаеваның "Көҙгө ысыҡ"**;

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов тәбәктең Йәмәғәт именлеге ведомство-ара советы ултырышын үткәрҙе. Билдәләнеүенсә, ошо көндәрҙә контроль-күҙәтеү органдары 355 сауҙа үҙәген һәм башҡа халыҡ күп йөрөгән объекттарҙы тикшергән. Тикшереү һөҙөмтәләре буйынса янғын хәүефһеҙлеге талаптарын боҙоуҙың 8 220 осрағы асыҡланған. Башҡортостан башлығы һүҙҙәренсә, илдә һәм республикала янғын хәүефһеҙлегенә бәйле хәлде тамырынан үҙгәртергә кәрәк.

✓Республиканың тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министры Илдар Һаҙыев етәкселегендә Башҡортостан делегацияһы республика һәм ЮНЕСКО хеҙмәттәшлеген артабан үҫтереү мәсьәләләрен тикшереү өсөн Францияға юлланды. Башҡортостан делегацияһы Парижда Рәсәй Фән һәм мәҙәниәт үҙәгендә ЮНЕСКО-ға тәҡдим ителгән ике объект - "Шүлгәнташ" мәмерйәһендәге һүрәттәр һәм "Янғантау" геопаркы менән таныштырыу сараһын үткәреүгә бәйле мәсьәләләр ҡараласаҡ.

✓Өфөлә Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты президиумы ултырышында назарат рәйесе Нурмөхәмәт Ниғмәтуллиндың вәкәләт ваҡыты тамамланыу мәсьәләһен тикшерҙеләр. Мөфтөй Нурмөхәмәт хәҙрәт президиум ағзаларына республика Башлығы менән осрашыуы хаҡында мәғлүмәт еткерҙе. Осрашыуҙа ағымдағы йылда рәйес вәкәләтенең ваҡыты тамамланыуы һәм Башҡортостан мосолмандарының Диниә назараты үҫеше хаҡында һүҙ барҙы. Рәйес (мөфтөй) вазифаһына кандидаттарҙы Диниә назаратының сираттағы пленумында 2018 йылдың 20 сентябрендә тәҡдим итеү күҙаллана.

✓Башҡортостанда яҙғы баҫыу эштәре башланды. Республиканың Ауыл хужалығы министрлығы мәғлүмәттәре буйынса, бер нисә районда күп йыллыҡ үләндәрҙе һәм ужым культураларын өҫтәмә туҡландырыуға, шулай уҡ күп йыллыҡ үләндәрҙе тырматыуға тотондолар. Көйөргәҙе һәм Мәләүез районы игенселәре баҫыуҙарҙа дым ҡаплай башланы.

✓Башҡортостанда йәшәүселәрҙе "Макулатура тапшыр - ағасты ҡотҡар!" Бөтә Рәсәй акцияһында ҡатнашырға саҡыралар. Сара 14 майҙан 15 июнгә тиклем ярыш форматында уҙғарыла. 300 килограмдан ашыу макулатура тапшырған ҡатнашыусыларға аҡсалата премия һәм ҡиммәтле бүләктәр ҡаралған.

✓ *Йәштәрҙе өйләндергән саҡта ла ике яҡтан да ҡаршы яҡтарға шымсылар ебәрелеп, был ғаилә ағзалары эсәме-юҡмы икәнлеген аңдығандар. Әгәр бер генә хилафлыҡ тойолғанда ла, туғанлашыуҙан баш тартҡандар.*



УЙЛЫҒА - УЙ

**Ниндәйҙер аҡыл, белем эҙләп, нанотехнологиялар өлкәһен өйрәнәбеҙ, тәрбиә сығанаҡтары итеп кемдәрҙеңдер яңы алымдарын, заманса ҡараштарын алабыҙ. Ә асылда улар барыһы ла халыҡтарҙың йәшәйешендә, тарихта, яҙмаларҙа бар икән. Шуларҙың үҙемә ҡыҙыҡ булғандарын ғына бәйән итмәксемен.**

# СПАРТАНДАРҘЫҢ...



## эскелеккә ҡаршы көрәшкәне

Мәҫәлән, боронғо Спартала ирегеттәрҙе тәрбиәләүҙең иң ҡырыҫ һәм һөҙөмтәле ысулдары ҡулланылған, әммә улар кешелеклелек сиктәрендә булған. Йәштәрҙе иң беренсе сиратта һуғышырға түгел, ә эскелеккә ҡаршы торорға өйрәткәндәр. Эскелеккә ҡаршы тора алған егет кенә һуғышсы дәрәжәһенә күтәрелгән. Тимәк, был халыҡ эскелектең ниндәй көслө дошман икәнен яҡшы аңлаған. Шарап һәм башҡа иҫерткес эсемлектәр ҡолдар ризығы тип һаналған. Ҡолдарға көнөнә дүрт шәшке шарап ҡабул итеү мотлаҡ булған. Былдай дозанан ҡолдоң донъяһы түңәрәкләнеп, йәшәйешкә талаптары юғалып, ихтыяждары онотолоп ҡалған һәм ул ошо эйфория хәлендә йомош үтәп тик йөрөгән. Ошондай тороштағы меңәрләгән ҡол бер айыҡ хужаның ҡулында булған.

Ун йәшкә тиклемге кескәй спарта малайҙарына йыш ҡына эскелектең эҙемтәләрен күрһәткән спектаклдәр ҡуйылған. Уртаға мул табынлы өҫтәл ултыртылған, унда көршәк-көршәк шараптар ҡуйылған һәм бер нисә ҡол ошо табынға ебәрелгән. Балалар өҫтәл артындағыларҙың иҫереп барыу стадияларын күҙәткән. Ҡолдар самаһыҙ ашап-эсеүгә тотонған. Улар башта күңелләнеп, йырлап-бейеп, бер-береһен ҡосаҡлап-үбеп, маҡтап ташлағандар. Унан тора-бара телдәре көрмәлгән, ҡараштары мәғәнәһеҙләнгән, бер-береһенең насар яҡтарын күрә, иҫләй башлағандар. Кемдәрелер һуғыша, кемдәрелер илай, кемдәрелер ҡоса икән. Бөтөн был күренеш ситтән ҡарағанда шундай йәмһеҙ һәм түбән булған. Балаларҙың тәрбиәһе менән шөғөлләнеүселәр был тамаша барышында эскән кешенең, иҫеректең ниндәй намыҫһыҙ һәм һатлыҡ булырға мөмкинлеге, уның ниндәй насар эштәргә барып етә алыуы хаҡында мәғлүмәттәр биреп, балаларҙың кисерештәрен тәрәнәйтеп торғандар. Йәғни, утҡа май өҫтәгәндәр. Малайҙар эскеселәрҙе күрә алмаҫ хәлгә етеп, нәфрәтләнеп, был табындағыларға серек емештәр бәргән.

Малайҙар үҫә барып, ҡорал күтәрергә хәлдәре етә һәм хәрби уйындарға өйрәтелә башлағас, уларға тағы ла ошондай тамаша күрһәткәндәр. Бер айыҡ һуғышсыға ҡаршы унлап эскән ҡолдо сығарғандар. Иҫеректәр күмәк булыуҙарына ҡарамаҫтан, бер ниндәй ҙә йыйнаҡ һәм үҙҙәрен яҡларлыҡ эш ҡыра алмаған. Улар хатта берләшеп ҡаршы тороуға ла бармаған. Һәр береһе үҙен көслө итеп тойоп, ҡоралға йәбешкән дә, айыҡ аҡыл менән эш иткәндең ҡулынан һәләк булып ҡалған. Был да үҫмерҙәр өсөн ҙур дәрес булған. Улар шараптың һынылышлы мәлдәрҙә, ауыр ваҡыттарҙа, хәл иткес урындарҙа үҙенде үҙеңә дошман яһай торған иблис икәнен төшөнгән.

Йәш ғаиләләргә, бала үҫтергәндәргә лә шарап тыйылған. Илгә сәләмәт балалар кәрәк булған. Атаһы эскән балаларҙың бер ниндәй перспективаһы ла булмаған. Уның ҡаны ағыулы тип һанағандар. Ниндәйҙер дәүләт эшмәкәрлегенә йәки хәрби етәкселеккә дәғүә иткән кешенең ата-әсәһе ул тыуғанға тиклем, ул тыуған һәм үҫкән саҡта бер тапҡыр ғына булһа ла шарап йотҡанмы йәки йотмағанмы икәнлеге бик ентекле тикшерелгән. Йәштәрҙе өйләндергән саҡта ла ике яҡтан да ҡаршы яҡтарға шымсылар ебәрелеп, был ғаилә ағзалары эсәме-юҡмы икәнлеген аңдығандар. Әгәр бер генә хилафлыҡ тойолғанда ла, берләшеүҙән баш тартҡандар. Теләһә ниндәй ғәйептән дә "эсә" тигәне ҡурҡынысыраҡ һәм мәсхәрәрәк булған. Шулай итеп, йәш спарталылар "йәшел йылан"дан намыҫтарын ныҡ һаҡлаған. Шарап бары олатай булған ололарға ғына рөхсәт ителгән. Унда ла һыуға ҡушып ҡына. Улар инде балаларын табып, үҫтереп бөтөргәндәр тип һаналған. Гректар һәм Македония халҡы эскелек менән мауыҡҡан персиялыларҙы күрә алмаған һәм күп һуғыштарҙа еңгән дә.

Спарта хаҡында кинолар күп ҡарайбыҙ, әммә уларҙың тәрбиә мәҙәниәтен белмәйбеҙ. Ә асылда был халыҡ эскелеккә, артыҡ ашауға, енси тотанаҡһыҙлыҡҡа, ялғанлыҡҡа, йәғни дөрөҫ булмаған хәбәр һөйләүгә (ғәйбәткә) ҡаршы иң ҡаты көрәшеүселәрҙең береһе булған. Ҡайһы бер дәрестәренән беҙгә бөгөн һабаҡ алырға мөмкин. Яҡшылыҡҡа өндәгәндең зыяны юҡ, һәр хәлдә.

**Лилиә ИСМӘҒИЛЕВА.**

Белорет районы Ассы ауылынан Тәнзилә Рыцева - **Таңһылыу Ҡарамышеваның "Мәңгелек сәфәр"**;

Әбйәлил районы Әлмөхәмәт ауылынан Нәсимә Ирназарова - **Тимер Йосоповтың "Йәшәүҙәре бәхет донъяла"**;

Хәйбулла районы Аҡъяр ауылынан Мәрзиә Ишимова, Баймаҡ районы Ғүмәр ауылынан Гөлнара Юлыева, Икенсе Этҡол ауылынан Әкрәм Ҡәйепҡолов, Йылайыр районы Бәләкәй Юлдыбай ауылынан Зифа Төлкөбаева - **Рауил Бикбаевтың "Онотторлоҡ булдымы ни?"** тигән китаптарына лайыҡ булды.

**Иҫкәрмә:** бүләкләнеүселәр китаптарҙы балалары, туғандары, таныштары аша алдырыу сараһын күрһен ине, тигән теләктә ҡалабыҙ.

● Ә кемдәрҙе бүләктәр ҡыҙыҡһындырмай, улар беҙгә гәзитебеҙ аша **тыуған көндәрен** хәбәр итһен.

● **Иҫкәртеү.** Почталарҙа, киоскыларҙа гәзиткә яҙҙырыуҙан баш тарталар икән, йә яҙҙырған булып та, өйҙәрегеҙгә гәзитте алып килмәйҙәр икән, зинһар, редакцияға шылтыратып хәбәр итегеҙ.

● Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**. Беҙҙең электрон почта: **kiskeufa@mail.ru**.

**Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ, донъя хәтәрҙәрен, борсолоуҙарҙы бергә еңәйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергә уртаҡлашайыҡ!**

**МӨХӘРРИРИӘТ.**

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*




# КҮҘӘТЕҮҘӘР

***44-се күҙәтеүем.*** Ҡыпсаҡтар хаҡындағы төрлө сығанаҡтарҙы күҙәтеүем, шул иҫәптән Йәдкәр Бәшировтың "Бөйөк Башҡорт иле" китабы менән танышыуым бер фаразға килтерҙе. Башҡорт халҡын формалаштырыуҙа мөһим роль уйнаған ҡыпсаҡтарҙы европалылар "ҡуман", урыҫтар "половцы" тип атаған. Ҡыпсаҡтарҙың беҙҙең эраға тиклемге тарихы массагеттарға (мәсәғүттәргә), пассагеттарға, иссагеттарға, дөйөмләштереп әйткәндә, боронғо сактарға барып тоташыуы хаҡында яҙғайны мәрхүм тарихсы Рәшит Аҡкилдин (ауыр тупрағы еңел булһын). Фарсылар ҡыпсаҡтар йәшәгән даланы "Дәште Ҡыпсаҡ", урыҫ тарихсылары "Половецкое поле", гректар һәм башҡа европалылар "Ҡумандар иле" тип атаған. Й. Бәшировтың китабындағы аңлатмала "ҡуман" атамаһы "ҡыуман"дан, йәғни "ҡыу" (ҡыуарған, һары) тамырынан алынған тип килтерелә. Был дәлил половецтар менән ҡумандарҙың бер үк халыҡ булыуын раҫлай. Ә бына "ҡыпсаҡ" атамаһы ҡайҙан алынған һуң?

Мәхмүт Ҡашғари яҙыуынса, "...XI быуаттағы боронғо башҡорт теле ҡимаҡтарҙың теленә иң яҡыны һаналған. XI быуатта ҡыпсаҡтар ҡимаҡтар менән ныҡ аралаша һәм "ҡимаҡ" этнонимы тора-бара "ҡыпсаҡ"ҡа әүерелә..." Ҡашғари менән килешергә лә булыр ине, тик "ҡимаҡ" "ҡыпсаҡ"ҡа әүерелгән саҡта яңы эраға тиклем үк булған "сак" тамыры нисек күскән һуң? Быға аңлатма юҡ.

"Киске Өфө" ләге "Әсәйем лөғәте" рубрикаһында әсәйем үҙе генә ҡулланған һүҙҙәрҙе килтереп, унда "ҡәп", "ҡап" ярҙамсы һүҙҙәр хаҡында әйтеп үткәйнем. Әсәйем үҙ телмәрендә уларҙы һүҙенең, фекеренең мәғәнәһен көсәйтер өсөн ҡулланыр ине. Әйтәйек, "ул килмәк ҡайҙа, ҡәп ҡайҙа..." йә булмаһа "ул бармаҡ ҡайҙа, ҡап ҡайҙа..." Белеүебеҙсә, беҙҙең телдә һүҙҙең мәғәнәһен көсәйтеүсе был форма күп осрай, әйтәйек, "ҡып-ҡыҙыл", "ҡап-ҡара", "ҡоп-ҡоро" һ.б. Ошоларҙан сығып фаразым: ҡыпсаҡтар боронғо сактарҙың иң-иңе, иң ғәйрәтлеһе, ҡып-сағы...

Кем өсөндөр был фаразым көлкө генә булып тойолор. Сөнки тарихсы ла, телсе лә түгелмен. Шулай ҙа ҡайһы ваҡыт ошондай фекерҙәр ҙә башҡа килтереп һуғып ҡуя...

***45-се күҙәтеүем.*** Аң көслөрәкме, әллә тәбиғи инстинктмы? Уларҙы сағыштырыу дөрөҫмө? Был хаҡта төрлө күҙәтеүҙәремә таянып мәҡәләләр яҙғаным бар. Тағы бер миҫал. Бер пашаның улы һыу эскәндән һуң ауырып китә. Уның ағыуланғанмы-юҡмы икәнен белер өсөн һауыттағы ҡалған һыуҙы һарыҡ бәрәсенә эсереп ҡарарға булалар. Ныҡ сарсаған бәрәс һыуҙы эсеү түгел, хатта еҫкәп тә ҡарамай, яҡын да килмәй. Икенсе һауыттағы һыу янына үҙе йүгереп килә. Ошонан һуң пашаның улын кемдер үлтерергә йыйынғанын беләләр...

Былар барыһы ла тарихта ҡалһын. Хәҙер шундай һорауға яуап эҙләп ҡарайыҡ: һыуҙы еҫкәп тә ҡарамайынса, бәрәс уның ағыулы икәнен нисек белгән һуң? Тәбиғи инстинкт миллион йылдар буйы формалаша, шунсама йыл тәжрибәһе һөҙөмтәһе, тиҙәр. Шулай ҙа бер айлыҡ ҡына бәрәс үҙенең ниндәй һиҙеү, тойоу ағзалары аша һыуҙың ағыулы икәнен белгән? Аңлатыуы ҡыйын шул. Бары тик шулай тип яуап бирергә генә ҡала: бәрәсте Хоҙай иҫкәрткән, Хоҙай аралаған.

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**
**(Дауамы бар).**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓23 апрелдән 20 майға тиклем илдә Бөйөк Еңеүҙең 73 йыллығына арналған кино күрһәтеү буласаҡ. Фильмдар Бөйөк Ватан һуғышы тарихына арналасаҡ. Программаға Руслан Юлтаевтың "Өс хат" фильмы ла ингән. Был фильм 2017 йылда "Перерыв на кино" кинофестиваленең Гран-прийһын яулағайны. Сараны "Мост поколений" Халыҡҡа социаль ярҙам фонды ойоштора.

✓Башҡортостан һәм Ырымбур тейелмәй торған биләмәләрҙе һаҡлау өлкәһендә эш итеү тураһында килешеү төҙөнө. Килешеү Шайтантау һыртына ҡағыла. Ул Башҡортостандың Хәйбулла районы һәм Ырымбур өлкәһенең Ҡыуандыҡ районы буйлап һуҙылған Урал тауҙарының сикке көньяҡ армыты. Башҡортостанда "Шайтантау" ҡурсаулығы һирәк осрай торған хайуандарҙы һаҡлау өсөн булдырылған, ә күрше төбәктә бер үк исемле ҡурсаулыҡта эталон дала имәнлеге һәм урман-дала фаунаһы һаҡлана.

✓Март айында Башҡортостанда эшһеҙлек буйынса пособиеның уртаса күләме 3 976 һумға тиклем кәмене. Әле пособиеның минималь күләме 977,5 һум, иң ҙуры - 5 635. Халыҡ мәшғүллеге хеҙмәтенең һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда 21,4 меңдән ашыу рәсми теркәлгән эшһеҙ һәм 44,5 мең самаһы буш эш урыны иҫәпләнә.

✓Республика хөкүмәте 2018 йылда "Һөнәре буйынса иң яҡшыһы" һөнәри оҫталыҡ конкурсын үткәреү тураһында иғлан итте. Тейешле бойороҡ 16 апрелдә Башҡортостандың рәсми хоҡуҡ мәғлүмәт интернет-порталында баҫылған.

✓"Быйыл иң яҡшыһы" исеме өсөн иретеп йәбештереүселәр, химик анализ лаборанттары, слесарь-сантехниктар, ҡымыҙ бешеүселәр, кондитерҙар һәм ташсылар көс һынаша. Резерв сифатында "Иң яҡшы урман ҡырҡыусы" һәм "Иң яҡшы троллейбус водителе" номинациялары ҡаралған, тип билдәләнә документта.

✓Башҡортостан Дәүләт автоинспекцияһы төбәк юлдарында иҫкәртеү сараларын арттырырға ниәтләй. Ғәҙәттәгесә, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре "йома" рейдтары уҙғара. Ведомство мәғлүмәттәре буйынса, Башҡортостанда юл-транспорт ваҡиғалары арта, төбәк Дәүләт автоинспекцияһы йома ғына түгел, аҙна уртаһында ла, ошо хаҡта халыҡҡа алдан хәбәр итеп, тикшереүҙәр уҙғарасаҡ.

**“Башинформ”дан.**

✓ Бишкәктә Өфө делегацияһы Ҡырғыҙстанда йәшәүсе башҡорт диаспораһы менән осраша. Бөгөн Ҡырғыҙстанда 2000 самаһы башҡорт иҫәпләнә. Ойошма 1988 йылда Ҡырғыҙстан халыҡтары ассамблеяһы ҡарамағында ойошторола.



ҠЫҪҠАСА



# БАЛАЛАРҒА БУШЛАЙ ЯРҘАМ

✓ Башҡортостанда аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге балалар йыл һайын бушлай мәктәп кәрәк-яраҡтары ала. Парламентарийҙар ғаиләләрҙең бындай хоҡуғын ҡануни яҡтан нығытырға ҡарар итте. "Республикала әлеге ярҙам сараһы тәүге йыл ғына күрһәтелмәй, - тине Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев. - Ләкин ул ҡануни яҡтан нығытылмағайны. Һуңғы өс йылда мәктәп кәрәк-яраҡтары республика Хөкүмәте бойороҡтары нигеҙендә бүленде. Былтыр 8 меңдән ашыу ғаилә 19 миллион һумдан күберәк суммаға ошондай тауар алды. Беҙ әлеге категорияға ҡараған балаларҙың бушлай мәктәп кәрәк-яраҡтарына хоҡуғын ҡануни нығытыуҙы дөрөҫ тип иҫәпләйбеҙ. Ошо маҡсатҡа республика ҡаҙнаһында аҡса һалынған да инде". 25 апрелдәге ултырыштың көн тәртибенә индерелгән бер юлы ике закон проекты ишле аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙәге беренсе класс уҡыусыларына мәктәп кәрәк-яраҡтары йыйылмаһын бушлай биреүҙе ҡануни яҡтан нығытыуға йүнәлтелгән.

✓ 2018 йылдың 1 майынан 15-нә тиклем, Бөйөк Ватан һуғышында Еңеүгә 73 йыл тулыуҙы байрам итеү уңайынан, ветерандарға "Ырымбур" авиакомпанияһының барлыҡ даими рейстарында бушлай осоу хоҡуғы бирелә, тип хәбәр итә "Өфө" аэропортының матбуғат хеҙмәте. Оҙатып йөрөүселәргә 50 процентлыҡ ташлама яһала. 16 апрелдә әлеге рейстарға льготалы билеттар һатыу башланды. Пассажирҙарҙың түбәндәге категориялары бушлай осоу хоҡуғына эйә: Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары; "Германияны еңгән өсөн" йәки "Японияны еңгән өсөн" миҙалдары менән бүләкләнгән Бөйөк Ватан һуғышы ветерандары; "Ленинградты оборналаған өсөн" йәки "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән бүләкләнгән кешеләр; I, II, III төркөм Бөйөк Ватан һуғышы инвалидтары (1941- 1945); фашист концлагерҙарының балиғ булмаған әсирҙәре; тыл эшсәндәре. Өҫтәмә мәғлүмәтте 8 (3532) 67-65-44 телефоны буйынса алырға мөмкин.

✓ Башҡортостанда юлдарҙағы тәртипте квадрокоптерҙар ярҙамында күҙәтергә ниәтләйҙәр. Республика Дәүләт автоинспекцияһы мәғлүмәте буйынса, Ҡырмыҫҡалы районында пилотһыҙ осоу аппаратын һынап ҡарағандар. Квадрокоптер автомобилдең ҡаршы һыҙатҡа сығыу осрағын теркәгән. ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре ошо хоҡуҡ боҙоуҙы яҙып алған. Башҡортостан Дәүләт автоинспекцияһындағы балансҡа әлегә квадрокоптерҙар юҡ. Ведомствола билдәләүҙәренсә, ҡайһы бер төбәктәрҙә Эске эштәр министрлығы ошо техниканы һатып алған да инде. Уларҙың тәжрибәһен өйрәнеү һәм ыңғай һөҙөмтәләр булған осраҡта уны Башҡортостанда, айырыуса хәүефле участкаларҙа ҡулланыу күҙаллана. Шуны билдәләп үтергә кәрәк: квадрокоптерҙар төбәктә ташҡынды күҙәткәндә лә үҙҙәрен яҡшы яҡтан күрһәткәйне. Башҡортостан ҡотҡарыусылары Өфө районының Зубово ауылында һыу баҫҡан урындарҙы ҡарау өсөн дүрт квадрокоптерҙы файҙаланды.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ҠЫРҒЫҘСТАНҒА СӘФӘР



**11-12 апрелдә Өфө ҡала округы делегацияһы Бишкәк ҡалаһында үткән Рәсәй ҡалалары союзының V Халыҡ ара иң яҡшы муниципаль тәжрибәләр форумында ҡатнашты. Өфө ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә был хаҡта ентекле доклад менән Инвестициялар идаралығы начальнигы Марс Әминев сығыш яһаны.**

Бынан алдағы Форум 2016 йылдың июнендә Өфөлә үтте һәм тап беҙҙә ул халыҡ-ара статус алды. Баш ҡалаға тәжрибә уртаҡлашырға БДБ илдәренән, Ҡытайҙан, Көньяҡ Кореянан, Бөйөк Британиянан (Оксфорд) вәкилдәр килгәйне. Бөгөнгө йәмғиәттә урындағы үҙидаралыҡтар иң мөһим институттарҙың береһе булып тора һәм тап урындағы властарҙың уңышлы эшмәкәрлегенә аныҡ территорияларҙың үҫеше, картала яңы иҡтисади үҫеш нөктәләре барлыҡҡа килеүе бәйле. Ошо күҙлектән ҡарағанда, был бик әһәмиәтле сара, сөнки унда Рәсәйҙең генә түгел, башҡа илдәрҙең ҡалалары ла үҙҙәрендә ҡулланылған һәм таралыу хоҡуғына эйә булған иң уңышлы муниципаль эшмәкәрлек йүнәлеше серҙәре менән бүлешә.

Марс Әминев билдәләүенсә, Бишкәктә уҙған Бишенсе форумда донъяның 150 иленән муниципалитеттар һәм урындағы үҙидара органдары вәкилдәре ҡатнаша. Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Форум кубогын Ҡырғыҙстан Республикаһының баш ҡалаһы башлығы Албек Ибраимовҡа тапшыра һәм йыйылыусыларҙы тәбрикләп, урындағы мәсьәләләрҙе хәл итеүҙәге уңышлы тәжрибәләрҙең, яңы идара итеү технологиялары нигеҙендә муниципаль идаралыҡтың сифатын һәм һөҙөмтәлелеген күтәреү, йәмәғәтселек менән диалогты үҫтереү, граждандарҙың инициативаһын хуплау бары тик муниципаль тәжрибәләрҙе киң таратҡанда ғына тулы ҡеүәтендә эшләйәсәгенә баҫым яһай.

Шулай уҡ сара сиктәрендә "Иң яҡшы муниципаль практика" еңеүселәре бүләкләнә. Тауыш биреү һөҙөмтәләре буйынса Өфө "Иҡтисад" номинацияһында бизнес-инкубатор ойоштороу һәм үҫтереү тәжрибәһе өсөн Рәсәй ҡалалары союзы наградаһына лайыҡ була. Артабан МАГ Президенты Ирек Ялалов X Халыҡ-ара "БДБ-ның һәм ЕврАзЭС-тың иң яҡшы ҡалаһы" конкурсы лауреаттарына наградалар тапшыра. Был юлы Һамар, Ульяновск, Силәбе, Пермь ҡалалары дипломдар менән билдәләнә.

Сараның иң мөһим ваҡиғаһы Ҡырғыҙ Республикаһының Урындағы үҙидаралыҡтар союзы (рәйесе - Эмилбек Алымкулов) менән Баш һәм эре ҡалаларҙың халыҡ-ара ассамблеяһы (МАГ. Президенты - Ирек Ялалов) араһында хеҙмәттәшлек тураһында килешеүгә ҡул ҡуйыу була. Өфө һәм Бишкәк ҡалалары араһындағы туғандашлыҡ мөнәсәбәттәрен үҫтереү маҡсатында Ирек Ялалов етәкселегендәге делегация Бишкәк ҡалаһы мэры Албек Ибраимов менән дә осраша. Осрашыу барышында былтыр 17 июндә төҙөлгән ике яҡлы килешеүҙең перспективалары буйынса фекер алышына. Ирек Ялалов Өфөнөң перспективалары тураһында бәйән итә, ҡала үҫешенең сәнәғәттән башлап мәҙәниәт һәм спортҡаса мөһим йүнәлештәренә туҡтала, милләт-ара мөнәсәбәттәрҙе камиллаштырыу буйынса ыңғай тәжрибә туплануына баҫым яһай. Ҡаланың рухи-мәҙәни һәм милли үҫешендә өҫтөнлөклө йүнәлеш булып республикала йәшәгән халыҡтарҙың милли мираҫын һаҡлау һәм популярлаштырыу тороуын, Халыҡтар дуҫлығы йортонда башҡа бик күп йәмәғәт ойошмалары менән бер рәттән "Ала - Тоо" Ҡырғыҙ мәҙәниәте үҙәге төбәк йәмәғәт ойошмаһы уңышлы эшләп килеүен билдәләй. Осрашыу барышында шулай уҡ спорт, мәғариф, мәҙәниәт буйынса хеҙмәттәшлек, ҡала территорияларын төҙөкләндереү, инфраструктураны үҫтереү өлкәһендә тәжрибә уртаҡлашыу, эшлекле даирәләрҙең тығыҙ бәйләнешен булдырыуға ынтылыу кәрәклеге лә һыҙыҡ өҫтөнә алына. Ҡырғыҙ коллегаларҙа башҡа яңылыҡтар менән бер рәттән, ҡаланы йәшелләндереү проекты ла ҙур ҡыҙыҡһыныу тыуҙыра. Был хаҡта Ирек Ялалов менән осрашыуҙа Бишкәк ҡала кәңәше Алмаз Кененбаев белдерә. Ул 2017 йылда Өфөгә килгәндәрендә ҡаланы йәшелләндереү һәм төҙөкләндереү буйынса күп нәмәгә өйрәнеп ҡайтыуҙарын билдәләй. Һөйләшеүҙәр һәм ике аралағы килешеү нигеҙендә киләсәктә Өфөлә - Тянь-Шянь шыршылары, ә Бишкәктә Башҡортостан йүкәләре йәки миләштәре тирә-яҡты йәшеллеккә күмеүе ихтимал.

Оператив кәңәшмәлә Ирек Ишмөхәмәт улы әйтеп үтеүенсә, Бишкәктә Өфө делегацияһы Ҡырғыҙстанда йәшәүсе башҡорт диаспораһы менән осраша. "Бөгөн Ҡырғыҙстанда 2000 самаһы башҡорт иҫәпләнә. Ойошма 1988 йылда Ҡырғыҙстан халыҡтары ассамблеяһы ҡарамағында ойошторола. Милләттәштәребеҙ Ассамблея уҙғарған барлыҡ сараларҙа ҡатнаша, башҡорт халҡының мәҙәниәте, йолалары, ғөрөф-ғәҙәттәре менән таныштыра. Оло йәштәгеләр өсөн Үҙәктә "Сарман" ансамбле эшләй, төрлө милли саралар уҙғарыла, йәштәр туған телен онотмаһын өсөн башҡорт йәкшәмбе мәктәбе эшләй. Диаспора вәкилдәре миңә уҡыу процесын ойоштороуҙа һәм мәктәп өсөн башҡорт теле дәреслектәре, шулай уҡ балалар милли кейемдәре менән тәьмин итеүҙә ярҙам һорап мөрәжәғәт итте. Инициатива хуплау тапты һәм тиҙ арала тормошҡа ашырыласаҡ", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА**
**әҙерләне.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың баш ҡалаһында ҡала хеҙмәттәре эшселәре фонтандарҙы асырға әҙерләй башланы - коммуникацияларҙы һәм ҡорамалдарҙы ҡышҡы осорға консервациялау осоро тамамланды. Коммуналь хеҙмәткәрҙәр (улар 19 фонтанды хеҙмәтләндерә) электр ҡорамалдарының, насостарҙың төҙөклөгөн тикшерә, шулай уҡ кәрәкле ҡорамалдар ҡуя. Ҡала фонтандары таҙартыу, кәрәк булған осраҡта монтажлау процедураларын үтә. Ғәҙәттәгесә, фонтандар миҙгеле 1 Май байрамдарына асыла.

✓Йыл башынан Өфөләге 102 предприятие һәм ойошма 1 928 кешене эштән ҡыҫҡартырға мәжбүр булған. Мәшғүллек хеҙмәтенең һуңғы мәғлүмәттәренә ярашлы, эштән бушатылыу хәүефе янаған хеҙмәткәрҙәр һаны 2 147 кеше тәшкил иткән. Ҡыҫҡартылған хеҙмәткәрҙәрҙең 951-е эшкә урынлаштырылған. Бөгөнгө көнгә Башҡортостандың баш ҡалаһында биш меңдән ашыу рәсми теркәлгән эшһеҙ иҫәпләнә.

✓"Башнефть" компанияһының яғыулыҡ ҡойоу станцияларында яғыулыҡ ҡыйбатланған. АИ-92 һәм АИ-92 "Атум" маркалы бензин 30 тингә ҡиммәтләнгән, хәҙер уларҙың хаҡы 37,60 һәм 38,20 һум. Дизель яғыулығының бер литрын 40,6 һумға һаталар, хаҡы 20 тингә артҡан.

✓Башҡортостанда уҙған йыл аҙағында пенсионерҙарҙың уртаса страховка пенсияһы 12 714 һумға етте. 2017 йылдың башында был күрһәткес республикала 12 080 һумға тиң ине, тип хәбәр итә Башҡортостанстат. Шул уҡ ваҡытта ҡартлыҡ буйынса уртаса пенсия күләме бер йылда 13 109 һум тәшкил иткән. Инвалидлыҡ буйынса - 8 334 һум, ҡараусыһын юғалтыу осрағы буйынса - 8 720 һум. Дәүләт пенсия тәьминәте буйынса пенсия алғандарҙың уның уртаса суммаһы 2017 йыл аҙағында 9 068 һумға етте.

✓2018 йылда баш ҡала сәскәселәре йәйгеһен парктарҙа, скверҙарҙа һәм урамдарҙа ҡала сәскәлектәрен биҙәйәсәк 261 мең бер йыллыҡ сәскә үрсетмәһен үҫтерергә күҙаллай. Атап әйткәндә, коммуналь хеҙмәткәрҙәр 80 мең петуния, 15 мең бәрхәт үлән һәм 14 мең цинерария ултырта. Быйыл Өфө халҡын һәм баш ҡала ҡунаҡтарын яңы сәскә ултыртыу схемалары менән ҡыуандырырға ниәтләнәләр. Билдәләп үтергә кәрәк, "Башҡортостан сәскәләре" миллиондан ашыу 40 төр сәскә үрсетмәһе ултыртырға ниәтләй.

*✓ Орджоникидзе районындағы Еңеү аллеяһындағы өмәгә район хакимиәте хеҙмәткәрҙәре һәм Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы ирекмәндәре, мәктәп уҡыусылары менән бергә Өфө хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та сыҡты.*



...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ЭЙЕЛҺӘҢ - ТАБЫРҺЫҢ...

**(Башы 1-се биттә).**

Бындай ҡырағайлыҡтан һуң артабан тәҙәкләндереү эштәре дауам итерме, юҡмы? Ә бит дамба ял итеү, спорт менән шөғөлләнеү урыны булараҡ ҡына ҡаралмай. Өфөнән байтаҡҡа тәпәшерәк урында ултырған Сипайловоны һыу баҫыуҙан һаҡлай торған стратегик ҡоролма ла бит ул. Шуныһы ғына йыуандыра: донъяға изгелекле, яҡты күҙҙәр менән бағыусылар ҙа бар икән әле, шөкөр. Улар, бәлки, күберәктер ҙә. Быға мин әлеге дамбаны таҙартыу буйынса үткәрелгән шәмбе өмәһенә сығып, үҙ күҙҙәрем менән инандым. Өмә башланасаҡ иртәнге сәғәт 11-ҙе көтөп тә тормаған ҡайһы берәүҙәр. Дамбаға яҡын 17-се һәм 130-сы дөйөм урта белем биреү мәктәптәре уҡыусылары, шулай уҡ 64-се һәм 68-се торлаҡ-коммуналь хужалыҡтар коллективтары иртәнге сәғәт 9-ҙан сығып эшләй башлаған. "Үҙебеҙ эшләгән биләмәне таҙарттыҡ та, тиҙерәк дамбаға ашыҡтыҡ, - ти 68-се торлаҡ-коммуналь хужалыҡ мастеры Гөлнара Бердникова. - Урам һепереүселәр, слесарҙар, иҙән йыуыусылар, сүп-сар түгеүселәр - бөтәһе лә берҙәм сыҡты өмәгә, сөнки барыбер үҙҙәренә таҙартырға ҡала бит, ә бөгөн бергәләп эшләүе күңеллерәк тә, ырамлы ла".

Сәғәт 11 тулыуға дамбаның "Яр" кафеһы янына "Таҙа Өфө" проекты әүҙемселәре лә килеп етте, Яр буйы урамындағы йорттарҙа йәшәүсе халыҡ та ошонда эркелде - ҡыҫҡаһы, кемдәр таҙа, тәҙәк һәм матур ҡалала йәшәргә теләй, кемдәрҙең күңеле саф һәм битараф түгел - Сипайловоның үҙенән дә, Өфөнөң үҙәгендә йәшәгәндәр ҙә ошонда, йәмле



Ҡариҙел буйына ашыҡты. Өфө сәнғәт училищеһының фортепьяно класында уҡып йөрөгән Оля Добреднева менән дә беҙ ошонда таныштыҡ. Иғланды ишетеп ҡалған да, үҙ теләге менән килгән. Икеһе лә быйыл ғына 80-дәрен тултырған күршеләш-әхирәттәр Гөлшат Настенина менән Нина Никитина түштәренә "Таҙа Өфө" тигән логотиплы ҡыҙыл футболкалар кейеп тә алғандар. Әлеге өмәне ойоштороусы "Таҙа Өфө" проекты әүҙемселәре лә, баш ҡалабыҙҙың төрлө районларында йәшәүҙәренә ҡарамаҫтан, Ҡариҙел буйын да тотош баш ҡалабыҙҙы яратҡандай үҙ күрә икән. Бында йыйылғандарҙың иң күбеһе һәм дәртлеләре тап ана шул "Таҙа Өфө"ләр булып сыҡты ла. Өмәселәргә эш тәртибен аңлатыу маҡсатында йәһәт кенә мигинг ойоштороп ебәрҙеләр һәм ҡаланың Октябрь район хакимиәте башлығы Роберт Ахунов, ошо район һайлаусылары тарафынан БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты итеп ышаныс күрһәтелгән Елена Розина, "Таҙа Өфө" проекты етәксеһе Елена Воробьеваның ҡыҫҡаса сәләмләүҙәренән һуң, һаҡлағыс бирсәткәләр кейеп, шыптыр тоҡтар тотҡан таҙалыҡ һаҡсылары Ҡариҙел ярына һибелде. Пластик һауыттар, тимер-томор, быяла ватыҡтары, ҡағыҙ-ҡатырға һәм башҡа сүп-сарҙы һәр береһен сорттарға айырып йыйыу талап ителә, сөнки аҙаҡ улар ҡабаттан эшкәртелеүгә тапшырыласаҡ һәм шунан килгән аҡса ДЦП менән сирләүсе 7 йәшлек Илдар Сәфәровты аяҡҡа баҫтырыу өсөн махсус иҫәпкә күсереләсәк икән. Күп тә үтмәне, тоштош урындарҙа әлеге тоҡтарҙан "күбә" өйөмдәре ҡалҡып сыға ла башланы. "Тәҙрәнән күҙәтеп торҙом да, түҙмәнем, килеп сыҡтым бына, - ти ике яҡлап та таяҡтарға таянған 97 йәшлек ветеран Тимерйән ағай Шаһиев. - Эшләргә рәт булмаһа ла, исмаһам, балаларға рәхмәтемде әйтәйем, тием. Мин бит көн дә ошо дамбаға йөрөргә сығам. Хәҙер бигерәк тә сыҡҡы килеп торор инде, ниндәй таҙа, күңелле булып ҡалды",- тип һөйөнә ул.

Әйткәндәй, Яр буйы урамындағы мәктәп уҡыусылары әлегә "Таҙа Өфө" проекты ағзалары булып тормаһа ла, был көн күпте аңлағандыр. Тәртиптәрен күҙәтеү йәһәтенән, ҡыҙыҡһынып, күберәк 9-сы кластар янында эшләргә тура килде. "Кемдер ташлап киткән, ә нинә мин эйелергә тейеш?" - тип мыжыны тәүҙә бер үҫмер ризаһыҙлыҡ белдереп. "Эйелһәң, эҙләгәнеңде табырһың",- тип тыныс ҡына яуапланы уға класс етәксеһе һәм эшләгәндә һәр кемеһенә ла ошо мәҡәлдең мәғәнәһенә төшөнөргә тырышыуҙарын һораны. "Ә дүшәмбе ошо темаға инша ла яҙырбыҙ",- тип өҫтәне. Кемеһе ни турала уйланғандыр, әммә бер аҙҙан мин ҡайтырға ҡуҙғалғанда, әлеге үҫмер тағы күҙгә салынды: сүп-сар тулы ике тоҡто ҙур өйөм ягына өҫтөрәй, үҙе мут йылмая: "Бына, "байлыҡ" таптым!"

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тәүге яҙғы өмәлә Башҡортостанда йәшәүсе 53 меңдән ашыу кеше ҡатнашты. БР Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәте мәғлүмәте буйынса, 14 апрелдә шәмбе өмәләренә 1,1 меңдән ашыу берәмек техника йәлеп ителде, ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары полигондарына һәм сүплектәргә 900 тонна самаһы ҡаты көнкүреш ҡалдыҡтары сығарылды.**

**Өмәләр урман-парктарында, скверҙарҙа, парктарҙа, мәктәп, балалар баҡсалары һәм медицина учреждениелары биләмәләрендә үтте, уларҙа дәүләт ведомстволары, торлаҡ-коммуналь хеҙмәт, район хакимиәте, предприятие һәм ойошма хеҙмәткәрҙәре, уҡыусылар һәм студенттар ҡатнашты.**

**Әйткәндәй, баш ҡалабыҙҙың Орджоникидзе районындағы Еңеү аллеяһындағы өмәгә район хакимиәте хеҙмәткәрҙәре һәм Өфө яғыулыҡ-энергетика колледжы ирекмәндәре, мәктәп уҡыусылары менән бергә Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов та сыҡты. "Шәмбе өмәһендә йәштәрҙең ихлас ҡатнашыуы ҡыуандырҙы, таҙалыҡ бит һәр беребеҙҙең үҙенән башлана", - тине Ирек Ишмөхәмәт улы.**

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ДОНЪЯ ШАНДАУЫ



# БЫЛ НИНДӘЙ ҺӨЖҮМ?

**Сирия биләмәһе ракета утына тотолдо. Американың Бөйөк Британия һәм Франция менән берлектәге был аҙымын бер кемгә кәрәкмәгән һәм ҡыйралыштан башҡа бер ниндәй ҙә файҙа килтермәгән башбаштаҡлыҡ тип ҡарарға була. Рәсәй башлығы фекеренсә, улар террористарға юл аса, гуманитар һәләкәтте киҫкенләштерә, ҡасаҡтарҙың яңы тулҡынын булдыра.**

Ни өсөн һөжүм иттеләр? Бәшәр Әсәд химик ҡорал ҡуллана, тигән дәлилләнмәгән сәбәп нигеҙендә тотош илгә ракета уты яуҙырыу аҡылға һыймай. Химик ҡорал ысынлап та ҡулланылған булыуы асыҡланып та өлгөрмәне бит әле, сөнки ошо өлкәлә эшләүсе белгестәр быны тикшереү өсөн Сирияға килеп етмәҫ элек һөжүм башланды. Хәҙер инде ысынлап та химик ҡорал ҡулланылғанмы, юҡмы икәнен асыҡлап булмаясаҡ, сөнки ут барыһын да юҡ итте.

Сирияның Республика гвардия һәм махсус тәғәйенләнештәге "Тигр" Көстәр штабтары айырыуса көслө утҡа тотолдо. Шул уҡ ваҡытта был һөжүм итеүсе йәйәүле ғәскәрҙәрҙең бер ҡасан да химик ҡоралға ҡағылышы булманы. Улар, дөрөҫөн әйткәндә, Сирия хөкүмәтенең террористар менән көрәшеүсе төп көсө. Шуға күрә нәҡ уларҙың штабы утҡа тотолоуына аптырарға түгел. Был ике ғәскәрҙе юҡ иткәндә террористар иркен һулап ҡаласаҡ: улар өсөн яңы юлдар асыласаҡ.

Сирияға осоролған 100-ҙән ашыу ракетаның 32-һе ергә төштө, тиеләр. Бер нисә кешенең йәрәхәтләнеүен һәм биналарҙың ҡыйралыуын иҫәпкә алмағанда, әлеге һөжүм туранан-тура хәрби һөҙөмтәгә эйә булманы. Ләкин икенсе нәмә борсоуға һала. Ил биләмәһендәге террористар, ракета утынан һуң, дөйөм һөжүмгә күсергә, тигән фарман ала. Тимәк, Америка, үҙенең союздаштары менән берлектә, илдәге граждандар һуғышын ҡыҙыулаштырыуҙы маҡсат итеп ҡуя, сөнки күп илдәрҙең башына еткән "төҫлө революция" әле булһа Сирияны ғына "бөгә" алмай. Ә үҙҙәренең һүҙен өҫкә сығарып өйрәнгән Көнбайыш илдәре өсөн был хурлыҡ булып күренә, күрәһең. Шуға күрә лә Сириялағы ғауғаның тынмауын әленән-әле "тәьмин" итеп торалар ҙа инде улар.

Шул уҡ ваҡытта оҙайлы бәрелештәр хөкүмәт ғәскәрҙәренең генә түгел, террористарҙың да хәлен алды. Ә Рәсәйҙең Әсәдте яҡлауы уларҙың артабанғы көрәшен бөтөнләй мәғәнәһеҙ итә. Шулай уҡ һөжүмдәрен яңыртҡан хәлдә улар әлеге мәлдә ғәмәлдә булған ваҡытлы килешеү шарттарын боҙасаҡ. Был осраҡта Сирия ғәрәп армияһы уларҙы юҡ итеү өсөн бөтә сараларҙы ла ҡуллана ала һәм дөрөҫлөк улар яғында буласаҡ.

Сирияға ҡарата башҡарылған ракета һөжүменә ҡарата күптәр ризаһыҙлыҡ белдерҙе. Шулай ҙа уны яҡлаусылар ҙа юҡ түгел. Әлегә үҙ фекерен белдермәйенсә, ваҡиғаны ситтән генә күҙәтеүселәр ҙә етерлек. Нисек кенә булмаһын, Сирияға йүнәлтелгән ракета һөжүме эҙһеҙ булмаясаҡ һәм уның эҙемтәләрен яҡын киләсәктә үк күрәсәкбеҙ әле.

**Сәлимә АРЫҪЛАНОВА әҙерләне.**

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Йүткереү

❖ Йүткереүҙе, пневмонияны мәтрүшкә дауалай. 75 грамм мәтрүшкәгә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм йылы көйөнә көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда яртышар стакан эсергә. Пневмонияның дауа формаһында бынан тыш тағы ла бер дауа ҡушып сихәтләнегеҙ. Эмалле һауытҡа 1 стакан ярҙырылмаған һоло һалып, уға 1 литр һөт ҡойорға ла, 1 сәғәт талғын утта бешерергә, һөҙөргә һәм аҡ май, бал өҫтәп, йоҡлар алдынан эсергә. Төнәтмәләрҙе көн һайын әҙерләргә.

### Күҙ төбө ҡарайыуы

❖ 1 балғалаҡ ҡара сәйгә 1/4 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 40 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм мамыҡты сылатып, 10 минутҡа күҙ ҡабаҡтарына һалырға ла, алыштырырға. 3-4 тапҡыр эшләргә. Иң һуңынан һалҡын һыуға манылған мамыҡ ҡуйҙығыҙ һәм күҙ ҡабаҡтарына крем һөртәбеҙ.

❖ Ҡабығында бешкән картуф киҫәген 10 минутҡа күҙ ҡабаҡтарына һалырға була.

### Экзема

❖ Май айында ҡарама ағасы орлоғонда барлыҡҡа килгән шыйыҡсаны һөртөргә. Ялан сәскәләренән яһалған төнәтмә менән йышыраҡ ҡойонорға.

❖ Тигеҙ күләмдә үҫемлек майы менән һеркә алырға, экземалы урындарға һөртөргә.

### Баш ауыртыуы

❖ Баш ауыртыуынан һырғанаҡ һуты ярҙам итә. Марляны икегә бөкләп, уны һутта еүешләп, сикәләргә лә төшөп торорлоҡ итеп маңлайҙы ҡапларға. 1 балғалаҡ кейәү үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, шулай уҡ компресс эшләргә була.

### Бронхит

❖ Балаларҙа бронхит булһа, 2 йомортҡаны сусҡа майында ҡыҙҙырырға һәм тоҙ һибергә. Һыуынғас, төнгөлөккә баланың түшенә ҡуйырға.

❖ Ҡыҙыл ҡабыҡлы ҙур булмаған һуғанды ҡабығынан таҙартып, уртаһын бер аҙ соҡоп алығыҙ һәм 1 балғалаҡ шәкәр һалығыҙ. Һауыҡҡансы бала көн һайын ошолай әҙерләнгән һуған ашарға тейеш.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

*✓ Граждандар һуғышы ваҡытында ҡартәсәйемдең боронғо хәситәһен һалдаттар талап алып китә. Ҡалған тәңкәләрен йәшерер өсөн өләсәйем уларҙы ситәнгә һыйыр тиҙәге менән ҡуша һылап ҡуя.*



*ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...*



# БӘЙҒӘМБӘРҘӘР

## Әҙәмдең донъяға яратылыуы

Алла: Иҫеңә төшөр... Хоҙай ергә идарасыһын төшөрөргә уйлауын иғлан иткәс... фәрештәләр: "Ергә Һин ихтыяж талап ителмәгән нәмәләрҙе ҡыласаҡ, ҡан-ҡойоштар ойоштораса҇ҡ, бысраҡ уй-ниәттәре менән кешеләр араһында дошманлыҡ тыуҙырасаҡ кешене төшөрөрһөңмө икән ни? Ә беҙ Һине данлайбыҙ, Һиңә ярамаған нәмәләрҙе ситкә ҡағабыҙ, миһырбанлығыңа табынабыҙ", - тигән. Алла: "Мин бөтөн нәмәне лә күреүсе һәм һеҙ белмәгән нәмәләрҙе белеүсе!", - тигән. Ибн Ҡасир әйтеүенсә, Алла шулай тип Әҙәмде һәм уның балаларын яралтыуының, уларҙың ерҙә бербереһенә эйәрәсәгенең төп асылын аңлатырға тырыша.

Икенсе бер аятта Алла: "Был - һеҙҙе һеҙгә тиклем йәшәгән халыҡтарҙың вариҫтары иткән һәм камиллыҡ, матди, әхлаҡи дәрәжәгеҙ буйынса берәүҙәрҙе икенселәренән өҫтөнөрәк иткән Алла. Ул һеҙҙе нимә биргән...шуның менән һынай... буйһонмаусыларҙы язаға тарттырырға Хоҙай өлгөр... Гонаһтарына үкенеүселәрҙе ғәфү итеүҙә Алла Бөйөк, изге эштәр атҡарыусыларға ҡарата Мәрхәмәтле һәм Йомарт!"- тиелә. Шулай уҡ Ул: "Кем бәләгә тарып, ярҙамға мохтаж булған кешенең үтенесен кире ҡаҡмай, Алланан ҡурҡырға, Уға һыйынырға өндәй, кем кешене яһиллығынан арындырып, ғазаптарын бөтөрә һәм һеҙҙән һеҙгә тиклем йәшәгән кешеләрҙең вариҫтары яһай. Ошо бәхетте биреүсе Алла янында башҡаса Алла юҡ. Ләкин һеҙ, динһеҙҙәр, был һабаҡтарҙан фәһем алмайһығыҙ",- ти. Алла Әҙәмде һәм уның балаларын яралтыуын әйтеп, фәрештәләрҙе алда буласаҡ бөйөк ваҡиғаға әҙерләй.

Ә Катада: "Фәрештәләрҙең: "Ергә Һин ихтыяж талап ителмәгән нәмәләрҙе ҡыласаҡ, ҡан-ҡойоштар ойоштораса҇ҡ, бысраҡ уй-ниәттәре менән кешеләр араһында дошманлыҡ тыуҙырасаҡ кешене төшөрөрһөңмө икән ни?" - тип һорауы уларҙың Алланың уйына ҡаршы килеүен, кешелекте түбәнһетергә тырышыуын, ҡайһы бер тәрбиәһеҙҙәр уйлағанса, Әҙәмдән көнләшеүен түгел, ә Әҙәмде яралтҡанға тиклем ерҙә йәшәгән ендәр менән аралашыу тәжрибәһенә эйә булғанлыҡтан, алда ниҙәр булыр икән?" тип ҡыҙыҡһыныуҙарын аңлата",- ти. Ибн Ғүмәр: "Әҙәм яралтылғанға тиклем ерҙә ике мең йыл буйы ендәр күп ҡан ҡойош ойошторҙо. Алла уларҙы утрауҙарға ҡыуыр өсөн ергә фәрештәләрен төшөрҙө", - ти. Ә Ибн Ҡасир: "Фәрештәләр: "Һинең миһырбанлығыңды данлайбыҙ", йәғни, "Әгәр маҡсат кешелектең дә Һине хөрмәтләүендә булһа, о Хаким, беҙ арымай-талмай Һиңә табынасаҡбыҙ", тип, Уға тоғро ҡаласаҡтарын белдерә, ти.

Алла Әҙәмде яралтып, фәрештәләргә уның алдында баш эйергә ҡушҡас, Иблестән башҡа барыһы ла Әҙәмгә баш эйә. Иблес ожмахтан ҡыуыла һәм унда Әҙәмде индерәләр. Ул унда яңғыҙы күңелһеҙ генә йөрөй. Бер мәл арыуҙан ҡаты йоҡоға тала. Уянһа, башы осонда бер ҡатын ултырыуын күрә һәм "Кем һин?" тип һорай. "Мин - ҡыҙ-ҡатын", тип яуаплай тегеһе. Ә ҡатынды Алла Әҙәмдең ҡабырғаһынан яһаған була. "Һин ни өсөн яратылдың һуң?" ти Әҙәм ғәжәпләнеп. "Һине йыуатыусы хеҙмәтен үтәү өсөн", ти ҡатын. Шунан фәрештәләр Әҙәмде тикшереп ҡарау өсөн "Әҙәм, ә уның исеме кем?" тип һорай. "Һауа", тип яуаплай ул. "Ни өсөн исеме улай?" ти фәрештәләр. "Һауа, сөнки ул тере материянан яратылған".

Әл-Бохари сәхибендә: "Ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата мәрхәмәтле булығыҙ, сөнки улар Әҙәмдең ҡабырғаһынан яратылған, ә ҡабырғаның ҡыйшайған ере - уның өҫкө өлөшө. Әгәр ошо кәкерене турайтырға маташһағыҙ, һындырып ҡуйыуығыҙ бар. Ләкин теймәһәгеҙ, ҡыйшайған көйө ҡаласаҡ. Шуның өсөн мин ҡайта-ҡайта ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата миһырбанлы булыуығыҙҙы кәңәш итәм", - тиелә.

**(Дауамы бар).**

*РУХИӘТЕБЕҘ*

# ИҘЕҮҘӘРҘӘ - ХАЛЫҠ ЯҘМЫШЫ

**Һәр кемдең ниндәйҙер эшкә тотонор алдынан күңеленә илһам, йөрәгенә дәрт килеүе шарттыр ул. Бына мин дә һуңғы ваҡытта бик популярлашып киткән иҙеүҙәр (селтәр, һаҡал) эшләү менән мауығып киттем. Күңелемә ял биргән шөғөл ваҡытында башыма шундай уй килде. Бәй, һәр бер әйберҙең үҙ тарихы була ла баһа! Әлеге көндә күңел йылымды һалып, күҙ нурҙарымды түгеп эшләп ултырған ошо биҙәүестең дә тарихы буласаҡ берәй ваҡыт. Балаларым үҙ балаларына һөйләп ҡалдырырҙай ҡомартҡы тыуҙырам түгелме һуң мин? Ошо уйҙан тетрәнеп киттем.**



Ә беҙҙең ауылда булған боронғо иҙеүҙәрҙең тарихы ниндәй икән һуң? Уларҙың хужалары ла күпте күргәндер ҙә, был иҙеүҙәр ябай биҙәүес кенә түгел, тарих та һаҡлайҙыр әле! Кем, ҡасан эшләгән был биҙәүестәрҙе, беҙҙең көндәргәсә нисек килеп еткән улар? Был уйҙар мине ауылыбыҙҙа һаҡланған боронғо башҡорт ҡатын- ҡыҙҙарының биҙәүестәрен үҙ ҡулдарым менән тотоп ҡарау, тикшереү, өйрәнеү теләгенә килтерҙе. Был инде интернеттан ҡарап, йәиһә китаптарҙан уҡыу ғына түгел. Был - ваҡыт даръяһы буйлап рухи ҡомартҡылар донъяһына сәйәхәт, тамаша ине минең өсөн.

Шулай итеп, Баймаҡ районының Ярат ауылында боронғо өс иҙеү һәм бер иҙеүле күлдәк табылды. Эйе-эйе, Баймаҡтар "селтәр" тип атай тиһәләр ҙә, беҙҙең инәйҙәр иҙеү тип атаны был биҙәнеү әйберен. Иң оло йәштәге боронғо иҙеү хужаһы 77 йәшлек **Мырҙабулатова Гөлсөм** инәй хатта: "Хәҙер әллә ҡайҙан һаҡал, селтәр тип үҙгәртеп исем тағып бөттөләр. Минең ҡартәсәйем ғүмер буйы иҙеү тип атаны. Башҡа инәйҙәрҙең дә шулай әйткәнен хәтерләйем", - тип нығытып ҡуйҙы. Гөлсөм инәйҙең иҙеүе бик боронғо, көмөш тәңкәләрҙән һәм ысын мәрйендән эшләнгән. Түш өлөшөнөң тамамланған еренә 7 бөртөк аҡыҡ таш баҫылған. Аҫҡы өлөшө шау тәңкәнән тора. Ауырлығы 1 кг. Гөлсөм инәй әйтеүенсә, был иҙеү ҡыҫҡағыраҡ булған һәм ул аҫҡы яғына туҡыма өҫтәп, тәңкәләр тегеп оҙонайтып алған. Шуға күрә лә бында совет аҡсаларын да күрергә була икән. Иҙеүҙең артына кәзә ҡылынан эшләнгән туҡыма тегелгән. Иң боронғо тәңкә 1860 йылғы булып сыҡты. Шулай уҡ "Батырлыҡ өсөн" миҙалы ла баҫылған. Миҙалдың номеры ла асыҡ күренеп тора - 2079870. Әммә был миҙалдың кемдеке икәнен Гөлсөм инәй белмәй. Сөнки иҙеү быуындан-быуынға тапшырылып, уға 4-се быуын булып килеп эләккән. Мин "Подвиг народа" сайты аша миҙал хужаһын эҙләп ҡарағайным да, ыңғай һөҙөмтәгә юлыға алманым. Үкенес!

Гөлсөм инәйҙең ҡартәсәһе Миңлебикәнең Үмербикә исемле апаһынан тапшырылып килә икән был биҙәүес. Миңлебикә инәй (1886 йылғы) иҙеүҙе ҡыҙы Бүләкбикәгә 1936 йылда бирә. Бүләкбикә инәй Хәйбулла районы Рафиҡ ауылында йәшәй. Үҙенең ҡыҙҙары булмау сәбәпле, иҙеүҙе 2002 йылда Гөлсөм инәйгә ҡомартҡы итеп тапшыра. Килендәренең үпкәләүенә лә ҡарап тормай, сөнки өләсәләренән аманат итеп әйтелгән - ҡатын-ҡыҙ линияһына ғына тапшырырға! Аманатҡа хыянат итмәгән Бүләкбикә инәйҙең иҙеүе, шулай итеп, Яратҡа килеп юлыға. Гөлсөм инәй ҡомартҡыны бик тә ҡәҙерләп һаҡлай. Әммә артабан кемгә тәғәйенләнеп ҡуйылғанын әйтмәне, сер. Шулай ҙа боронғоноң баһаһын белгән туғанына тапшырылаһы асыҡ.

**Назарова Рәсимә** апайҙың шау көмөш иҙеүе иһә, тап китаптарҙа һүрәтләнгән көньяҡ-көнсығыш башҡорттарыныҡы. Өҫкө яғы ысын мәрйендән тултырып, ҡыя биҙәктәр һалып тегелгән. Был мәрйендәрҙең һәр бер бөртөгө, ныҡлыҡ өсөндөр инде, айырым типселгән. Түш бүлемдәре лә айырым асыҡ күренеп тора. Ә түшенең ҡап уртаһына ҙур ғына мәрүәт беркетелгән. Мәрүәтте халыҡ ауырыуҙарҙан һаҡланыу сараһы булараҡ ҡулланған икән. Билбау өлөшөнән аҫта суҡтар менән тамамланған мәрйен селтәр, селтәр өҫтөнә сулпы беркетелгән. Иҙеүҙең артҡы өлөшөнә шулай уҡ кәзә ҡылынан һуғылған туҡыма тегелгән. Нимәһе ҡыҙыҡлы: Рәсимә апайҙың да, Гөлсөм инәйҙең дә иҙеүҙәрендә бер үк итеп эшләнгән ҡаптырма өлгөләре тағылған. Тимәк, был иҙеүҙәрҙең көмөш элементтары бер үк оҫта тарафынан һуғылған, тигән һығымта яһай алабыҙ. Тағы ла бер ҡыҙыҡлы мәғлүмәт - иҙеүҙә Рейхстаг төшөрөлгән тәңкә лә, Николай башы төшөрөлгәне лә бар. Был үҙ сиратында иһә, ир-егеттәрҙең ҡайҙа барһа ла (хатта һуғышҡа барғанда ла) ҡатын-ҡыҙҙар өсөн бүләккә тәңкәләр алып ҡайтып биреү йолаһы булғанлығы тураһында һөйләй. Халыҡ йырында ла бит ана:

Алтын ғына тәңкә, ай, бирәйем,
Алмиҙеүкәйеңә лә баҫырһың, - тип йырлана.

Рәсимә апай иҙеүҙе 15 йылдар элек ауылдаш ҡатындан һатып алған булып сыҡты. Үҙенең ҡартәсәләре иҙеүҙәрен һаҡлай алмаған, граждандар һуғышы йылдарында һалдаттар тәңкәләрен талап аптыратҡан, аҙаҡ Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында танк эшләүгә тип, тағы ла хөкүмәткә тапшырғандар. Ошо хаҡта әсәһе Мәрхәбә инәй һәр ваҡыт әсенеп һөйләй торған булған. Ә был биҙәүестең төп хужаһы Баймаҡ районының 2-се Эткол ауылынан булған икән. Рәсимә апай 4-се, йә 5-се хужаһы булырға тейеш. Был бик үҙенсәлекле, боронғо биҙәүесте һаҡлап тотҡаны өсөн Рәсимә апайға оло рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ.

Тағы ла бер тарихи иҙеү **Ғәҙелшина Хәбирә** апайҙа табылды. Уның иҙеүе шау тәңкәнән тора. Өҫкө яғында бер рәт итеп 9 бөртөк мәрүәт төймә тағылған. Был иҙеүҙең яҙмышы иң аяныслыһы тойолдо миңә. "Минең өләсәйем Абдуллина Файза сығышы менән Силәбе өлкәһе Ҡыҙыл районынан. Уны 9 ғына йәшендә Йомаш ауылына кейәүгә бирәләр. Әммә ире 1914 йылғы ярман һуғышына китеп һәләк булғас, өләсәйем Батҡаҡлы ауылына Сөләймән ҡартатайыма тормошҡа сыға. Был ауыл хәҙер юҡ инде. Граждандар һуғышы ваҡытында ҡартәсәйемдең боронғо хәситәһен һалдаттар талап алып китә. Саф көмөш биҙәүестәр ҙур байлыҡ һаналған бит ул ваҡытта ла. Ҡалған тәңкәләрен йәшерер өсөн өләсәйем уларҙы ситәнгә һыйыр тиҙәге менән ҡуша һылап ҡуя. Аҙаҡтан, донъялар именләнгәс, 1931 йылда ошо иҙеүҙе эшләй. Өләсәйем 107 йәшенә етеп донъя ҡуйҙы. Ул иҙеүҙе әсәйемә тапшырҙы, унан миңә күсте. Мин тәүҙә матурлап, яңыртып эшләргә уйлағайным да, өләсәйемдең ҡул йылыһы бөркөлөп торған әйберҙе һүтергә ҡыйманым. Әйҙә, быуындан-быуынға ошо килеш тапшырылып килһен. Хәҙер инде ҡыҙым Гөлсәсәккә аманат ҡылдым", - тип һөйләне Хәбирә апай.

**Дәүләтбаев Ильяс** олатайҙың ҡулында тағы ла бер ҡыҙыҡлы ҡомартҡы осраны. Был - уның әсәһе Мәликә инәйҙең (1905 йылғы) иҙеүле күлдәге. Элек күлдәктәрҙе түшенә төрлө туҡыманан ошолай иҙеү һалып теккәндәр икән. Уҡа иҙеүҙәр ҙә булған.

Ләү-ләү, ләү сәтин,
Күлдәге көрән сәтин.
Уҡа икән иҙеүе лә,
Йөрәгемдең түҙеүе, - тигән таҡмаҡ шул замандан ҡалғандыр ҙа. Иҙеүҙе тәңкәләр баҫып биҙәгәндәр. Был күлдәктең иҙеүендә лә боронғо көмөш тәңкәләр бар. Мәликә инәй һуғыш ваҡытында кашауар (ашнаҡсы) булып эшләгән ҡатын. Ире һуғышҡа киткәс, ике балаһы менән яңғыҙ ҡала. Ильяс олатай әсәһенең ошо күлдәген ҡәҙерле ҡомартҡы итеп һаҡлап, әлеге көндә ауыл музейына тапшырған. Музей эсендәге тирмәнең түрендә тап ошо күлдәк тора.

Күрше Ғүмәр ауылында йәшәүсе **Хәсәнова Айһылыу** апай иҙеүен 2007 йылда уҡ дәрт итеп үҙе эшләгән. Әммә уның иҙеүендә лә ысын мәрйен ҡулланылған булып сыҡты. Айһылыу апайҙың иҙеүендә ҡортбаштар, көмбәҙле тәңкәләр, Ҡөрьән сүрәһе яҙылған тәңкә лә бар хатта. Ҡайһы берәүҙәрен ул талир тәңкәләр тип атаны. Был боронғо тәңкәләрҙе ул ҡәйнәһе Хәсәнова Сәмсиямал инәйҙең (1905 йылғы) ҡомартҡы сулпыһынан (сәсбау) алып теккән. Ҡортбашты таҡ һанда ҡуйырға кәрәклеген дә әйтте Айһылыу апай.

Бына ниндәй тарихлы иҙеүҙәрҙе күрергә, улар менән хатта күңелемдән серләшергә тура килде миңә! Аҙаҡ был башҡорт ҡатын-ҡыҙының ғорурлығы булған биҙәүестәрҙең фотоларынан ғына ла айырыла алмай һәр бер биҙәген өйрәнергә, ҡулымда саҡта күрмәгәнде күрергә тырышып ултырғанымда иҙеүҙәрҙең милли хазинабыҙ, тарихыбыҙ сығанағы икәненә ҡабат-ҡабат инандым. Ысынлап та халыҡ яҙмышы. Иҙеүҙәрҙә - халыҡ яҙмышы...

**Миләүшә ЮЛДАШБАЕВА.**
**Баймаҡ районы Ярат ауылы.**

*"Бер ырыуҙа ике милләт булмай. Шуға күрә, йыйын барған залдан сыҡҡанда көнбайыш диалектында һөйләшкән һарайлы-меңдәр ҙә, беҙ - башҡорт, тип, барыбыҙ бер милләт булып сығырға тейешбеҙ".*

*ЫРЫУЫҢ КЕМ?*

**Борон-борондан, илгә хәүеф янағанда, ҡатмарлы хәл-торош килеп тыуғанда, хәл итәһе мәсьәләләр тупланғанда башҡорттар йыйын йыйып, кәңәш ҡороп, ололарҙың аҡылын тыңлап, йәштәрҙең фекеренә ҡолаҡ һалып, бер ҡарарға килгән. Бөгөн дә республикала хәл-торошто еңел тип булмай: иҡтисад өлкәһе булһынмы ул, милли мәғарифмы, һаулыҡ һаҡлаумы һ.б. - ябай халыҡ ауырлыҡты үҙ елкәһендә татый.**

# МЕҢ ЕРЕ - МЕҢ БЕРЛЕГЕ



Бынан ике тиҫтә йылдар элек яҙыусы Булат Рафиҡов милләт алдында торған мәсьәләләрҙе хәл итеү маҡсатында Ырыуҙар хәрәкәтен башлап ебәргәйне. Заманында был йүнәлеште хатта трайбализмға тиңләүселәр, тәнҡит утына тотоусылар ҙа булманы түгел. Әммә бер тынып торған, бер ҡабаттан тоҡанып киткән был башланғыс һаман да йәшәп килә. Оҙайлы "тәнәфестән" һуң республикала тәүгеләрҙән булып табындар быйтыр үҙҙәренең йыйынын йыйһа, уларҙан эстафетаны юрматылар ҡабул итеп, сират меңдәргә етте. Дөйөм һаны 100 мең самаһы кешене берләштергән был ҡәбилә вәкилдәре бөгөн республиканың Ауырғазы, Әлшәй, Благовар, Благовещен, Дәүләкән, Ҡырмыҫҡалы, Миәкә, Иглин, Стәрлетамаҡ, Ауырғазы, Бишбүләк, Өфө, Шишмә районларында, шулай уҡ Татарстандың ҡайһы бер районларында, Һамар өлкәһендә йәшәй. Шуға ла һайланған делегаттарҙың зал тултырып ултырыуы ла юҡҡа түгел. Барлығы 600 делегат һайланһа, сара башланыуға уларҙың 560-ы теркәлеү үткәйне.

Төп доклад менән Мең ҡәбиләһенең ҡор башы, яҙыусы, филология фәндәре докторы, Салауат Юлаев ордены кавалеры Рәшит Шәкүр сығыш яһаны. "Беҙ, меңлеләр - башҡорт иленең нәҡ уртаһында урынлашҡан, башҡорт халҡының, Башҡортостаныбыҙҙың яҙмышы өсөн хәл иткес ваҡиғаларҙа туранан-тура ҡатнашып йәшәгән ғәйәт күп һанлы һәм ғәййәр ҡәүембеҙ, - тип, тарихҡа байҡау яһаны ул.- Мең ҡәбиләһе әүәлдән ошондай ундан артыҡ ырыуҙы берләштергән: мең (меңләр), çыбы-мең, күл илемең, илекәй-мең, çарайлымең, ҡобау-мең, өршәк-мең, меркет-мең, ҡырҡ өйләмең, яйыҡçыбы-мең, уçылы-мең. Башҡортостандың баш ҡалаһы Өфө лә меңлеләрҙең аçаба ерҙәрендә ултыра. Хатта революцияға тиклем хәҙерге Шишмә районында йәшәүселәргә, уларҙың ерҙәрендә ултырған ҡала өсөн ҡуртым хаҡы түләп торғандар. Шулай уҡ меңлеләрҙең күпселегенең йәнле һөйләү теле башҡорт теленең көньяҡ диалекты составындағы Дим һәм Өршәк һөйләштәрен тәшкил итһә, һарайлы-меңлеләрҙеке - көнбайыш диалектына ҡарай..."

"Тәүге йыйыныбыҙ бынан 24 йыл элек үтте, - тип һүҙен дауам итте Рәшит Закир улы. - Йыйындар ҡарарҙарында хәл ителергә һәм бөгөн дә күҙ уңында тотолорға тейешле мөһим проблемаларҙың бер нисәһен билдәләп китер инем. Беҙ, бөтөн халҡыбыҙ бер төптән тороп, 1999 йылда башҡорт теленә дәүләт теле статусын кире ҡайтарыуға өлгәштек һәм был совет осоронда иң мөһим ҡарарҙарҙың береһе булды. Беренсе йыйында шулай уҡ Өфөнөң һәр районында башҡорт балалар баҡсаһы һәм мәктәбе асыу проблемаһын күтәреп сыҡҡайныҡ. Был мәсьәлә әлегә тулыһынса тормошҡа ашманы. Шулай ҙа күҙгә күренерлек һөҙөмтәләр бар. Хәҙер Иҫке Өфөлә, Дим районында, Һупайлыла, Инорста, Шаҡшала башҡорт мәктәптәре ныҡлап аяҡҡа баçты.

Әлшәй районы үҙәге Раевкала бай тарихы булған башҡорт урта мәктәбен тергеҙеү көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе ине. Ул хәҙерге ваҡытта халыҡ сәсәне М. Буранғолов исемендәге лицей-интернат булараҡ киң билдәле. Милли мәғарифты үçтереү йәһәтенән Бәләбәй ҡалаһының башҡорт йәмәғәтселеге айырыуса әүҙемлек күрһәтте. Бәләбәй башҡорт мәктәп-интернаты хәҙер өлгө алырлыҡ мәктәптәрҙең береһенә әйләнде. Шулай уҡ Бәләбәй педучилищеһында башҡорт бүлеген астырыуға өлгәштек. Унда ошо яҡ ауылдарҙың, Дим буйы районларынан бер нисә быуын башҡорт балалары белем алып сыҡты.

Благовар районының Иçке Усман ауылында меңлеләрҙең тарихи-мәҙәни музейы асылыуы шатлыҡлы ваҡиға булды. Бында 2007 йылда һарайлы-меңлеләр үҙҙәренең ырыу йыйынын үткәрҙе, район үҙәге Языково ауылында меңлеләрҙең Рәсәй дәүләтенә ҡушылыу өсөн көрәшенә етәкселек иткән легендар Ҡәнзәфәр бей иçтәлегенә сквер асылды. Унда бөйөк ырыу башлығына һәйкәл ҡуйыу мәсьәләһен дә, ниһайәт, хәл итергә ваҡыт.

Дәүләкән районы Яңы Яппар ауылында ҡырҡ өйлөмеңлеләрҙең йыйынын үткәреү традицияға әйләнеп бара. Был инициативаның башында эшҡыуар Филүс Хәлиуллин тора.

Ырыуым, халҡым тип эшләнгән эштәрҙең тағы ла бер нисәһен атап үткем килә. Заманында бөйөк Аҡмуллабыҙҙы халҡыбыҙға ҡайтарып алыуға өлгәштек, беҙҙең дәүерҙә талантлы шағирә Лариса Абдуллинаның фиҙакәрлеге арҡаһында икенсе атаҡлы мәғрифәтсе - Сафуан Яҡшығолов ижады яңынан тергеҙелеү осорон кисерә.

Әлшәй районының Сурай ауылында уҡыусылар һаны 50 баланан артмаһа ла, директор Зәкиә Солтангәрәева етәкселегендәге уҡытыусылар коллективы белем усағын һаҡлап алып ҡалыу өсөн тирә-яҡ ауылдарҙан мәктәп йәшендәге балаларҙы алып килеп, үҙҙәрендә йәшәтеп уҡытыу юлы менән мәктәптәрен ябырға юл ҡуйманылар. Телебеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн заман шундай ҡаһарманлыҡтарға барыуҙы ла талап итә. Шул уҡ ауылда Минзәлә менән Ҡадурий Фазлетдиновтар үҙ иçәптәренә мәсет һалып, Бөйөк Ватан һуғышы яугирҙары хөрмәтенә һәйкәл ҡуйҙы. Ҡармыш ауылында Рәйес Һәүбәновтың тырышлығы менән мәсет бинаһы ҡалҡып сыҡты".

Глобаль күҙлектән ҡарағанда, был эштәр, әлбиттә, диңгеҙҙәге тамсы кеүек кенә тойола. Әммә ошо ергә ереккән, ошо ерҙә быуаттар буйына йәшәгән аçаба халыҡ өсөн уларҙың әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ. Шулай ҙа, уңыштарҙан баштар әйләнеп, эйфорияла йөрөргә лә ярамай. Социолог Илгиз Солтанморатовтың сығышынан күренеүенсә, тикшеренеүҙәр асыҡлауынса, 6 йыл эсендә дөйөм халыҡ һаны 6-10 процентҡа кәмегән. Һәм был күренеш мең ырыуы өсөн дә хас. Ауыл, район халҡы ҡалаларға ағыла, әммә бында уларҙы берәү ҙә шарттар тыуҙырып көтөп тормай. Был демография проблемаһына ла йоғонто яһамай ҡалмай, әлбиттә. Шуға күрә, уның: "Һәр район өсөн айырым үçеш программаһы әҙерләнергә тейеш",- тиеүе хуплап ҡаршы алынды.

Фольклорсы, филология фәндәре докторы Розалия Солтангәрәеваның сығышы мең ырыуы йолалары, дөйөм халыҡ йолалары хаҡында булһа ла: "Беҙ ҙә Башҡортостанды төйәк итеүселәргә бөйөк Атилла һымаҡ, минең еремә килгәнһең икән, иң тәүҙә йолаларымды хөрмәт ит, уларҙы өйрән, уларҙы үтә, тигән талап ҡуйырға тейешбеҙ", - тигән хәҡиҡәтҡә ишараланы. Ғөмүмән, һәр сығыш яһаусы уңыштарға ғына туҡталманы, проблемаларҙы ла күтәрҙе. Йыйын һуңында "Мең ере - мең берлеге" Мең ырыуы йәмәғәт ойошмаһының Устав проекты, флагы һәм эмблемаһы ҡабул ителде, яңы совет ағзалары һайланды, ҡор башы раçланды. Был вазифаны Рәшит Шәкүрҙән Әхнәф Тимербулатов ҡабул итеп алды. Ә инде эстафета штандарты Елдәк ырыуына тапшырылды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Донъяла ил хәтере, халыҡ хәтере тигән тәрән мәғәнәле төшөнсә бар. Илде - ил, милләтте - милләт итеп тотоп торған көстәрҙең береһе ул - хәтер. Беҙҙе бөгөн әүәл-әүәлдән, сал быуаттар төпкөлөнән ырыу-ырыу булып берләшеп, иңгә-инде терәп, ҡулға-ҡул тотоношоп, сал Уралдың тау һәм далаларында ғүмер иткән халҡыбыҙҙың тарихи хәтере бер ҡорға йыйҙы, бер ҡорға тупланы", - тигәйне үҙенең сығышында Рәшит Шәкүр. Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты рәйесе Әмир Ишемғоловтың сығышында яңғыраған бер фекер был һүҙҙәрҙе тағы бер ҡат раçланы һәм нығытты: "Бер ырыуҙа ике милләт булмай. Шуға күрә, йыйын барған залдан сыҡҡанда көнбайыш диалектында һөйләшкән һарайлы-меңдәр ҙә, беҙ - башҡорт, тип, барыбыҙ бер милләт булып сығырға тейешбеҙ". Йыйындарҙың төп маҡсаты һәм төп бурысы ла ошолор, моғайын.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Хәмит АЛҒАР*

# ҺУҢҒЫ БӨЙӨК ШӘЙЕХ

Татар суфый-нәҡшбәндиәселәренең икенсе иçкә алырлыҡ төркөмө Бохара шәйехе Ниязкули Хан Төркәмәни эйәрсендәренән булған. Был шәйехтең Бохарала баһаһы шул тиклем юғары булған ки, хатта хаким Әмир Хәйҙәр, үҙе лә дини шөһрәткә дәғүә итеүгә ҡарамаçтан, Ниязкули Хан Төркәмәни ойоштороған суфый йыйылыштарында ҡатнашыу теләген белдергән. Ниязкули Хандың татарҙарҙан иң көслө уҡыусыһы арҙаҡлы Әбүнасыр әл Ҡурсауи (Ҡурсауи исеме аçтында билдәле; вафаты - 1812 йыл) булған. Моғайын, ул татар тарихында иң бөйөк Ислам ғалимы булғандыр. Ғөмүмән, ул илаһиәт асылы буйынса рациональ һорауҙар ҡуйыусы ғалим һәм XIX быуат башында татарҙар араһында секуляристик (диндән айырмалы) фекер тарала башлауға юл һалыусы яҙыусы итеп ҡарала. Ҡыҙғанысҡа ҡаршы, уның хеҙмәттәренең күбеһен табып булмай, әммә ышаныслы икенсел сығанаҡтарға (бигерәк тә Ризаитдин Фәхретдиновтың "Аçар"ына) нигеҙләнеп, әл Ҡурсауиҙы протомодернизатор рәүешендә ҡылыҡһырлауҙы инҡар итергә була. Киреһенсә, әл Ҡурсауи, Бохарала өçтөнлөклө булып ҡала биргән ашғарит ҡәләмендә рациональ фекергә таяныуҙы танып, уны философияның йәшерен формаһы итеп ҡарап, тәнҡитләүҙе хуп күрә. Ул үҙе мосолмандарҙың тәүге быуыны инаныуҙары тип атаған юçыҡҡа кире ҡайтырға өндәй. Уның Бохаралағы дискуссия барышында Илаһ исемдәренең ысынбарлыҡта булыуын инҡар итеүе уны неомутазелит, тип нигеҙһеҙ ғәйепләүгә килтерә.

Әл Ҡурсауи, үҙенә янаған үлемдән саҡ ҡотолоп, Бохараны ташлап китә. Тыуған илендә лә һыйыныр урын таба алмайынса, 1812 йылда Хиджаз (Сауд Ғәрәбстанында Мәккә өлкәһе) тарафтарына китеп барышлай, Истанбул ҡалаһында донъя ҡуя. Уға ҡаршы сығыусыларҙың күбеһе шул уҡ Нәҡшбәндиә суфыйҙары йәмғиәте ағзаһы булһа ла, әл Ҡурсауиҙың ошо йәмғиәттә тороуы арҡаһында уның Волга-Урал төбәгендәге күренекле нәҡшбәндиәселәргә йоғонтоһо XX быуатҡа тиклем үк һаҡланып ҡала.

XVIII быуат урталарында, Урта Көнсығыштың Ислам мәғрифәте үҙәктәре менән бәйләнеш урынлаштырылыу сәбәпле, башҡорт һәм татар дини тормошоноң Бохараға бәйлелеге кәмей төшә. Был процесс XIX быуатта, татарҙар һәм башҡорттар Истанбул, Ҡаһирә, Хиджаз ҡалаларында күпләп уҡый башлағас, көсәйеп китә. Интеллектуаль һәм ойошторроу яғынан Бохаранан өçтөнөрәк булған урындарҙа мосолмандарҙың Нәҡшбәндиә туғанлығы сафтарына инә башлауын дини йүнәлештең бер аҙ үҙгәреүе һөҙөмтәһе итеп ҡарарға кәрәк. Татарҙарҙың күбеһе, Дели ҡалаһынан булып, Мәҙинәлә (Сәғүд Ғәрәбстаны) төпләнгән Шах Ғүләм Ғәли нигеҙләгән Мөджәджидиә тармағы шәйехтәре тирәләй ойошҡан суфыйҙар ҡорона инергә тырыша. Тыуған илдәренә имам һәм мөғәллим булып ҡайтыусы башҡорттар, татарҙар шулай уҡ Нәҡшбәндиә йәмғиәтенең үҙҙәренең күңеленә хуш килгән рухи тармағы идеяларын тарата. Өфө, Ташбилге, Бирджан, Семипалатинск кеүек ҡалалар һәм төбәктәр Нәҡшбәндиә йәмғиәтенең Хиджаздан Һинд океаны аша Суматра һәм Яваға тиклем йәйрәп ятҡан селтәренең төньяҡ нөктәләренә әйләнә.

**(Дауамы бар).**

✓ *Зирәк аңлы, математика кеүек теүәл фәндәрҙе яҡшы белгән кешеләр йырҙы ла шәп башҡара. Йырсының тауышы көслө булырға ла мөмкин, әммә аҡылы аҙ булғанда, ул тейешле һөҙөмтәгә өлгәшә алмай.*



# МИЛЛИЛЕГЕБЕҘҘЕҢ

## халыҡ йырҙарында,

**З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институты профессоры, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Фәрзәнә Фәтҡулла ҡыҙы Сәғитова менән осрашырға килгәндә, ул вокал класында фортепиано артында ултырып, бер студентына йыр оҫталығы һабаҡтары бирә ине. Студент ниндәйҙер нотаны алдыра алмай, байтаҡ ыҙаланды. Ә уҡытыусы тыныс ҡына аңлатыуын дауам итте. Бер аҙҙан профессор уҡыусыһын арҡаһынан һөйөп, матур теләктәрен әйтеп оҙатты һәм: "Яңы армия хеҙмәтенән ҡайтты, бер аҙ тауышын юғалтҡан, онота төшкән балаҡай", - тип аңлатып ҡуйҙы. Шул мәл мин үҙемдең ниндәй шәхес менән аралашырға килгәнемде төшөнгәндәй булдым.**



**Фәрзәнә Фәтҡулла ҡыҙы, һеҙ әллә нисә быуын йырсыларҙы тәрбиәләгән, уҡытҡан белгес. Бөгөнгө башҡорт эстрадаһын күҙәтеп, ҡалай күбәйеп китте был йырсы халҡы, тип уйламайһығыҙмы?**

- Эйе, аҙыраҡ тауышы булған һәр йәш кеше үҙ көсөн һынап ҡарай ала бөгөн. Хатта олораҡ быуын кешеләре лә йөрьәт итеп эстрадаға килә, сәхнәгә сыға тора. Был - сәнғәткә лә баҙар мөнәсәбәттәре үтеп инеүе, шоу-бизнес күренеше инде. Йәмғиәттең бөгөнгө кәйефенә, талабына, ҡыҙыҡһыныуына ҡарап тәҡдим ителгән тауар ул бөгөнгө эстрада. Әгәр уларҙың ҡулланыусылары булмаһа, йәғни тыңлаусылары, күтәрмәләүселәре табылмаһа, әлеге йырсылар ҙа, йырҙар ҙа хасил булмаҫ ине. Тимәк, кемдәрҙәндер зауығына тура килә улар.

Үҙ ҡарашымдан сығып әйткәндә, тамашасыны алдап булмай, тип уйлайым. Тауышһыҙ, моңһоҙ йырсыны ул барыбер ҡабул итмәй. Бөгөн улар ни тиклем генә үрсеһә лә, ваҡыт барыһын да үҙ урынына ҡуя. Бына беҙ бынан ун йыл әүәл сәхнәгә сыҡҡандарҙан һөләтлеләрен генә иҫләп ҡалғанбыҙ, уларҙы йылдар буйы тыңлайбыҙ. Ә яһалмалары төшөп ҡалған, онотолған. Әлегеләре менән дә шулай буласаҡ.

**Башҡорт халыҡ йырҙарын башҡарыуҙың йырсыларға ғына билдәле булған серҙәре бармы?**

- Беҙҙең халыҡ йырҙары йырсының тауышын тейешле юҫыҡҡа үҙе көйләй. Һәр йырсы үҙенә генә хас тембр менән тыуа. Әгәр бала бәләкәйҙән халыҡ йырҙарын башҡарырға өйрәнһә, шул саҡтан уҡ уның тауыш диапазоны киңәйә, ҙурая. Уларҙың тауыш аппараты теләһә ниндәй тональносҡа ла көйләнгән була.

Уҡыта-уҡыта шундай фекергә килдем: халыҡ йырҙары уны башҡарған саҡта йырсының мейеһенән башланып эс тәңгәленә тиклем үтеп инә. Баш, бит өлөштәре яңғырап, маңлай, яңаҡ һөйәктәре зәңкеп тора. Халыҡ йырын башҡарғанда баштың һәм мейенең яҡшы эшләүе мотлаҡ. "Вокальная голова" тип йөрөтәбеҙ беҙ был төшөнсәне, тимәк, "йыр аҡылы". Зирәк аңлы, математика кеүек теүәл фәндәрҙе яҡшы белгән кешеләр йырҙы ла шәп башҡара. Йырсының тауышы көслө булырға ла мөмкин, әммә аҡылы аҙ булғанда, ул тейешле һөҙөмтәгә өлгәшә алмай. Ошо ике сифат бергә тап килһә, йырсыларға сәнғәт донъяһында оло юл асыла, уларға тыңлыу яулауы ауыр булмай.

Беҙҙә "моң" тигән нәмә бар. Башҡа халыҡтарҙа был төшөнсә юҡ һәм уҡытҡан саҡта рус телле балаларға ошоно аңлатыуы бик ауыр. "Музыкальность, чувства, ну... включи внутри все", тигән һүҙҙәр ҡулланып, уларҙың моңон сығарырға тырышабыҙ. Бына шунда ла инде беҙҙең туған телебеҙҙең, миллилегебеҙҙең ҡөҙрәте.

**Йырсының йырҙың һүҙен, көйөн һайлай белеүе йәки белмәүе нимәнән килә? Ни өсөн ҡайһы берәүҙәр мәғәнәһеҙ һүҙҙәр теҙмәһен дә йырлай ала, ә ҡайһылары был өлкәлә бик һаланcыҡ?**

- Йырсының йыр һайлауы - ул үҙенә күрә бер психология. Бында һәр кем үҙенең эске донъяһын аса. Йыры менән ул эсенә нимә тултырылған, шуны сығара. Был, әлбиттә, йырсының йәше, холҡо, кисерештәре, йәшәйеше аша ла килә. Һәм бында бая үрҙә әйтеп үткән "йыр аҡылы" тигән төшөнсә лә ҙур роль уйнай.

Беҙ, мәҫәлән, студенттар менән йыр һайлағанда иң башта йырҙың тарихын, ерлеген, эстәлеген өйрәнеп алабыҙ. Барамы йыр был йәш кешегә? Ундаа ниндәй кисерештәр уята йыр һүҙҙәре? Ул уны нисек аңлай? Уҡыусыларыма йырҙы, бигерәк тә халыҡ йырҙарын тойоу мөһим икәнлекте аңлатам.

Эстрада йырҙарында ла шағир һәм композитор был әҫәрҙе ниндәй сәбәптән, ниндәй шарттарҙа ижад иткән һәм был ике ижад нисек йыр булып уҡмашҡан икәнде белеү кәрәк. Моңға яғыла торған шиғырҙар улар көйһеҙ ҙа йырлап тора. Ә инде майһыҙ арба һымаҡ шығырлап торған һүҙҙәр теҙмәһен ниндәй генә көйгә һалһаң да, ҡолаҡты ирҡәләмәй, күңелгә инмәй. Йомғаҡлап әйткәндә, йырланған йыры башҡарыусыһының аҡыл кимәлен күрһәтеүсе барометр ул.

**Эстрада беҙҙең халыҡҡа хасмы, килешәме ул беҙгә?**

- Юҡ, был башҡарыу алымы башҡорттоҡо түгел. Күрәһегеҙ бит, нисек кенә ҡыланһалар ҙа, нисек кенә тырышһалар ҙа, эстрадабыҙ артыҡ балҡый алмай. Сөнки был беҙҙеке түгел. Башҡорттоң интеллекты башҡа, холҡо, фиғеле ундайға яраҡлашмаған. Эстрада йырҙары менән йырсыларыбыҙ үҙҙәренә һалынған моң байлығын - шундай зиннәтте әрәм-шәрәм итә, тәләфләй. Уларҙың тән һәм аҡыл ҡоролошо ла күкрәктән аша үткәреп йырлауға яраҡлашҡан, ә эстрадалағылар тамаҡ төбө менән йырлап, тауыштарын боҙоп бөтәләр. Йәл, бик йәл...

**Һеҙҙең үҙегеҙҙә йырсы булып китеү теләге тыуманымы? Ни өсөн һөләтегеҙҙе педагогик тәжрибәлә генә ҡулланыу менән сикләндегеҙ?**

- Ошо институтҡа уҡырға мин 1969 йылда килеп индем һәм уның тәүге сығарылыш студенты булдым. Уҡыу процесы бик етди ине. Ул саҡтағы ректор, мәшһүр композитор Заһир Исмәғилев ағай һәр имтихандың өсөнсө турында үҙе ҡабул итә, кабинеты уртаһына баҫтырып йырлатып ҡарай ҙа, шунан ғына зачет ҡуя ине.

Шулай, институтта өсөнсө курста уҡып йөрөгәндә минә театр бүлегендә йыр дәрестәре уҡытырға ҡуштылар. Дүртенсе курста уҡығанда иһә, Мәҙәниәт министрлығына саҡыртып алдылар ҙа, ул саҡтағы министр Вил Сабит улы Кәримов бойороғо менән сәнғәт училищеһына уҡытырға ебәрҙеләр. Педагог булмағандыр инде, күрәһең. Шул барыуҙан училищела егерме йыл эшләнем һәм биш тиҫтәләп һәләтле йырсылар тәрбиәләп сығарҙым. Унан һуң институтҡа эшкә саҡырҙылар. Бында иһә утыҙлап йырсы, туғыҙ ассистент-стажер әҙерләнем. Замаынында, институтты тамамлаған мәлдә, опера театрына эшкә барырға өгөтләнеләр, режиссер Мәғәфүр Хисмәтуллин ҡат-ҡат саҡырҙы, уҡытыусыларым да кәңәш иткәйне. Әммә мин ул саҡта инде ир ҡатыны, бала әсәһе булып, ҮҘемсә уйлап-үлсәп, уҡытыу эшен һайланым. Һәм үкенмәнем. Ә тауышым, Аллаға шөкөр, бөгөн дә элекке кеүек үк сағыу көйө һаҡланған. Былар барыһы ла уҡытыусым Миләүшә Ғәли ҡыҙының ваҡытында тауышымды дөрөҫ ҡуя белеүенән, моңомдо һаҡларға өйрәтеүенән килә. Ысын педагогтың һәләте бына шунда инде ул.

**Ғаиләгеҙҙә һеҙҙән башҡа йырсылар бармы, булғанмы?**

- Минең атайым Фәтҡулла бик моңло тауышлы була. Асылда, уның бөтөн нәҫеле моңло халыҡ ул. Атайым мәжлестәрҙә, һабантуйҙарҙа, һораһалар, бер генә йыр башҡарған. Ҡабатлап һораһалар ҙа йырламаған. Шулай тәмле генә итеп, аҙ ғына итеп өләшкән һәләтен.

Әсәйем дә йырланы. Ҡорьән-Кәримде көйләп уҡыуы үҙе бер хайран күренеш ине. Ул минә "Тәфтиләү" йырын өйрәтте. Ә инде ғаиләләге ете баланың барыһы ла йырға әүәҫ булды. Үҙемдән өлкәндәрҙең һәр береһе минә ниндәйҙер йыр өйрәтеп ҡалдырҙы. Иҫ киткес моңло тауышлы Зәкиә апаймыҙың, һарай башында бесән өҫтөндә ятып, "Урал"ды йырларға өйрәткәнен хәтерләйем. Роза апайым "Сәлимәкәй"ҙең, Кәрим ағай "Уйыл"дың тарихын һөйләп, һүҙҙәрен ятлатып, көйөн аңлатып ҡуйғандары ла иҫемдә. Улар барыһы ла уҡытыусылар булып киттеләр, әммә йырҙан ситләшмәнеләр.

Үҙемдән ҡала уландарым да моңлолар, әммә уларҙың да хеҙмәт һәм тормош юлдары икенсерәк юҫыҡтан китте. Ейәнсәрҙәремдә лә бар моң, тик береһе лә йырсы булырға атлығып тормай. Ә иң мөһиме, ейән-ейәнсәрҙәребеҙҙең исемдәре тик башҡорт халыҡ йырҙары атамаларынан ғына тора: Шәүрәкәй, Зөлифәкәй, Сәлимәкәй, Урал, Буранбай. Бәпес саҡтарындағы бишек йырҙары ла шул үҙ исемдәренең йыры булды. Килендәремә: "Табығыҙ бәпәйҙәр, йырҙарыбыҙ күп беҙҙең", - тип әйтеп кенә торам.

**Фәрзәнә апай, белеүегеҙсә, Башҡорт автономияһының 100 йыллығын билдәләү алдындабыҙ. Был тарихи ваҡиғаға бәйле бар мәғлүмәттәрҙе лә йыябыҙ, халыҡҡа сығарырға, белдерергә тырышабыҙ. Ошо сәбәпле, һеҙҙең арҙаҡлы шәхесебеҙ Әхмәтзәки Вәлидиҙең яҡын туғаны икәнде белеп, был турала белгән-иҫләгәндәрегеҙҙе гәзит уҡыусылар менән дә бүлешеүегеҙҙе үтенәбеҙ?**

- Атайым Фәтҡулланың атаһы, йәғни Шәйәхмәт олатайым, Әхмәтзәки Вәлиди менән бер туған була. Беҙҙең атай менән әсәй Әхмәтзәки Вәлидиҙең һуңғы тапҡыр ауылға атаһына ҡайтып киткәнен гел һөйләй торғайны. Ҡыҙыл машинала килеп төшә ул. Атаһы Әхмәтша менән хушлашырға килгән була. Атайым да уның менән күрешергә бара. Әммә

***✓ Мин атайымдан үҫә төшкәс тә: "Атай, ни өсөн беҙ ауылдан киттек?" - тип һораным. Атайым: "Һеҙҙе русса яҡшы белһендәр, өйрәнһендәр өсөн алып йөрөттөм", - тигән була ине.***



күрешә алмай, Әхмәтша олатай бик ҙур хәсрәттә була, күрәһең, өләсәй ейәнен өйгә индермәй, ҡайтарып ебәрә. Бәлки, балаларын бәләләрҙән араламаҡ булып та шулай иткәндәрҙер, кем белә...

Бала саҡта мин Вәлидиҙең туған икәнлеген түгел, кем булыуын да белмәнем. Ул хаҡта ғаиләлә бөтөнләй һүҙ булманы. Атай-әсәйем генә түгел, өлкән туғандарым Зәкиә менән Ғәлиә апайҙарым да ул хаҡта һөйләмәне.

Көҙән ауылында элек русса уҡытҡандар, шуға атайым руссаға шәп ине. Дүрт класты өс йылда уҡып сыҡҡан булған ул. Ауылда уҡымышлы кеше һаналды, һәр ваҡыт баш бухгалтер булып эшләне. Артабан да, ҡайҙа йәшәһәк тә, ул финанс-иҡтисад өлкәһендә хеҙмәт итте.

Эҙәрлекләүҙәр һәм репрессия беҙҙең ғаиләгә 1935 йылдарҙа килә. Атайыбыҙҙы алып китәләр ҙә ҡайтаралар, алып китәләр ҙә ҡайтаралар. Әсәйебеҙ әйтеүенсә, уның үҙе менән бергә алып китә торған алмаш кейем-һалым, аҙыҡ-түлек һалынған тоғо һәр ваҡыт әҙер тора. Был хәлдәр һуғышҡа тиклем дауам итә. Һуғышҡа атайыбыҙҙы штрафбатҡа алалар. Ҡулына ҡорал да бирмәйҙәр, алғы һыҙыҡта окоп ҡаҙҙыралар, землянкалар төҙөтәмәжбүр була. Салауат ҡалаһының яңы төҙөлә генә башлаған ерлегенә барып, тирмә ҡороп инәбеҙ. Унда беҙҙең кеүек тирмәлә көн күргәндәр аҙ түгел, тотош урам булып теҙелгәндәр. Бөгөнгөләй хәтеремдә, тирмә алдына сығып, ҡала төҙөргә алып киленгән әсир немецтарҙың һаҡ аҫтында үткәнен ҡарап торабыҙ, ә тирмә артында һыйырыбыҙ йөрөй.

Ҡыш яҡынлаған мәлдә, бәхеткә күрә, атайҙы Маҡар лесхозы рәйесе Юламанов тигән ағай эшкә саҡыра. Һәр кем уның кеүек ҡыйыулыҡҡа бара, йәғни "ҡара тамғалы" кешене эшкә ала алмағандыр, ә был ағай беҙгә ярҙам ҡулы һуҙа. Маҡар лесхозына күсеп килеп, барак өйҙөң бер яғында йәшәй башланыҡ шулай.

Бөтөн был ҡыуылыу һәм күсенеүҙәр Хрущев замандарына тиклем дауам итә. Атайыбыҙ хаҡлы ялға сыҡҡас ҡына ауылына әйләнеп ҡайтыу хоҡуғына эйә була.

Мин атайымдан балараҡ саҡта ла, үҫә төшкәс тә, унан инде арыуыҡ ҙурайғас та: "Атай, ни өсөн беҙ ауылдан киттек?" - тип һораным. Атайым: "Һеҙҙе русса яҡшы белһендәр, өйрәнһендәр өсөн алып йөрөттөм", - тигән була ине. Яуап таба белгән бит әле.

Тағы ла бер деталь: 1937 йылда атайға хатта ҡатынын, дәй мәғлүмәт тә һалманы. Бәлки, ул асыуын йә үпкәһен белдергән булһа, беҙгә ул һеңер ҙә ине. Әммә ул аҡыллы булған - балаларының аңын асыу, үпкә тойғолары менән бысратмаған.

Асылда бит бер беҙгә генә түгел, Көҙән ауылына тотошлайым менән ауырға төшә. Халыҡ тулыһынса тигәндәй ауылдан китеп таралыуға, тарҡалыуға дусар ителә. Уҡырға ингәндә лә, эшкә урынлашҡанда ла, башҡа урындарҙа ла "Көҙәндән" тигән һүҙ "дошман" мөһөрө һымаҡ ҡабул ителә. Ә көҙәндәр улар бик сабыр, тыйнаҡ халыҡ. Атайым бармаҡ янап тороп: "Көҙән - ул башҡорт ауылы! Ғафури районының Ташбүкән тигән башҡорт ауылынан килгән Көҙән исемле кеше нигеҙләгән уны - шуны онотмағыҙ", - тип йыш ҡабатлай торғайны. Шәжәрә лә шуны дөрөҫләй.

Тәүге тапҡыр мин йөрьәт итеп Әхмәтзәки Вәлидиҙең 100 йыллығына арналған кисәгә барҙым. Унда ла бик һаҡ ҡына килдем. Ағайыбыҙ, Зәки Вәлидиҙең бер туған һеңлеһе Сара инәйҙең улы, профессор Камил Вәлиев ағай башлап ойошторғайны был сараларҙы. Камил ағай Мәскәүҙә уҡыған сағында Иҫәнбикә ханым менән күрешеп-һөйләшеү бәхетенә өлгәшә һәм Вә-

# ҠӨҘРӘТЕ...

## моңобоҙҙа

ләр. Ашау ҙа бик наҡыҫ бүленә. Күптәре астан да үлеп ҡала. Бәрелештәр ваҡытында штрафбаттыҡылар күпләп ҡырыла, 1942 йылда атайымды ла ҡоро һөлдә хәлендә, инде эшләрлек рәте ҡалмағанлыҡтан, өйөнә ҡайтаралар. Уны әсәйҙең атаһы тәрбиәләп, үлтермәй алып ҡала. Аяҡҡа баҫҡас инде тағы ла алып китәләр. Шул арауыҡта өйҙә булып китеүенән аҙаҡ мин тыуғанмын. Унан тағы ла бернисә йылдан шулай уҡ ярымтере килеш ҡайтып төшә. "Атайығыҙ ҡайтып килә" тигән хәбәрҙе ишеткәс, апай-ағайҙарым өс саҡрым алыҫлыҡта ятҡан Шишмә тигән ергә тиклем ҡаршы йүгергәндәр һәм юлда атайыбыҙҙы танымай, үтеп киткәндәр. Атайыбыҙҙың иһә балаларын ҡыҫҡырып туҡтатырлыҡ хәле булмаған... Нисек тере ҡалғандыр? Ниндәй генә михнәттәр күргәндер инде, бахыр? Уларын хәҙер яҡынса төшөнә генә алабыҙ. Беҙҙе атайлы итеп, шулай йәшәмеш булыуына мең рәхмәт...

Артабан 1949 йылда, миңә алты йәш саҡта, әллә ике сәғәт бирелде, әллә ике көн - ни булһа ла, ауылдан сығып китергә фарман килә. Атай-әсәйебеҙ ете балаһын эйәртеп, һыйырын етәкләп, ауылдан китергә йәғни әсәйебеҙҙе айырырға ла тура килә. ЗАГС-та булһалар, ирен төрмәгә оҙатҡан осраҡта ҡатынын да, балаларын да бергә алғандар бит ул саҡта. Атайым шулай беҙҙе аралап, был аҙымға бара. Алтмыш икенсе йылдарҙа ғына ҡабаттан әсәйебеҙгә "өйләнә"...

Шәйәхмәт олатайым иһә 1937 йылда уҡ ҡулға алынған була, өләсәйҙе бәләкәй генә өйгә күсереп, оло йортон тартып алалар. Зәкиә апайым һөйләүенсә, әле ауылда йәшәгән саҡта өләсәйгә төнгө өс-дүрттәрҙә йүгертеп тамаҡ алып барып йөрөгән. Унан өләсәйҙе Ишембайҙағы балалары тәрбиәгә ала, шунда мәрхүм була. Әхмәтзәки Вәлидиҙең ҡыҙы Иҫәнбикә апай менән ( уға ла өләсәй була бит) ул ҡәберҙе барып таптыҡ, сәскәләр һалдыҡ...

**Фәрзәнә апай, Зәки Вәлиди туғаны булыу һеҙгә бик ҡимməткә төшә, шулай бит? Һеҙҙең атайығыҙҙа, туғандарығыҙҙа, һеҙҙең үҙегеҙҙә лә уның исеменә ҡарата ниндәйҙер үпкә тойғолары булманымы? Был бит тәбиғи...**

- Заманында ниндәйҙер халыҡ ҡатламының нәфрәтен тойорға ла, кисерергә лә тура килде. Был үҙенә күрә бер хәүеф уята ине. Һәм... ул хәүефте мин бөгөн дә тоям.

Атайыбыҙ күңелендә нимәләр булғандыр, ул уларҙы тышҡа сығарманы. Беҙҙең аңға яман-яҡшы тигән бер ниндиди тураһындағы хәтерҙе, уның мираҫын тыуған яҡтарға ҡайтарыу уйы менән яна башлай, ул идея менән беҙҙе лә ҡуҙғата. Ә беҙҙә ҡурҡыу шул тиклем көслө була әле. Мин "ҡурҡыу" тигән һүҙҙән тартынмайым, сөнки был бәләне минең ата-бабам үҙ башында кисергән, ә ишетеп кенә белмәгән. Был арҙаҡлы шәхес хаҡында китаптар яҙыу, уның хеҙмәттәрен өйрәнеү һәм сығарыу йәки шул сәйәсәтте күтәреү - ул икенсе мәсьәлә. Әлбиттә, дан мәсьәлә. Әммә ул шәхестең туғаны булыу бөтөнләй икенсе - михнәтле һәм хәсрәтле мәсьәлә.

Донъялар үҙгәргәс, илдәр араһындағы сиктәр асылғас, Анкарала Әхмәтзәки бабайҙың өйөндә булдыҡ. Унда уның өс ҡатлы йорто бар ине. Балалары Иҫәнбикә менән Субиҙәй беҙгә, туғандарына, бабайыбыҙҙың күп кенә иҫтәлекле әйберҙәрен тапшырҙы. Шулайтып, туғандар булып, һәүетемсә генә ҡатышып, аралашып йәшәйбеҙ хәҙер.

Әхмәтзәки Вәлиди башҡорт батыры булған һәм батырҙар яҙмышын кисергән. Ә батырҙар яҙмышы ул - үҙ-үҙенде ҡорбан итеү. Халыҡ өсөн, милләт өсөн, идеялар өсөн. Ә беҙ, уның туғандары, шул дөрләп янған яҙмыш ялҡынына эләгеп, көйөп ҡалыусылар ғына булғанбыҙҙыр...

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

ХӘТЕРКИТАП

# ИҢ-ИҢДӘР ЮҠ ИТЕЛГӘС...

**Илебеҙ тарихында төрлө үҙгәрештәр булып тора. Һәм, әлбиттә, бындай үҙгәрештәр милли мәғарифҡа, сәнғәткә йоғонтоһоҙ ҡалмай. Революциянан һуң мәғариф өлкәһендә бер нисә тапҡыр үҙгәртеп ҡороу була. Шуларҙың иң зыянлыһы үткән быуаттың 50-70-се йылдарында алып барылған урыҫлаштырыу сәйәсәте булғандыр. Сөнки барлыҡ милли мәктәптәр тотош урыҫса уҡытыуға күсә, ә ҡайһы бер башҡорт мәктәптәрендә туған тел һәм әҙәбиәт предмет булараҡ ҡына уҡытыла башлай. Бөгөнгө көндә ошо йылдарҙа белем алған "телһеҙ йәки ярымтелһеҙ" милләттәштәребеҙҙең балалары әҙәбиәт һәм сәнғәт өлкәһендә бураҙна һөрә. Һөҙөмтәлә ни күрәбеҙ? 30-сы йылдарҙан әҙәбиәт һәм сәнғәт донъяһында тел, йолалар, ғөрөф-ғәҙәттәр сафлығы өсөн башланған көрәш "иң-иңдәребеҙҙең" юҡ ителеүе арҡаһында туҡталып ҡала һәм әле һаман шуның әсе емештәрен йыябыҙ. Мәшһүр йырсыбыҙ һәм композиторыбыҙ Ғәзиз Әлмөхәмәтовтың 1929 йылда "Сәсән" журналында күтәреп сыҡҡан түбәндәге сығышы быға ишара, тип, уның менән уҡыусыларыбыҙҙы ла таныштырырға булдыҡ.**

## Йыр тураһында

Матур тауыш сығарып көйләй торған кешегә йыраусы тиҙәр. Халыҡ араһынан бәғзе берәүҙәр тауыштарының матур булыуҙарына, тын юлдарының иркен, киң булыуҙарына ҡарап йыраусы исемен алалар.

Ләкин, музыка теорияһы менән таныш булмаған һәм тауыштары ла артыҡ шәптән булмаған ҡайһы бер йыраусылар, көйҙәр ләззәтенең яртыһын ғына халыҡ йөрәгендә ҡалдыра ала, ә етмәгән ерҙәрен халыҡ үҙе эстән моңланып ҡына өҫтәп ҡуя. Ундай йыраусылар көйҙәрҙе лә бик ныҡ үҙгәртеүсән булалар. Бер йырлағанда бер төрлө йырлаһалар, икенсе бер йырлағанда шул уҡ көйҙө икенсе төрлө йырлайҙар. Шул арҡала халыҡ араһындағы көйҙәр үҙгәрә тора.

Йыраусыларҙың икенсе төрлөләре була. Былары инде үрҙәгеләрҙән бик ныҡ айырыла. Былар, бер яҡтан, таҙа тауышлы, иркен тынлы булһалар, икенсе яҡтан, музыка теориялары менән дә таныш булалар, шуның өсөн былар тарафынан ғына башҡарылған йырҙар, көйҙәр, йырҙан, көйҙән көтөлгән теләккә тулы яуап бирә алалар.

## Музыка тураһында

Мәҙәни милләттәрҙә музыканың күпме алға киткәне мәғлүм. Европа композиторҙары тауыштарҙың ҡағыҙҙәләренә ҡарап яҙалар, быға "вокализм" тиҙәр. Беҙҙә әле вокализмды айырыу түгел, ирҙәр, ҡатындар тауышына айырып йырлана торған көйҙәр ҙә юҡ һәм халыҡ та быны айырып йөрөтә белмәгән.

Бына музыкабыҙҙың ошо хәтле артта булыуы сәхнәгә сығып йырлай торған йыраусыларыбыҙға үҙҙәренең ҡеүәләрен яҡшылап күрһәтергә ирек бирмәй. Шуның өсөн беҙгә лә, мәҙәни музыка төҙөгәндә, быға иғтибар итеү кәрәк булыр.

## Музыка ижад итеү тураһында

Юғарыла һөйләнгән ярлылығыбыҙ, музыкабыҙҙың мәҙәни яҡтан бик түбән булыуы һуңғы йылдарҙа мине һәм башҡа бер нисә иптәште беҙҙең вокализм, йәғни йырлау өсөн көйҙәр яҙыу юлында эшләргә мәжбүр итте. Был ғилми юлда эшләү минең төп хеҙмәтем булмаһа ла, мин ул юлда эшләшергә тейеш булдым һәм 22-се йылдан бирле Ҡазанда ҡалып, коллектив менән берлектә түбәндәге хеҙмәттәр үтәлде: "Сания" операһы, "Эшсе" операһы, "Алдандым", "Шомло ел" йырҙары, "Яңалиф" маршы, "Башҡортостан" маршы, "Ынйыҡай, Юлдыҡай" пьесаһына көй-ария.

Быларҙан башҡа уҙған йыл башҡорт көйҙәренән һигеҙ көй яҙылып, Татиздатҡа тапшырылғайны. Быйыл шуларҙың дүртәүһе баҫылып сыҡты, ҡалғандары тиҙҙән баҫыласаҡ.

Был хеҙмәттәр ни хәтле яҡшы булһалар ҙа үҙемдең төп хеҙмәтемә күп зарар килтерәләр, сәхнәнән айырылып торорға мәжбүр итәләр.

## Перспективалар

Ижад иткәндәрҙе халыҡ араһында йәнләндереп күрһәтеү өсөн йыраусылар, музыканттар кәрәк. Ләкин улар Ҡаҙан, Өфө һымаҡ ҡалаларҙан башҡа ерҙә юҡ дәрәжәһендә. Шул булғандары менән булһа ла, киләһе йылдарҙан башлап түбәндәге эштәргә керешергә кәрәк булыр:

- Башҡортостанда бер ансамбль төҙөп, башҡорт халҡының этнография һәм классик музыкаһын Союз күләмендә күрһәтеп сығыу;
- Башҡортостанға ҡайтыу менән халыҡ араһындағы булған көйҙәрҙе йыйыу һәм ғилми йәмғиәт ҡаршыһында бер тәртипле музыкаға хас булған архив төҙөргә кәрәк булыр;
- Һуңғы системалағы машиналар менән бөтә көйҙәребеҙҙе үҙ хәлендә алып ҡалыу һәм башҡалар. Тик был хеҙмәттәрҙе үтәү өсөн хөкүмәт органдарының яҡындан ярҙамға килеүҙәре кәрәк буласаҡ.

**ИДАРА:** Ғәзиз иптәш Әлмөхәмәтовтан ташланған теләктәр бик урынлы һәм ваҡытлы булған теләктәр. Быға тейешле хөкүмәт мөәссәсәләре (мөәссәсә - дәүләт ойошмаһы, учреждение) тейешле дәрәжәлә әһәмиәт бирергә тейешлеләр.

**Ғәзиз ӘЛМӨХӘМӘТОВ.**
**("Сәсән" журналы. 1929 йыл, 4-се һан).**

***✓ Өсөнсө ҡыҙ исемен әйтер өсөн урынынан торғас, Шәйехзаданың йөрәге "жыу" итеп ҡалды. Алмагөл! Килгән! Осраштылар, ниһайәт! Таптылар бер-береһен! Егеттең бар булмышын ошо ҡыуаныс солғап алды.***




Кемдәр былар? Нимә эшләп йөрөйҙәр төн уртаһында дала киңлегендә? Төнөн йоҡлап ятмағас, тиген әҙәмдәр түгелдер. Нисек тә ҡасып ҡотолорға! Ҡыҙҙың йөрәге аттың сабыу тиҙлегенән дә шәберәк тибергә тотондо, ул эйәргә һуҙылып ятып, Алмасыбарының муйынын һыйпай-һыйпай уны дәртләндерҙе, алға әйҙәне:

- Әйҙә, әйҙә, малҡай! Әйҙә, Сыбарҡай!.. Һоп! Һоп!..

## 2.

– Шәйехзада! - Оморҙаҡ сәхнәлә мандолина сиртеп йырлап торған Бабичтың янына бик ҡурҡҡан ҡиәфәттә йүгерә-атлай килде лә, ашығып шыбырланы. - Һиңә тиҙерәк ҡасырға кәрәк! Һине эҙләйҙәр!

...Баҡыртауҙа Шәйехзада Оморҙаҡ тигән таныш егеттең өйөн эҙләп тапты. Уның атаһы, Шәйәхмәт ағай, улының ниндәйҙер байрамға киткәнлеген әйтте. Уның ҡайҙа булғанлығын өйрәтте.

Шәйехзада килеп еткәндә, ҡала баҡсаһының асыҡ һауалағы сәхнәһе янында байрам башланғайны инде. Вәлидиҙең иҫкәртеүенә ҡарамай, концертта ҡатнашыуҙан баш тартманы ул. Әгәр егеттәрҙе башҡорт ғәскәренә алып китергә килгән икән, нисек ошондай уңайлы мөмкинлектән файҙаланмаҫҡа? Фәҡәт Оморҙаҡ менән ҡыҙылармеецтар ҙа, командирҙары ла әле күренмәй. Улар байрам аҙағынараҡ килеп етергә тейештәр икән. Оморҙаҡтар дружинниктарҙың яҡынлашыуы хаҡында иҫкәртергә өлгөрә алырҙай булһалар, Шәйехзада концертта шиғырҙар уҡып, йырларға риза. Ә юҡ икән... Әммә йәштәр данлыҡлы шағир, әртисте сәхнәлә күреү өсөн бөтәһен дә эшләргә әҙер ине. Улар кескәй генә ҡурҡыныс һиҙелһә, Бабичҡа әйтәсәктәр, эҙ юғалтырға ярҙам итәсәктәр.

- Тик күренеп кенә ҡит инде! - тине Оморҙаҡ. - Йәштәр бит көтә! Уларҙың бөтәһе лә һине тыңларға килгән. Һуңлағас, бик ҡурҡҡайныҡ, өлгөрмәҫһең тип.

- Ә минең концертта ҡатнашырымды ҡыҙылдарға нисек белгертмәнегеҙ? - тип аптыраны Шәйехзада.

- Беҙ үҙебеҙҙекеләргә сер итеп кенә әйттек, - тине Оморҙаҡ. - Тик ҡыҙылдар һинең бөгөнмө-иртәгәме килереңде барыбер белә. Хатта ҡулға алырға йыйыналар. Шуға бик һаҡ булырбыҙ!

Был мәлдә Шәйехзада ла, йәштәр ҙә үҙҙәренең ут менән уйнауҙарын һиҙмәй ине...

Оморҙаҡ килеп иҫкәрткәндә, Шәйехзада егеттәргә арналған таҡмаҡтарын йырлап тора ине. Уны тыңларға килгән йәштәр шарҡылдап көлә. Сөнки, беренсенән, таҡмаҡтар шаян, икенсенән, егеттәрҙең иң әсеткән ерҙәренә тейҙерә Бабич! Ҡайҙан белә улар хаҡында шағир? Әле генә килде бит Баҡыртауға! Ә ғүмер буйы ошонда йәшәгән кеүек таҡмаҡтар һиптерә! Аптырамаҫ урынынан аптырарһын, һоҡланмаҫ ерҙән һоҡланырһың!

Ә бының сере ябай ине. Тәүҙә, ғәҙәттәгесә, Шәйехзада ҡыҙҙарға арнап йыр йырланы. Бының бер ҡыйынлығы юҡ. Шәйехзада һылыуҡайҙың исемен һорай ҙа, мандолинаһын бер-ике сирткән арала, ҡыҙҙың күлдәгенә йәки сибәрлегенә арнап, тиҙ генә таҡмаҡ уйлап сығара. Йыш ҡына шиғырының тәүге ике юлын йырлап торғанда, ҡалған ике юлы табылмаған була. Шәйехзада йылмайып моңлана, үҙе ашығып рифма эҙләй. Ә инде униһы телгә килгәс, ҡалғаны ҡыйын түгел.

Тәүге ике ҡыҙға арналған йырҙар йәштәргә ныҡ оҡшаны. Тыңлаусылар, сәсәндең оҫталығына һоҡланып, шаянлығына ҡыуанып, көслө алҡыштарға күмде.

Өсөнсө ҡыҙ исемен әйтер өсөн урынынан торғас, Шәйехзаданың йөрәге "жыу" итеп ҡалды. Алмагөл! Килгән! Осраштылар, ниһайәт! Таптылар бер-береһен! Егеттең бар булмышын ошо ҡыуаныс солғап алды. Шәйехзада ҡыҙҙы Баҡыртауҙа осратырын һиҙенә ине. Тик һаман да Өфөләлер тип кенә ҡуркты. Һуңғы осор егеттең эше күп булды, үс иткәндәй, Өфөгә юлы төшмәне лә ҡуйҙы. Бер хат яҙҙы ла ул яҙыуын, тик ошоғаса кеҫәһендә йөрөтә. Сөнки яуап хаты алыр өсөн төплө генә адресы юҡ. Көн дә тиерлек юлда, һәр төн тиерлек яңы урында ҡуна. Яуап алыр өсөн адресынды әйтмәйенсә хат ебәреүҙе әҙәпһеҙлек һанай Шәйехзада. Миңә хат яҙма, тигән кеүек килеп сыға бит. Хаттан алда үҙенең Өфөгә барып сығырына өмөтләнде. Тик уңайы булманы.

Шәйехзада, ғәҙҙәтәгесә, ҡыҙҙың исемен һорайһы урынға, бер ни өндәшмәйенсә, шат йылмайып, хыялдарға бирелеп, мандолинаһын сиртеп тороуон аңлап ҡалды. Ул теге саҡта Өфөлә Алмагөлгә бағышлаған йырын хәтерләне, тик уны бында, ҡыҙҙың әхирәттәре, таныштары алдында тулыһынса йырлау урынһыҙ яңғырар кеүек. Шуға йырҙы бер аҙ үҙгәртергә итте.

*- Алмагөл, аh, илhамлы бит,*
*алмалы бит,*
*Иманлы бит, илhамлы бит,*
*алмалы бит.*
*Өфөлә мин көтәм, тине,*
*тик көтмәне,*
*Ах, сихырсы, алмалы бит*
*алданы бит.*

Йәштәр ҡул сапты. Алмагөл оялышынан ҡып-ҡыҙыл булды. Өндәшмәй генә башын эйҙе. Эргәһендәге әхирәттәре уның ҡолағына ниҙер шыбырларға тотондо. Бер ҡыҙ урынынан ырғып торҙо:

- Алмагөл бит исемен әйтмәне. Һин уны ҡайҙан белдең?

- Әйтмәнеме ни? - тип аптыраны Шәйехзада ла. - Белдем, сөнки уға ошо исемдән башҡа бер исем дә бармай. Алмагөл бешкән алма кеүек матур!

Хәҙер Шәйехзаданы бер генә уй борсой. Алмагөл үпкәләп китеп бармаһын, уның менән бөгөн һис нимәгә ҡарамай аңлашып һөйләшергә кәрәк. Егеттең бәхетенә ҡыҙ урынынан ҡыбырҙаманы. Шәйехзада, ҡыуанысынан илһамланып, тағы бер-ике ҡыҙға шаян йыр бағышланы. Ошо ерҙә егеттәр зарланды:

- Ә ниңә ҡыҙҙарға ла ҡыҙҙарға? Егеттәргә йыр сығара алмайһыңмы ни һин?

Бабич: "Егеттәргә ҡыҙыҡлы, төртмә таҡмаҡ сығарыу өсөн улар хаҡында саҡ ҡына булһа ла белергә кәрәк", - тип әйтергә уҡталды ла, үҙен туҡтатты. Шағир тигән даны сыҡҡан икән, ул ошондай урында һынатмаҫҡа, сәсәнлеген күрһәтергә тейеш! Аптыраҡас, аптырата әле быларҙы! Шәйехзада эргәһенә концертты алып барыусы егетте саҡырҙы ла:

- Тиҙ генә бер нисә егеттең холҡо йәки сәйер ғәҙәте, етешһеҙлеге хаҡында ике-өс һүҙ менән генә яҙып бир, - тине. Һәм тыныс ҡиәфәт менән мандолинаһын сиртеп йырлап ебәрҙе. Алып барыусыға егеттәр хаҡында йөмлә табырға ваҡыт бирергә кәрәк.

*Килеп сыҡтым йыраҡтан -*
*Алтын тулы Баймаҡтан.*
*Килдем, сөнки әйттеләр,*
*Ашығыҙ һөт-ҡаймаҡтан.*

*Мин иҫән-һау, сәләмәт,*
*Һорағанға сәләм әйт.*
*Сәйәсәттән һораһаң,*
*Эштәр харап ғәләмәт.*

*Ҡыҙылдар йөрөй һулда,*
*Уңда йөрөй аҡтары.*
*Дөрөҫ юлда йөрөйҙәр*
*Бары тик башҡорттары.*

Бабич иғтибар итте: һуңғы куплетты йырлағас, йәштәр бер-береһенә боролошоп ҡараны, шыбырлашыу китте. Тимәк, был мәсьәләгә вайымһыҙ түгелдәр. Улар менән һөйләшергә була. Шәйехзада бер ни булмағандай, йырын шаярыу тарафтарына борҙо, сөнки ошо минутта конферансье бындағы ҡайһы бер егет хаҡында яҙған ҡағыҙын Шәйехзадаға килтереп тоттторҙо. Таныш булмаған егеттәрҙең ҡысыҡҡан ерен белеүенең сере ошонда ине.

*- Сәләм, привет, егеттәр!*
*Күбегеҙҙе беләм бит!*
*Минән һеҙгә йыр кәрәкме?*
*Хәҙер һеҙҙе теләм бит!*

*Бында килгән Ғәйнулла,*
*Уйлай ул "булам мулла".*
*Намаҙ тотмай, танцы йөрөй,*
*Ул ниндәй мулла була?*

Йәштәр гөр итеп көлөп ебәрҙе, шағирҙе дәртләндереп, дәррәү ҡул сапты.

*- Хәтип дуҫҡай! Һаман икән*
*Эт һуғарып йөрөйһөң.*
*Йә ҡыҙ һөймәй, йә ил һөймәй*
*Тере көйө серейһең!*

Йәнә көлөш. Ҡул сабыуҙар... Ошо ерҙә бер егет урынынан тороп китә башланы. Быны күреп ҡалған конферансье уға ҡысҡырҙы:

- Сәхипкиран! Ҡайҙа киттең? Бында һинең хаҡта ла йыр бар!

Шәйехзада ашығып ҡулындағы ҡағыҙға күҙ һалды. Ҡайҙа бында "Сәхипкиран? Ә-ә - бына!" Сәхипкиран - ғәмһеҙ, бөтә нәмәгә битараф", - тип яҙылған ине ҡағыҙға.

- Туҡта, ҡасма, Сәхипкиран! - тип йырлап ебәрҙе Шәйехзада.

*Мин бит барыһын күрәм.*
*Донъя гөрләй.*
*Шул донъянан*
*Ҡасып ятыуын беләм!*

Йәштәр аяҡ өҫтө баҫып ҡул сабырға тотондо. Бабичтың шул тиклем урынлы, дөрөҫ итеп, төрттөргөс йыр сығара алыуын улар көтмәгәйне. Ошо таҡмаҡтың аҙағында Оморҙаҡ Бабич эргәһенә килеп, баяғы һүҙҙәрен шыбырланы.

- Шәйехзада! Һиңә тиҙерәк ҡасырға кәрәк. Ҡыҙылдар бында етеп килә!

Оморҙаҡтың йөҙө ҡурҡыуынан ап-аҡ булған.

Бабичтың йөрәген күңелһеҙ хистәр ялмап алды. Алмагөл менән һөйләшә алмаҫмы икән ни? Ләкин бында ҡала ла алмай бит! Был минутта йәштәр ҡул сабып, Шәйехзаданың тағы ла йырлауын көтә ине.

- Шәйехзада, ашыҡ! - ти ине был минутта Оморҙаҡ түҙемһеҙләнеп.

Китергә кәрәк - быныһы көн кеүек асыҡ. Ләкин хушлашыу һүҙе әйтмәйенсә ла юғала алмай бит ул. Ҙур ҡурҡыныс янауына ҡарамай, ул матур итеп сәхнәнән төшөргә тейеш. Уның йыры йәштәрҙең хәтерендә ҡалһын:

*- Бөгөн килһәм ҡалағыҙға*
*Ҡалағыҙҙы ут алған.*
*Әллә ни булды донъяға,*
*Аҫты-өҫтө буталған.*
*Һаҡ бул, тиҙәр,*
*Һаҡ бул, тиҙәр*
*Һәм әйтәләр: "Ҡас! Йәшен!"*
*Нисек ҡасайым, халҡымдың*
*Өҫтөндә уйнай йәшен!*

Йырының был өлөшө етдиерәк килеп сыҡты. Йәштәрҙең күңелендә яҡты тойғо ҡалдырыу өсөн Бабич йырын шаярыбыраҡ осланы:

*- Звоноктар шылтыраны,*
*Ваҡыт етте бөтөргә.*
*Китмәҫ ерҙән китерһең*
*Ҡушалар бит китергә!*
*Хушығыҙ!*

Осрашыуҙың ошолай көтөлмәгәнсә тамамланыуы йәштәргә оҡшаманы. Улар шаулаша башланы:

- Тағы йырла! Шиғыр уҡы! Китмә!

Аҫта торған Оморҙаҡ ҡурҡыныстың килеп еткәнен аңлатып, ашығып ҡулын болғаны. Шулай ҙа Шәйехзада туҡтаны, уң ҡулын күтәреп, тынлыҡ һораны.

- Дуҫтар! Миңә ашығыс рәүештә китергә кәрәк! Беҙ осрашасаҡбыҙ әле! - Сәхнәнең ситенә еткәс, Оморҙаҡҡа шыбырланы. - Миңә эйәрмә! Мин һеҙгә киттем. Алмагөлдө лә алып кил!

Шәйехзада сәхнәнән ырғып төштө лә, юҡ булды. Ике-өс минуттай ваҡыт үтеүгә Әхмәйҙе, тағы өс ҡыҙылармеецты эйәрткән Ҡылысов концерт барған ергә килеп инде, оҙон шинеленең солғайҙарын ялпылдатып, сәхнәгә менде, унда йырлап торған егеткә туҡтарға ҡушты.

- Бабич ҡайҙа? - тип һораны ул йәштәрҙән һаулыҡ һорашып, сәләм биреп тормаҫтан.

- Китте! - тине йәштәр бер тауыштан.

- Ҡайҙа китте? - Ҡылысов тирә-яғына ҡараны. - Кем белә? Ул ҡайҙа китте?

Ләкин быны бер кем дә белмәй ине. Бабичтың әле генә ошонда мандолина сиртеп, таҡмаҡ әйтеп торғанын ишеткәс, Ҡылысовтың асыуы оторо ҡабарып китте.

- Һеҙ буласаҡ ҡыҙылармеецтар! Нимәгеҙҙе ҡарап ултырҙығыҙ уны сәхнәнән ҡолата һуғып төшөрмәй? Бабич бит дошман, бандит! - Ҡылысов мобилизацияға эләккән йәш егеттәрҙе эттән алып этҡә һа-

лып һүгергә тотондо. Оморҙаҡ ҡаршы һүҙ әйтеп маташты.

- Бабич нисек бандит булһын? Ул - шағир, әртис! Бик һәйбәт йырлай. Таҡмаҡтары шаян, көлкө! - Оморҙаҡ егеттәргә бороло. - Шулай бит, егеттәр? Ҡыҙҙар?

- Эйе! Шулай! - Йәштәр Оморҙаҡтың фекерен хупланы. - Ул шағир! Әртис!

- Молчать! - Ҡылысов ҡыҙып китте. - Бабич ҡыҙылдарға ҡаршы һуғыша! Совет власына ҡаршы! Ул - Ҡыҙыл Армияның дошманы! Аҡ гвардеец! Өҫтән бойороҡ төштө! Бабичты немедленно ҡулға алырға! Һәм атырға!

Быңдай хәбәрҙе көтмәгән йәштәр шымып ҡалды.

- Кем дә кем Бабичты аҡлап, маҡтап маташа, ул беҙгә, Ҡыҙыл Армияға дошман! - Ҡылысов ҡарашын Оморҙаҡта туҡтатты. - Кем саҡырып алып килде уны бында? Кем рөхсәт итте уға Ҡыҙыл Армияға мобилизацияланған егеттәр алдында йырларға? Кем? - Ҡылысов йәнә Оморҙаҡҡа текәлде. - Һинме? Яуап бир! - Ҡылысов буш һүҙ һөйләмәүен аңлатырға теләп, билендәге кобураһын һәрмәргә керешә.

- Мин нисек саҡырайым уны? Мин егеттәр менән бергә булдым һәр саҡ. Ул үҙе килде лә йырлай башланы. Шулай бит?

- Шулай, шулай! Дөрөҫ әйтә! - тиешеп егеттәр менән ҡыҙҙар.

- Мин һеҙҙе иҫкәртәм! - Ҡылысов бер аҙ тыныслана төштө. - Беҙҙең тыл дошман лазутчиктары менән тулған. Шуларҙың береһе - Бабич! Улар беҙҙең егеттәрҙе алдап, аҡтар яғына алып китмәкселәр. Буржуйҙарҙың, байҙарҙың, помещиктарҙың байлығын һаҡларға! Ярлыларҙы тағы ла нығыраҡ таларға! Килеп сыҡмаҫ! Ҡабатлап әйтәм! Кем дә кем Бабич менән, Бабич кеүектәр менән аралаша, ул - Ҡыҙыл Армияның дошманы! Ул Совет власының дошманы! Ундайҙарға яза ҡаты буласаҡ. Шуны белеп ҡуйығыҙ! Аңланығыҙмы?

- Аңланыҡ! Эйе! - тигән тауыштар ишетелде.

- Һеҙгә бойороҡ! Һеҙ бөгөн булмаһа, иртәгә ҡыҙылармеецтар була торған егеттәр! Бабич килеп күренһә, шунда уҡ уны ҡулға алырға! Һәм комендатураға алып килергә!.. Бөттө! Мин һеҙҙең алда һүҙ әйтергә тейеш инем. Минең һүҙем бына ошо. Йәшәһен Ҡыҙыл Армия! Йәшәһен Совет власы! Ур-ра!

- Ура! - тип һөрәнләне Әхмәт менән ҡыҙылармеецтар. Уларға егеттәрҙең ҡайһы берәүҙәре ҡушылды.

- Ниңә ауыл әбейҙәре һымаҡ ауыҙығыҙҙы саҡ асаһығыҙ? - тип екерҙе Ҡылысов. - Хәлегеҙ юҡмы әллә? Әйҙә, көслөрәк! Ур-ра! Ур-ра!

Был юлы егеттәрҙең ауазы көслө һәм дәррәү сыҡты, хатта эргәләге өйәнкегә оялаған ҡарғалар өркөп, бер юлы һауаға күтәрелде лә, ҡурҡыныс, йәмһеҙ тауыштар сығарып ҡарҡылдарға керешә...

**(Аҙағы. Башы 15-се һанда).**

*КӨЛКӨФӨ*

# ҒИБРӘТКӘ МИҪАЛ



**Гәзиттең 1 апрелгә арналған 13-сө һанында Әғләм Шәриповтың "Быға баймаҡтарҙың ғына башы етә" тигән мәрәкәһен уҡығандан һуң ҡасандыр шул уҡ район ауылдарының береһенең клубында спектакль ҡуйыуға бәйле мәрәкә хәл иҫкә килеп төштө. Ҡайһы бер кешеләрҙең билдәле уңайһыҙланыуҙарынан ҡасып, ауылдарҙың исемдәрен "Бер" һәм "Ике"тип үҙгәртеп алам.**

Ул ваҡытта бер тирә ауылдары араһында сәнғәттә булһынмы, спорттамы, хеҙмәттәме, ярыш сәме йәшәне. Ауыл йәштәре бер-береһенә концерт, спектакль ҡуйырға, футбол, волейбол, шахмат, шашка уйнарға йөрөнө. Һәр хәлдә, ул заман етәкселәре сәнғәттәге, спорттағы ярыш сәмен ошо рәүешле хеҙмәт сәменә әйләндерә белә ине.

Шундай йолалар сәскә атҡан йылдарҙың береһендә Бер ауыл йәштәре Ике ауылы клубына һәүәҫкәр драматург яҙған әҫәр буйынса спектакль алып килә. Спектакль башында яңы ғына әрмендән ҡайтҡан ике егет ҡайынлыҡ араһында байрам итә, тамаҡ сылатып ултыра. Кисәгә һалдаттар "ролдәренә" шул тиклем ныҡ бирелеп китә, үҙҙәренең спектаклдә икәнен онотоп, ысынбарлыҡта итеп тоя башлай. Хикмәте шунда: спектакль өсөн алып килгән шешәләгә һыу урынына ысын яртыны алып килгән икән был дуҫтар. Бәлки, кем менәндер бәхәсләшкәндәрҙер ҙә. Уларҙың араһында шундай диалог була:

- Нисек уйлайһың, дуҫ, был Ике ауылы йәштәрен беҙ быйыл футболда еңә алырбыҙмы икән? Былтыр еңелдек...

- Нисек еңмәй, ти, былтыр бит беҙ бөтә көскә уйнай алманыҡ...

- Барыбер улар футболда беҙгә ҡарағанда көслөрәк. Уның ҡарауы, беҙҙең егеттәр буйға иң оҙоно...

- Эш буйҙамы ни?

- Мин бында волейбол тураһында әйтәм. Икеләр менән нисәмә тапҡыр уйнаныҡ. Йә әйт әле, улар беҙҙе ҡасан волейболда еңгәне бар?

- Шулай шул. Барыбер ҙә, дуҫҡай, быларҙың ҡыҙҙары матур... Уларҙың шул матурлығы өсөн футболда ғына түгел, волейболда ла йәҙ тапҡыр еңелергә әҙермен...

- Әйттең һүҙ...

Ҡыҫҡаһы, спектакль өсөн алып сыҡҡан ярты тәьҫиренән "әртистәр" барлыҡ сиктәрҙе онота. Тамашасылар йығылып ятып көлә. Быңа егеттәр бер мәл, барлыҡ сиктәрҙе үтеп, кеҫәләренән тәмәке сығарып тарта башлай. Тауыҡ кетәгендәй бәләкәй ауыл клубы төтөнгә тула. Әбейҙәр ибәтәйһеҙ ҡыланған әртистәрҙе әрләргә тотона: "Коромағырҙар, нишләйҙәр былар, кафыр ҡошап өйҙә тартып ултырмаһалар, фәлән-фәсмәтән..."

Бер аҙҙан әртистәрҙең ҡылығынан бот сабып көлгән ир-ат та көлөүенән туктап, Бер ауылы йәштәренә дәғүәһен белдерергә тотона. Сәхнә менән зал араһындағы көсөргәнеш ҡыҙғандан-ҡыҙа барып, инде шартлар сиккә еткәндә, һыҙғыртҡыс тауышы яңғырай. Сәхнәгә милиционер йүгереп сыға ла:

- Быңа ҡайҙа һеҙ ҡасып эсеп ултыраһығыҙ. Йәмәғәтселек урынында. Көпә-көндөҙ. Барлыҡ халыҡ коммунизмды тиҙерәк еткерер өсөн билен биштән быуып хеҙмәт иткән саҡта. Мин һеҙҙе ун биш тәүлеккә ултыртам. Әрмелә ике йыл буйы ултырмаған аҡылды үҙем ун биш тәүлектә буйығыҙға һеңдерәм. Эскеселәр. Әрәмтамаҡтар. Хулигандар. Бер таҡтанан йөрөтәм...

Милиционер кисәге һалдаттарҙы этеләп-төрткөләп тиерлек алып сығып китә. Ҡыҫҡаһы, төп ролдәрҙе башҡарырға тейеш булған был ике егет спектаклдең аҙағына тиклем бер тапҡыр ҙа сығып күренмәй. Спектаклде сәхнәгә ҡуйыусы режиссер бында үҙенең барлыҡ оҫталығын эшкә егеп, сәхнә әҫәренең төп геройҙарға ҡағылышлы вариантын шундуҡ үҙгәртеп, яңы сәхнәләр, яңы ваҡиғалар уйлап сығара. Сәхнәгә сығыусы геройҙар ара-тирә теге егеттәрҙе лә иҫкә төшөрөп ала: йәнәһе, ана бит, тәртипте боҙоп, төрмәгә барып эләктеләр, ошонда беҙҙең менән бергә йөрөр урынға, фәлән-фәсмәтән...

Спектаклдең аҙағы шулайыраҡ бөтә: эскелек ана бит кешене нимәгә алып килтерә, туғандар, бәгзе берәүҙәр шул яман ғәҙәте арҡаһында хатта спектаклдә лә уйнай алмай, матур итеп йәшәү тураһында әйтергә лә түгел.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Спектаклдең режиссеры кем булғандыр, әммә шуныһы мөһим: ул егеттәрҙең спектаклдә ысын араҡы эсеп "эш боҙоуҙарын" тамашасыларҙы айыҡ тормошҡа әйҙәүҙә ғибрәткә миҫал итеп бик оҫта файҙалана.**

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ*

# БАШҠОРТСА...

**Һуңғы ваҡытта ҡуйырған тел мәсьәләләре балалар донъяһын да урап үтмәне. Кескәйҙәр ололарҙы борсоғанды үҙҙәренсә төшөнәмелер, һәр хәлдә, ошо юҫыкта ҡыҙыҡ ҡына хәлдәр ҙә тыуып тора икән.**

## Әрләйҙәр...

Бер көндө ҡыҙым менән балалар баҡсаһынан ҡайтып киләбеҙ.

- Әсәй, беҙҙе садикта әрләйҙәр.

- Нимә тип?

- Башҡортса һөйләшегеҙ тип...

- Дөрөҫ әрләйҙәр. Башҡортса һөйләшегеҙ.

- ...

Бер аҙ тынлыҡтан һуң ҡыҙым тағы һорай:

- Әсәй, ә беҙ һинең менән нимәсә һөйләшәбеҙ?

- Башҡортса!

- ....

Йәнә тынлыҡ. Бер аҙ уйланып барғас, былай ти:

- Ә мин садикта ла шулай һөйләшәм ул.

- Тимәк, һине түгел, башҡаларҙы әрләйҙәр, борсолма.

Әлегә туған теленән башҡаны белмәгән бала шул яуап менән килеште.

## Бер тел дә белмәйем...

Күршеләрҙең ҡыҙы минең ҡыҙымдың тиҫтере. Бергә уйнайҙар. Береһе -русса, икенсеһе башҡортса һөйләшә. Бер көн бәләкәс күршем һорай:

- Тетя Резеда, а Нурия на каком языке разговаривает?

- На башкирском.

Шул саҡ күршекәйем башын эйеп, кәйефһеҙләнеп китте лә:

- Эх, а я никаких языков не знаю, - ти.

- Как? Ты же знаешь русский язык, - тим тегегә.

- Нееет, я на обычном языке разговариваю,-тигән булды күрше ҡыҙы кәйефһеҙ генә.

**Резедә ВӘЛИЕВА.**
**Сибай ҡалаһы.**

## Урыҫтың урыҫсаһы бөтмәй

Улымды: "Урамдан өйгә килеп ингәндә урыҫ телен тышта тәкөрәп ҡалдыр",- тип өйрәткәнмен. Йәнәһе, балаға аңлайышлыраҡ булһын, тип, өйҙә тик башҡортса һөйләшәбеҙ, тигәнде шулай уйын формаһында күндергәнмен уға. Ул был ғәҙәткә шул тиклем күнегеп киткән, ҡайһы саҡ русса һүҙҙәр ысҡынып китһә, "Ах! Тәкөрөп бөтөлмәгән бит!" йүгереп барып тәкөрөп килә...

Бер көн ҡунаҡтар килгәйне, араларында улым йәшендәге урыҫ ҡыҙы ла бар. Балалар уйнап китте. Бер аҙ ваҡыттан был ҡыҙҙың әсәһе яныма килде.

- Улығыҙ ҡыҙымды ишек төбөнән үткәрмәй аптырата бит, -ти.

- Бәй, улым, ни эшләйһең? - тип шелтәләйем.

- Тәкөртәм! Тик уның урыҫсаһы нығ күп эсендә, күпме тәкөрһә лә, бөтмәй ҙә бөтмәй, - тимәһенме.

Ҡунаҡтар ҡайтып киткәс, көлөштөк. Улыма урыҫтың урыҫсаһы ҡоҫһа ла бөтмәйәсәк икәнде көскә аңлаттым.

**Зифа ТОЛОМБАЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

## Просто Айзилә...

Бәләкәй ҡыҙым балалар баҡсаһында концертта ҡатнашты. Башҡорт милли кейемендә бейенеләр. "Әсәй, ҡара, мин башҡорт!" тип бик шатланып йөрөнө. Ҡайтҡас, ҡулдәгән систереп булмай ҙа ҡуя. Әүрәтеп, саҡ систерҙек. Сисеп элде лә, ҡулдаҡҡа ҡарап былай тине:

- Ярай, мин әлегә башҡорт булмай торам инде. Просто Айзилә генә булам...

**Рәйфә БУЛӘКОВА.**
**Ейәнсура районы.**

## Урыҫстанға китмәй...

Башланғыс мәктәптә уҡыған улымдың класында ла башҡорт телен уҡыу һәм уҡымау хаҡында бәхәстәр ҡубып тора. Класта башҡортса аңламаған башҡорт балалары бар. Улым, мәктәптән ҡайтып, шул хаҡта һөйләй.

- Данил "башҡортса уҡымайыҡ" тип әйтә ине, беҙ уны ҡурҡыттыҡ.

- Нимә тип ҡурҡыттығыҙ?

- Башҡортостанда башҡортса уҡығың килмәгәс, һинә Урыҫстанға күсеп китергә тура килә, тип.

- Ҡурҡтымы һуң?

- Эйе. Урыҫстанға барырға беҙҙең аҡсабыҙ юҡ, тине. Шуға башҡортса уҡырға ризалашты...

## Кәнфитһеҙ булһа ла...

Йәй көнө ҡартәсәйҙә төрлө яҡтан ейәндәр йыйыла. Йәй буйы уларҙың теле башҡортсаға йышыла. Башҡорт көнө билдәләп уйнарға ла яраталар. Мәҫәлән, кемдәр көнә буйына русса һүҙ ҡыҫтырмай һөйләшә, шуларға шоколад йәки башҡа тәмлекәс бирелә. Сургуттан килгән Азат күп осраҡта кәнфитһеҙ ҡала. Шулай ҙа бирешмәй:

- Кәнфитһеҙ булһа ла, мин дә башҡорт! - тип ҡысҡыра.

**Әлиә РАФИҠОВА.**
**Баймаҡ ҡалаһы.**

✓ Ҡатын-ҡыҙ биҙәнеү өсөн йылына 91 сәғәт исраф итә икән. Британия ғалимдары шулай тип белдерә. Ғүмер оҙайлығын уртаса 70 йәш тип алабыҙ икән, ҡатын-ҡыҙ косметикаға ғына 43 аҙна бүлә.



ИНТЕРНЕТТАН



# ЙЫЛМАЙЫП ЙӘШӘЙЕК

■ Халыҡ-ара ғалимдар төркөмө лидерлыҡ сифаттары менән бәйле ДНК молекулаһын асыҡлаған. Йышыраҡ осраҡта, лидерлыҡҡа ынтылыу нәҫелдән күсә икән. Ғалимдар 4 мең кешенең эшенә, үҙен уратып алған кешеләргә мөнәсәбәтен генетик яҡтан тикшереп, лидерлыҡ һәләтен күрһәтеү тенденцияһы менән rs4950 генотибы бәйле булыуы билдәләнгән. Әммә ғалимдар үткәргән тәжрибәләр күрһәтеүенсә, генетика ыңғай тышҡы мөхит тәьҫире менән берләшкәндә генә кеше уңышлы лидер булып китә ала. Тыумыштан кемгәлер лидер позицияһына сығыу һәм унда нығыныу мөмкинлеге бөтөнләй бирелмәһә лә, лидерлыҡ сифатының бер өлөшөн тәрбиәләп була, ти ғалимдар.

■ Гарвард университетында уҙғарылған тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, офисты йыш елләтеп тороу хеҙмәткәрҙәрҙең когнитив функцияларына яҡшы йоғонто яһай. Белгестәр 6 көн буйына төрлө шарттарҙа эшләгән 24 кешене тикшергән. Һауа таҙа булған бинала эшләүселәр ҡуйылған бурыстарҙы 61 процентҡа тиҙерәк үтәгән. Әгәр ҙә бүлмәләрҙә һауаны бысратыусы матдәләр генә түгел, углекислоталы газ кимәле лә түбән икән, һынауҙа ҡатнашыусыларҙың мәғлүмәтте ҡабул итеү һәләте 101 процентҡа күтәрелгән. Әйткәндәй, Кардифф университеты ғалимдары мәғлүмәттәре буйынса, офистағы йәшеллек эшкә һәләтлелекте 15 процентҡа арттыра. Бынан тыш, бүлмә гөлдәре хеҙмәткәрҙәрҙең сәләмәтлегенә ыңғай йоғонто яһай, улар үҙҙәрен күпкә бәхетлерәк тоя, имеш.

■ Бер төркөм Америка ғалимдары 15 йылға һуҙылған тикшеренеүҙәр үткәреп, тормошҡа ыңғай ҡараштা булыу ғүмерҙе оҙайтыуын асыҡлаған. Кем йышыраҡ йылмая, уларҙың йөрәк-ҡан тамырҙары системаһы нығыраҡ була икән. Тикшеренеүҙәрҙә 45-84 йәштәге 5100 кеше ҡатнашҡан. Тән массаһы индексы, ҡандағы холестерин һәм глюкоза кимәле, артериаль ҡан баҫымы кеүек факторҙары менән бер рәттән, уларҙың оптимист йәки пессимист булыуына ла иғтибар иткәндәр. Асыҡланыуынса, оптимистарҙың сәләмәтлеге күпкә яҡшыраҡ икән.

■ Ҡытай ғалимдары шәхси гигиена әйберҙәре сәләмәтлеккә ҙур зыян килтерә, тип белдерә. Пекин университеты белгестәре уларҙың хатта бала төшөү хәүефенә килтереүе тураһында әйтә. Тикшеренеүҙәрҙә 300 ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан, 132-һе бындай проблемаға дусар булған. Уларҙың анализдарында табиптар ҡайһы бер фталаттарҙың күләме ҙур булыуын асыҡлаған. Бындай фталаттар шампунда, һабында, шулай уҡ аҙыҡ-түлектең ҡаптары составында бар. Фталаттар артыҡ ауырлыҡ йыйыуға ла булышлыҡ итә, ти ғалимдар.

■ Ҡатын-ҡыҙ биҙәнеү өсөн йылына 91 сәғәт исраф итә икән. Британия ғалимдары шулай тип белдерә. Ғүмер оҙайлығын уртаса 70 йәш тип алабыҙ икән, ҡатын-ҡыҙ косметикаға ғына 43 аҙна бүлә. Әммә төрлө төбәктә йәшәгән гүзәл заттарҙы айырып ҡарай башлаһаң, был уртаса һандар бер-береһенән айырылып тора. Мәҫәлән, көньяҡта йәшәүселәр төньяҡта йәшәүселәргә ҡарағанда макияжға ваҡытты күберәк бүлә. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусыларҙың 13 проценты бөтөнләй косметика ҡулланмай. 9 процент респондент биҙәнмәйенсә өйҙән сыҡмауын белдергән. 1 процент - спорт менән шөғөлләнгәндә лә макияж ҡуллана.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Ҡояш көлтә-көлтә алтын нурҙарын ергә һибә лә һибә, наҙлы ел ағас япраҡтарын иркәләй, ә улары, оялсан ҡыҙҙар кеүек, шыбырлашып ҡына бер-береһенә сер һөйләйҙәр. Сағыу сәскәләр төҫлө күбәләктәр, нәҡ тә баҫтырышмаҡ уйнаған күнелсәк балалар инде, шашынып, әле бер сәскәгә, әле икенсеһенә осоп ҡуналар. Сиңерткәләр сыр-сыр килеп, үҙ көйҙәрен һуҙалар. Ҡайҙалыр кәкүк саҡыра. Тәбиғәттең моңға сорналған илаһи бер мәле, әйтерһең дә, бар йән эйәһе оркестрҙа уйнай.**



# ТАҢ СУЛПАНЫ КЕҮЕКТӘР...

Юлдан аяҡ-ҡулдары ептәй генә хәлһеҙ малайҙы етәкләгән ун ике-ун өс йәштәр самаһындағы ҡыҙ килә. Ул елпенеп осоп йөрөгән күбәләктәрҙе лә күрмәй, ҡоштар һайрағанын да ишетмәй. Йөҙөндә бөтмәҫ-төкәнмәҫ ҡайғы-хәсрәт ярылып ята. Ул: "Ҡустыҡайым, һинең менән тағы ла әҙ генә булһа ла бара бирәйем дә..." - тип, туҡтап, бер аҙ хәл йыйып тора ла, йәнә шул уҡ һүҙҙәрҙе эстән генә ҡабатлап, юлын дауам итә. Тормошҡа ашырасаҡ яман уй-ниәтен күҙ алдына килтереп, йөрәге һыҙлап ярылырҙай булып тибә, ҡустыһының ҡулын ҡыҫып-ҡыҫып тотоп ала. Нисә көн инде һыҡтап илауҙарынан күҙҙәре шешенеп, бер туҡтауһыҙ субырлап аҡҡан йәштәренән биттәре ярылып бөткән. Ә бала апаһының ниндәй уйҙар менән үҙен урманға алып китеп барыуын аңламай ҙа, башын эйеп, көс-хәлгә генә һөйрәлеп бара. Дөрөҫөрәге, уйларлыҡ хәлдә түгел ул, нисә көн инде ауыҙына бер семтем дә ризыҡ ҡапҡаны юҡ...

Бына бер ҡошсоҡ, ояһына кешеләр яҡынлашҡанына хәүефләнеп, әсе итеп сырылдай башланы. Ҡыҙ әкрен генә башын күтәрҙе. Ҡошсоҡ өйөрөлөп-өйөрөлөп осоп йөрөнө лә, суҡышындағы емен балаларына йәһәт кенә ҡаптырып, тағы фырлап осоп та китте. "Тәбиғәттә барыһы ла үҙ урынында шул. Ана бит, ҡоштоң ҡошо ла балаларын ҡурсып, ҡайғыртып тора, һәр ҡайһыһының ауыҙҙарына емен ҡаптырҙы ла осоп та китте. Ошо бәләкәй ҡошсоҡтай ҙа хоҡуҡтары юҡмы ни минең атайым менән әсәйемдең был фани донъяларҙа? Беҙ, әҙәм балалары, тәғәм ризыҡ та таба алмай, зар-интизар булабыҙ. Хәлкәйҙәребеҙгә генә керер кеше юҡ шул. Йә Хоҙайым! Ниңә әҙәм балалары бер-береһенә шул тиклем мәрхәмәтһеҙ, аяуһыҙ була икән? Эй, кешеләр, ни гонаһыбыҙ бар ине беҙҙең һеҙҙең алдығыҙҙа? Аслыҡтан, сараһыҙлыҡтан, был ыҙаларҙың, йәберләнеүҙәрҙең сикһеҙлегенән, ғәзиз ҡустымды, Әбделхәйемде, әсәкәйем урманда ҡалдырып китергә ҡушты бит. Баламдың аслыҡтан ғазапланып, күҙемә ҡарап тилмереп үлеүен күрмәйем, һис юғында, ҡалған икәүһен тере алып ҡалайым, тигәндер инде. Гонаһ ҡылырға китеп барам бит. Ни йәнем менән ғәзизкәйемде ҡара урманда ташлап ҡалдырып китермен икән? Ниҙәр генә ҡылайым һуң? Кисер мине, ҡустым. Йә, Аллам, ҡустымды бәлә-ҡазаларҙан һаҡла, йыртҡыс тештәренә дусар итмә. Йә, Раббым, был афәттәрҙән ҡотолоу юлҡайҙарын күрһәтһәң икән..." - тип, үкһеп илап, ергә һығылып төштө лә устарына үләндәрҙе йомарлап йолҡоп алды. Бала ла апаһының эргәһенә һуҙылып ятты ла хәлһеҙлектән күҙҙәрен йомдо. Улар шул килеш күпме ятҡандарҙыр, Хоҙайым үҙе генә белә. "Туҡта, таныш тауыш ишетелә түгелме? Атайымдың тауышына оҡшаған дабаһа. Булмаҫтыр, был мөмкин дә түгел", - тип, һиҫкәнеп китте лә ҡыҙ күҙҙәрен асты. Ир кеше һөйөклөләрен ҡосағына алып, торғоҙоп ултыртты:

- Хәйбәм, Әбделхәй, балаҡайҙарым, һеҙ минең ҡайтып килгәнде йөрәгегеҙ һиҙеп, ҡаршы килдегеҙме? Ҡайһылай ғына йонсоғанһығыҙ, - тип, бите буйлап тәгәрәгән эре-эре әсе күҙ йәштәрен һөртөп алды. Ҡыҙ ни әйтергә лә белмәне, башын түбән эйеп, ҡарашын йәшерҙе. Малай хәлһеҙ генә ҡулдары менән атаһының муйынына һарылды ла башын күкрәгенә һалды. Иң ҡәҙерлеләрен күкрәгенә ҡыҫып, һөйләне лә һөйләне атаһы:

- Бына, Хоҙай насип иткәс, ҡайтып киләм бит әле, балаҡайҙарым. Тәҡдиреңә яҙылғанды күрмәйенсә, гүргә кереп булмай, тигән боронғолар. Сабыр булайыҡ, балаҡайҙарым, тәрән кисерештәргә тарығанда, иң элек сабыр итергә кәрәк. Ни хәтлем ауыр булһа ла, был һынауҙарҙы еңеп сығырбыҙ, Аллаһ бойорһа. Һеҙҙең киләсәгегеҙ яҡты, матур булыр...

...Был яҙғандарым Бөрйән районы Үрге Нөгөш ауылының указлы муллаһы Нәбиулла Усманов ғаиләһенең әсе яҙмыштарының бер эпизоды ғына.

Атайым бер ваҡыт ауылға ҡайтҡанымда: "Ямашта указлы мулла Нәбиулла Усманов йәшәй торғайны. Үҙен, ғаиләһен ни хәтле ыҙалатһалар ҙа, балалары ниндәй һәйбәт кешеләр булып сыҡты бит. Яҙ һин, ҡыҙым, улар тураһында. Золом ҡорбаны булды ул Нәбиулла мулла. Шул фажиғәле замандарҙа һәләк булған кешеләр онотолмаҫҡа тейеш", - тигәйне. Атайымдың, һоҡланып, "балалары ниндәй һәйбәт кешеләр булып сыҡты бит", тип ҡабат-ҡабат әйткән һүҙҙәре миндә ҡыҙыҡһыныу уятты.

- Нәбиулла мулла, һарыраҡ, бәләкәсерәк кәүҙәле бабай ине. Ауылыбыҙҙан Ғәбитов Әхмәҙулла, Әхмәтов Хәлил ағайҙар тәүге белемде унан алғандар. Ҡатыны Зөбәйҙә инәй - Байназар ауылының указлы муллаһы Үтәбаев Мәхмүттең ҡыҙы. Уларҙың Хәйбә, Әбделхәй, Әбдразаҡ исемле

ЙОЛА ТОТҠАН - ЯҘЛЫҠМАҪ

# БАЛАҢДЫҢ БАЛАҺЫ...

## "өләсәй" тип әйтһен һиңә

**Ошо көндәрҙә Стәрлетамаҡ ҡалаһы башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты һәм ҡаланың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы "Өләсәйҙәр һәм ейән-ейәнсәрҙәр" тигән конкурс уҙғарҙы. Жәлил Кейекбаев исемендәге 3-сө гимназияның тамаша залына Стәрлетамаҡтан ғына түгел, Салауат, Ишембай ҡалаларынан, Ғафури районынан да ағинәйҙәр һәм атай-әсәйҙәр йыйылғайны. Конкурста ҡатнашыусы 5 өләсәй һәм 5 ейән-ейәнсәр: Айбулат Ваһапов менән өләсәһе Эльвира Асҡарова; Азалия Райымғужина менән өләсәһе Тәнзилә Ғайсина; Алмаз Ҡарабаев менән өләсәһе Миңниса Аҡкөбәкова, Раушания һәм Айбулат Мансуровтар менән өләсәйҙәре Рауза Мозафарова; Алмагөл Хәмзина менән өләсәһе Рәсимә Ғатауллина зал тулы тамашасы һәм баһалама комиссияһы алдында һынау тотто.**

Байрам тәүге тапҡыр уҙғарылһа ла, бик йәнле үтте. Төрлө тарафтарҙа тыуып-үҫкән өләсәйҙәр үҙҙәренең тормош һабаҡтары менән уртаҡлашҡан. Улар ҡыҫҡа ғына ваҡыт эсендә ейән-ейәнсәрҙәренә ниндәй матур тәрбиә биреүҙәрен үҙ сығыштарында сағылдыра алды. Өләсәйҙәр ейән-ейәнсәрҙәре менән бергәләшеп таҡмаҡтар, ҡобайырҙар әйтте, йырланы, бейене, төрлө музыка ҡоралдарында уйнаны. Уларҙың был сараға етди әҙерләнгәне күренеп тора. Әйтеш әйтеү, шәл бәйләү кеүек йолалар менән бергә, өләсәй һандығына бәйле матур күренештәрҙең күрһәтелеүе тап ошо хаҡта һөйләй. Өләсәйҙәрҙең дә һәм кескәйҙәрҙең дә милли кейемдәр кейеп сәхнәгә сығып баҫыуҙары үҙе генә лә ни тора!

Конкурстың төп әһәмиәте шунда: үҙендең өләсәйлек бурысынды халыҡ алдында күрһәтер өсөн бала тыуғас та әҙерләнә башларға кәрәк, тигән фекер тыуа. Хәҙерге заман өләсәйе булыу үтә лә яуаплы, үтә лә ҙур тырышлыҡ талап итә. Өләсәйлек бурыстарының күп яҡлы булыуы һәм уның тамырҙарының тәрәндә ятыуы тураһында уйландыра был сара. Ә инде ошо мөҡәддәс бурысты тейешенсә үтәр өсөн иң беренсе уның асылына төшөнөргә кәрәк. Баландың балаһы үҙеңә "өләсәй" тип өндәшерлек булһын! Йәғни өләсәйлек рухы ҡандан, әлмисаҡта яралған тойғоларҙан килә. Быуындан-быуынға тапшырылған йолаларҙы, телдән-телгә күсә килгән һүҙ байлығын, ғөрөф-ғәҙәттәрҙе, тарихты балаларыңа, балаларыңдың балаларына өйрәтеп ҡалдырыу - былар барыһы ла өләсәйҙәрҙең төп бурысы.

Бынан йөҙ йыл элек кейәүгә сыға торған ҡыҙ бала йөн иләй, сигеү сигә, шәл бәйләй белергә тейеш булған булһа, хәҙер иһә

✓ **Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы буйынса XXI быуат башында биологик йәш бер ни тиклем үҙгәрҙе. Йәғни 25-44 йәш - йәш осор, 44-60 - урта йәш, 60-75 - оло йәш, 75-90 - ҡартлыҡ, 90 йәштән һуң оҙон ғүмерлелек билдәләнә.**



балалары бар ине. Нәбиулла мулланың бар ғына байлығы: 2 аты, 3 һыйыры, бер самауыры булды, - тип һүҙен дауам итте атайым. - Бөтә малын колхозға тартып алдылар, бер нәмәһеҙ тороп ҡалды. Үҙен колхозға ағза итеп тә алманылар, яңғыҙаҡ булды. Етмәһә, ҡутарғансы һалым һалдылар. Ситкә сығып китер ине, кәсеп иттеме икән, нисек булһа ла, һалымды түләй торғайны. Малдары булмаһа ла, үҙҙәре ауыл кешеләре менән бергә йәйләүгә күскән була торғайнылар. Әсәйем минән уларға һөт биреп ебәртер булды...

Документтарҙан күренеүенсә, Нәбиулла Усманов ул саҡта Бөрйән районына ҡараған Кәбәс ауылыныҡы булғандыр. Бер ваҡыт Ямашта булғанда Зәйнәп тигән инәйҙе осраҡҡайным, ул да шуны раҫланы: "Нәбиулла мулла сығышы менән Кәбәс ауылыныҡы, Ямашҡа үҙе менән ата-әсәһен дә күсереп алып килгәйне. Бәләкәйерәк көҙәүле ине. Балалар уҡытты, атайым мәрхүм мәзин ине, аҙан әйтеп, кешеләрҙе мәсеткә саҡырҙы. Аныҡ ҡына әйтә алмайым: 1930-1931 йылдар тирәһе инеме икән, Нәбиулла мулланы ғаиләһе менән ауылдан ҡыуҙылар, ҡырҙа үлде инде ул", - тип һөйләгәйне.

Әйе, муллаһын ҡыуғас, мәсетенең манараһын да емереп төшөрәләр. "Беҙ, бала-сағалар ҙа, мәсеттең манараһын ҡолатып төшөргәндәрен аптырап, тамаша ҡылып ҡарап торҙоҡ. Бала булһаҡ та, ниндәйҙер йәмһеҙ, тәҙәтә алмаҫлыҡ хата, гонаһ эшләнгәне тойолоп, күңелгә ауыр ине. Бына манараһы менән бергә айы ергә төштө лә юғалды ла ҡуйҙы. Алтын булдымы икән әллә, тип эҙләп ҡаранылар - тапманылар", - тип һөйләне атайым.

Ололарҙың һөйләүе буйынса, ауылдан ҡыуылғас, Нәбиулла мулла, яҡлау эҙләп, Байназарға ҡайныһына бара. Бер ямандың касафаты мең кешегә бәлә килтергән заман булған шул. Күп тә тормай, Нәбиулла мулланы ҡулға алалар. Артынса ҡайныһы - Мөхмүт мулла өйөнән генә түгел, хатта тыуған ауылынан да ҡыуыла. Нәби ауылының бер кешеһе беҙҙең ауылдың муллаһы булырһың, тип алып ҡайтып, үҙенең мал өйөндә йәшәргә урын бирә, ләкин унда ла тыныс ҡына йәшәргә насип булмай Мөхмүт муллаға. Яман кеше йән ҡыҙғанмаҫ, тигән боронғолар. Өй хужаһының күршеһе: "Әгәр ҙә Мөхмүт мулланы өйөндә йәшәтһән, түрәләргә әйтермен, үҙеңдең башыңды ла төрмәгә тығырҙар", - тип янай. Яла теле йылан ағыуынан да яман. Һәр кемгә үҙ башы ҡәҙерле. Мөхмүт мулла ейәне Әбделхәй менән был өйҙән дә сығып китергә мәжбүр була. Олатай менән ейән, зыярат ҡапҡаһына ҡыуыш ҡороп, шунда йәшәй башлайҙар. Үҙәктәргә үтерлек көҙгө ҡаты һыуыҡ көндәргә тиклем шул ҡыуышта көн күрә улар. Мөхмүт мулла һыуыҡ үткәреүҙән ауырып вафат була. Ул Нәби ауылының оло зыяратында ерләнгән.

Ғаиләнең ҡалған ағзаларына ла көн күреүе бик ауыр була. Яҡындарын юғалтыу ҡайғыһы йөрәктәрен өтә. Зөбәйҙә инәйгә, берҙән, мулла ҡыҙы, икенсенән, мулла ҡатыны булараҡ та, бик ныҡ ауырға тура килә. Эш бирмәй ҡаңғырталар. Яҙмышы ҡайғы-хәсрәттәрҙән генә туҡылған Зөбәйҙә инәй ҡырҡ һигеҙ йәшендә генә сыйҙым киткән мәлдә, йылға аша ферманың башмаҡтарын ҡыуып сығарғанда, үҙе лә һыу кисеп, һыуыҡ үткәреп, ауырып үлә. Хәйбәһе ун алты йәшенән генә Аҙанғолов Мөхәррәм тигән кешегә тормошҡа сыға. Ҡустылары Әбделхәй менән Әбдразаҡ Хәйбә апайҙарының ҡулында ҡала. Апай кешегә Күркәтауҙа ағас ҡырҡырға, колхозда ҡарауылсы, бейә, һарыҡ көтөүсеһе, аш бешереүсе лә булып эшләргә тура килә. Ҡана йылғаһы буйлап һал ағыҙғанда хатта ағып китә яҙа. Яҙмыш ҡушыуы булғандыр инде, Хәйбә инәй менән ире Мөхәррәм бабайҙың тормош юлдары айырыла, шулай булһа ла, килен менән ҡәйнә әсәле-ҡыҙлы һымаҡ бик татыу йәшәйҙәр. Ҡустыларын, үҙенең балалары Сәмиғаны, Сәйетте аяҡҡа баҫтырыуҙа ҡәйнәһе Өмөниса инәйҙең ярҙамы ҙур була. "Бәләкәй генә келәттең дүрт мөйөшөндә әсәйемә трудоденға бирелгән һоло, арыш, бойҙай, тары ярмалары менән тулы ҙур көбөләр ултыра торғайны. Өләсәйемдең ҡул тирмәне булды. Шул ярмаларҙы тартып, беҙгә икмәк, көлсә бешереп ашатыр ине", - тип һөйләне Хәйбә инәйҙең ҡыҙы Сәмиға апай.

Ике ир уҙаманы Әбделхай бабай менән Әбдразаҡ бабайҙың фотоәсәменә ҡарайым да уйҙар сөңгөләнә сумам. Улар яҙмышы - бөтә ил яҙмышы. Бәләкәй генә көйө иңдәренә ишелеп төшкән аслыҡын да, юҡлыҡ михнәттәрен дә, йәберһетелеү-кәмһетелеүҙәрҙе лә, ғәзиздәрен юғалтыу ҡайғыларын да кисерһәләр ҙә, бөгөлөп төшмәгән, теше-тырнаҡтары менән йәшәргә тырышып ятҡан көслө рухлы бабайҙар! Йөҙҙәрендә тормошҡа оло һөйөү, рух ныҡлығы, ихтыяр көсө балҡып тора. Улар, ҡараңғылыҡты еңеп, асфальтты тишеп, яҡтыға үрелеп үҫеп сыҡҡан матур гөлдәргә оҡшағандар. Ундай кешеләрҙе ир арыҫланы - таң сулпаны, тип йөрөтәләр.

Усманов Әбделхәй Нәбиулла улы хәрби хеҙмәт кешеһе була, Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнаша. " Дошмандарҙы дөмөктөрөп, Рейхстагтың үҙенә барып индек. Аяҡ баҫыр урын юҡ, үлеләрҙе тапап үтәбеҙ. Мөхмүт олатайым менән атайымдың рухтары, Уйылдан бабайымдың доғалары шул ҡаты һуғыштарҙан иҫән-һау әйләнеп ҡайтырға ярҙам иткәндер инде", - тип һөйләр булған ул. Һуғыштан һуң запастағы офицер Ульяновск хәрби училищеһы уҡытыусыһы Әбделхәй бабай йәш быуынды тәрбиәләүгә тос өлөш индерә. Ә Әбдразаҡ бабай оҙаҡ йылдар Стәрлетамаҡта химзаводта инженер-технолог, парторг булып эшләй. Хәйбә инәйҙең улы Аҙанғолов Сәйеттең улы Илһам Аҙанғолов - Әбделхәй бабаһы кеүек хәрби кеше. Ул Әлкәлә хеҙмәт итә. Инәйебеҙҙең ҡыҙы Сәмиғә апай хәләле Марс ағай Баязитов менән матур-матур балалар үҫтергәндәр. Кеше ғүмере тик шатлыҡтарҙан, ҡыуаныстарҙан ғына торһа икән дә. Ҡаты һынауҙары ла күп шул уның. Сәмиға апайға ла үҙ ғүмерендә ҡыҙҙарының фажиғәле үлемен, тормош иптәшен юғалтыу ҡайғыларын кисерергә тура килгән. Утыҙ йыл ғүмерен Байназар мәктәбендә балалар тәрбиәләүгә бағышлаған Сәмиға апай хәҙерге көндә хаҡлы ялда, ағинәйҙәр ойошмаһының әүҙем ағзаһы. Нәбиулла мулланың балалары һәр ҡайһыһы тормошта үҙ урынын тапҡан, матур итеп донъя ҡороп, балалар үҫтергән, лайыҡлы ғүмер кисергән. Ҡайғы-һағыштарҙы ғәйрәтлеләр генә еңеп, тормоштан йәм табып йәшәй ала шул.

**Шәһүрә ӘХМӘҘИЕВА.**
**Учалы районы.**



бындай ҡул эштәрен белеүселәр өләсәйҙәр араһында ла һирәк. Уның ҡарауы, замана өләсәйе, машина йөрөтмәгән хәлдә лә, һис юғында интернет селтәрендә яҡшы аралаша белгән, виртуаль белемле, боронғолоҡ менән хәҙерге заман ағышын берҙәй юғарылыҡта тойомлай белгән алдынғы ҡарашлы вики-өләсәй ҙә булырға тейеш. Бына шундай ҡайнап торған заманда тәртипле, рухлы, иманлы бала тәрбиәләр өсөн өләсәй кеше үҙенең белемен туҡтауһыҙ камиллаштырып торорға, заман менән бергә атларға бурыслы.

Баймаҡ, Әбйәлил, Хәйбулла яҡтарында бындай байрамдар яңылыҡ булмаһа ла, беҙҙең ҡала шарттарында ул беренсе тапҡыр уҙғарылды. Шуға ҡарамаҫтан, ҙур ойошҡанлыҡ менән үтте, тип әйтергә була. Стәрлетамаҡ ҡалаһының "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Вәсилә Халиҡова сараның сценарий авторы ла, режиссеры ла, өләсәй образында сараны алып барыусы ла булды. Уның янындағы теле-телгә йоҡмай башҡортса татылдап торған малай менән ҡыҙҙың (3-сө гимназия уҡыусылары Айтуған Мөхәмәтйәнов һәм Айлина Дәүләткилдина) сәхнәлә үҙҙәрен ысын артистарса иркен тотоуы, тел байлығы һоҡландырҙы. Ошо балаларҙы рухлы итеп тәрбиәләгән ата-әсәләренә, уҡытыусыларына, ғөмүмән, Жәлил Кейекбаев рухын һаҡлаған гимназия коллективына рәхмәттән башҡа һүҙ юҡ.

**Роза ҠОБАҒОШОВА .**
**Стәрлетамаҡ ҡалаһы.**

## СӘЛӘМӘТ БУЛ!



# ИЛЛЕ ЙӘШТӘН ҺУҢ...

Бөтә донъя һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы беҙгә шәп яңылыҡ бүләк итте! Ойошманың йәш классификацияһы буйынса XXI быуат башында биологик йәш бер ни тиклем үҙгәрҙе. Йәғни 25-44 йәш - йәш осор, 44-60 - урта йәш, 60-75 - оло йәш, 75-90 - ҡартлыҡ, 90 йәштән һуң оҙон ғүмерлелек билдәләнә. Тимәк, 40 йәштән һуң да тормош уртаһында ҡайнап йәшәйәсәкбеҙ әле!

Әммә шуны ла онотторға ярамай: барлыҡ хәстәрлектәребеҙҙе ҡалдырып, хаҡлы ялға сыҡҡас, тормошобоҙ уны үҙебеҙ нисек яһайбыҙ - шулай буласаҡ. Йәғни ҡыҙыу хеҙмәт һәм ғаилә мәшәҡәттәренән һуң "бәрхәт миҙгел" тыныслығында ләззәтләнәбеҙме, әллә яңғыҙлыҡ, кәрәкмәгәнлек һәм һағыш эсендә ҡалып, "ямғыр миҙгелендә" ҡалабыҙмы - барыһы ла үҙебеҙҙең ҡулда. Уның нисек булыуы тышҡы хәл-торошҡа ғына түгел, үҙебеҙҙең йәшебеҙгә ҡарата мөнәсәбәтебеҙгә лә бәйле. Тормошобоҙҙоң яңы осоро яңы шөғөл үҙләштереү һәм быға саҡлы асылмаған һәләттәребеҙҙе асыу ваҡыты булыуы мөмкин. Күптәр барлыҡҡа килгән буш ваҡытын камиллашыу өсөн мөмкинлек тип ҡарай. Ниһайәт, рәхәтләнеп яратҡан эшең менән шөғөлләнергә - балыҡ тоторға, сигергә, ағас һырлап нимәлер эшләргә, һүрәт төшөрөргә була. Шулай уҡ өлгөргәнлек осоро - быға саҡлы булған туҡланыу ғәҙәттәрен ҡайтанан ҡарап, уларҙы дөрөҫ туҡланыу һәм сәләмәт тормош рәүеше файҙаһына бороу ваҡыты ла. Сөнки эштәге хроник стресс, ашығып, тиҙ-тиҙ ашау юҡ. Хәҙер ҡәнәғәтлек алып йәшәргә мөмкин - йоҡоң туйғансы йоҡларға, файҙалы итеп ашарға, прогулкала йөрөргә, бер-берең менән аралашырға.

Беҙ һеҙгә нисек йәшлекте оҙағыраҡ һаҡларға, 100 йәшкә етергә өйрәтмәксебеҙ. Әгәр нимәнелер күҙ уңынан ысҡындырған булһағыҙ, ваҡытты артабан һуҙмай, үҙ өҫтөгөҙҙә эшләй башлағыҙ. Бының өсөн биологик йәште асыҡлау өсөн ошо тесты үтегеҙ. Йәшәлгән йылдар паспорттағы һан менән түгел, ә биологик йәш менән билдәләнә. Шуға күрә, 70 йәштә кешенең биологик йәше 35, йәки, киреһенсә булыуы мөмкин.

- Пульсығыҙҙы һанағыҙ. 10 тапҡыр сүгәләп ултырғандан һуң, ҡабат пульсығыҙҙы тикшерегеҙ. Һөҙөмтәһен ҡарағыҙ. Әгәр пульсығыҙ 0-10 берәмеккә күтәрелһә - биологик йәшегеҙ 20; 10-20 берәмек - 30; 20-30 - 40; 30-40 - 50; 40-тан ашыу - 60 йәш һәм унан да күберәк.
- Ҡул һыртығыҙҙы 5 секундҡа семтеп тороғоҙ һәм ысҡындырғас, нисә секунд эсендә ағарған тирегеҙ үҙ хәленә ҡайтыуын һанағыҙ. Әгәр 5 секунд эсендә булһа - биологик йәшегеҙ 30; 8 - 40 йәш самаһы; 10 - 50 йәш тирәһе; 15 - 60 йәш тирәһе.
- Тура баҫығыҙ, тубыҡтарығыҙҙы бөгөгөҙ һәм алға эйелегеҙ. Шул торошта усығыҙ менән иҙәнгә ҡағылырға тырышығыҙ. Һөҙөмтә: усығыҙҙы иҙәнгә тулыһынса баҫһағыҙ - 25-30 йәш; бармаҡтарығыҙ менән генә ҡағылһағыҙ - 40 йәш тирәһе; ҡулығыҙ менән йөҙлөгөгөҙгә генә тейһәгеҙ - 50 йәш тирәһе; тубығығыҙға тиклем генә етһәгеҙ - 60 йәштән ашыу.
- Ҡулығыҙҙы арҡағыҙға ҡуйып, уны ҡалаҡ һөйәге тирәһендә "бикләгеҙ". Әгәр быны еңел генә эшләһәгеҙ - һеҙгә 20 йәш; бармаҡтарығыҙ ғына тейһә - 30; ҡулығыҙға ҡағыла алмаһағыҙ - 40 йәш; ҡулығыҙҙы арҡаға сығара алмаһағыҙ - 60 йәш.
- Күҙҙәрегеҙҙе йомоп, алмашлап, уң һәм һул аяғығыҙға баҫығыҙ һәм бер нәмәгә тотонмайынса, шул торошта торорға тыршығыҙ. Әгәр тигеҙлекте 30 секунд тотһағыҙ - 20 йәш; 20 секунд - 40 йәш; 15 секунд - 50 йәш; 10 секундтан кәмерәк - 60 һәм унан оло.

Һөҙөмтә менән ҡәнәғәт булмаһағыҙ, үҙ сәләмәтлегегеҙ менән ныҡлап шөғөлләнергә ваҡыт! Спорт, күңел яткан шөғөл, әүҙем тормош рәүеше - иң яҡшы дауа!

**С. КУЗИНА.**
**(Дауамы бар).**



## 23 АПРЕЛЯ
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Ищейка". 9-я и 10-я серии. Детективный сериал (12+).
23.30 "Вечерний Ургант". Развлекательное шоу (16+).
24.00 "Познер" (16+).
01.00 "Татьянина ночь". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Верю не верю". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Операция "Мухаббат". 1-3-я серии. Остросюжетный сериал (12+).
00.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
02.50 "Земляк". Остросюжетный сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (16+).**
**11.00 "Итоги недели".**
**11.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.45 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Наука 102" (12+).**
**15.30 "Книга сказок".**
**15.45 "Байтус" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Перекличка" (6+).**
**16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**17.00 "Наши годы" (12+).**
**17.45 "Красная кнопка" (16+).**
**19.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Бай" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Бизнес-проба" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Аль-Фатиха" (12+).**
**22.00 "Спортбар".**
**23.15 "Автограф" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Все могут короли". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 24 АПРЕЛЯ
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.45 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 02.05, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят!" Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Ищейка". 11-я и 12-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "Татьянина ночь". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Верю не верю". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Операция "Мухаббат". 4-я и 5-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Земляк". Остросюжетный сериал (16+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (16+).**
**11.00 "Мистический Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Бизнес-проба" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "Дорога к храму".**
**15.30 "Йырлы кәрәҙ" (6+).**
**15.45 "Бауырһаҡ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Семәр".**
**17.00 "Дознание" (16+).**
**17.45 "Орнамент" (12+).**
**18.00 "Бай бакса" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Автограф" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Деловой Башкортостан" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Башҡорт йыры представляет…" (12+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Джейн Эйр". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 25 АПРЕЛЯ
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.45 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 02.05, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят" (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Ищейка". 13-я и 14-я серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "Татьянина ночь". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Верю не верю". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир". Ток-шоу (16+).
21.00 "Операция "Мухаббат". 6-я и 7-я серии (12+).
23.15 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.50 "Земляк". Остросюжетный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (16+).**
**11.00 "Наука 102" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Тәмле" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**15.30 "Городок АЮЯ".**
**15.45 "Ал да гөл" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Физра".**
**17.00 "Моя республика" (12+).**
**17.45 "Орнамент" (6+).**
**18.00 "Башҡорттар" (6+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Алтын тирма".**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Дорожный патруль" (16+).**
**21.00 "Историческая среда" (12+).**
**23.00 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**23.45 "Весело живем" (12+).**
**24.00 "Любовь - это для двоих". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 26 АПРЕЛЯ
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 03.40 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25, 02.05, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". Ток-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Ищейка". 15-я и 16-я, заключительная, серии (16+).
23.30 "Вечерний Ургант" (16+).
00.05 "На ночь глядя". Ток-шоу (16+).
01.05 "Татьянина ночь". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном" (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 17.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00, 02.40 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Верю не верю". Детективный сериал (12+).
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Операция "Мухаббат". 8-я и 9-я серии. Остросюжетный сериал
23.25 "Вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
01.40 "Земляк". Сериал (16+).
03.40 40-й Московский международный кинофестиваль. Торжественное закрытие.

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (16+).**
**11.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Дорожный патруль" (12+).**
**12.00 "Счастливый час".**
**13.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**13.30 "Бәхетнамә" (на башк. яз.).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45, 16.45 "Интервью" (12+).**
**15.00 "У дачи" (12+).**
**15.30 "Борсаҡ".**
**15.45 "Йырлы кәрәҙ".**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).**
**17.00 "Марш тысячи самураев" (12+).**
**17.45 "Современник".**
**18.00 "Үткән ғүмер" (12+).**
**19.00, 22.00 "Вечерний телецентр".**
**19.30 "Башҡорттар" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**21.00 "Уфимское "Времечко".**
**23.00 "Колесо времени" (12+).**
**24.00 "Любовь от всех болезней". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 27 АПРЕЛЯ
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00, 03.00 Новости.
09.15, 04.10 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" Программа о здоровье (12+).
10.55 "Модный приговор". Программа о моде и стиле.
12.15, 17.00, 18.25, 02.35, 03.05 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" Брачное шоу (16+).
16.00 "Мужское/Женское". Ток-шоу (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "На самом деле". Ток-шоу (16+).
19.50 "Пусть говорят". (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Голос. Дети" 5 лет".
23.45 "Вечерний Ургант" (16+).
00.40 "Татьянина ночь". Сериал (16+).

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России".
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан. Утро".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Программа о здоровье (12+).
11.00, 14.00, 17.00, 20.00 "Вести".
11.40, 14.40, 20.45 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Судьба человека" с Борисом Корчевниковым (12+).
13.00, 19.00 "60 минут". Ток-шоу (12+).
15.00 "Верю не верю". Детективный сериал (12+).
17.40 "Вести ПФО".
18.00 "Андрей Малахов. Прямой эфир" (16+).
21.00 "Аншлаг и Компания". Юмористическая программа (16+).
23.55 "Отпечаток любви". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00 "Герой нашего времени". Сериал (12+).**
**11.00 "Автограф" (12+).**
**11.30, 16.30, 17.30, 21.30 Новости.**
**11.45 "Криминальный спектр" (16+).**
**12.00 Ф.Буляков. "Голубушки мои" (12+).**
**14.00 "Күңелем моңдары" (12+).**
**14.30, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз.).**
**14.45 "Бала-саға" (6+).**
**15.30 "Сыйырсык".**
**15.45 "Шәп арба" (6+).**
**16.00 "Гора новостей".**
**16.15 "Зеркальце" (6+).**
**16.45 "Специальный репортаж" (12+).**
**17.00 "Моя планета Башкортостан" (12+).**
**17.45 "Замандаш" (6+).**
**18.00 "Йома".**
**19.00 "Хазина о Хазине".**
**19.30 "Вопрос+Ответ=Портрет" (6+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "Полезные новости" (12+).**
**20.45 "Большой чемодан" (6+).**
**22.00 "Наука 102" (12+).**
**23.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**24.00 "Танцуй отсюда!" Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 28 АПРЕЛЯ
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро".
09.00, 12.00 Новости.
09.15 "Контрольная закупка".
09.50 "Жить здорово!" (12+).
10.55, 04.30 "Модный приговор".
12.15, 17.00, 18.25 "Время покажет" (16+).
15.00 Новости (с субтитрами).
15.15 "Давай поженимся!" (16+).
16.00 "Мужское/Женское" (16+).
18.00 Вечерние новости (с субтитрами).
18.50 "Человек и закон" с Алексеем Пимановым (16+).
19.55 "Поле чудес". Капитал-шоу (16+).
21.00 "Время".
21.30 "Сегодня вечером" (16+).
00.15 "Другая женщина". Комедия (16+).
02.20 "Мой кузен Винни". Комедия.

### РОССИЯ 1

05.00 "Утро России".
09.00 "Доброе утро, республика!"
09.55 "О самом главном". Ток-шоу (12+).
11.00, 20.00 "Вести".
11.40 "Вести-Башкортостан".
12.00 "Опять замуж". Худ. фильм (12+).
13.45 "Ищу мужчину". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
17.50 "Петросян-шоу". Юмористическая программа (16+).
20.45 "Соседи". 4 серии. Комедийный сериал (12+).
01.15 "Французская кулинария". 4 серии. Комедийный сериал (12+).

### БСТ

**07.00 "Сәләм" (12+).**
**10.00, 22.00 "Свой вес" (16+).**
**10.30 "Большой чемодан" (6+).**
**11.15 "У дачи" (12+).**
**11.45 "Орнамент" (12+).**
**12.00 "Тәмле" (12+).**
**12.30, 18.30 Новости (на башк. яз.).**
**13.00 Замандаш" (6+).**
**13.15 "Учу башкирский язык".**
**13.30 "Бай" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**16.00 "Байыҡ-2018" (12+).**
**17.00 Концерт Нефтекамской государственной филармонии (12+).**
**19.00 "Колесо времени" (12+).**
**20.00 "Весело живем" (12+).**
**20.15 "Сәңгелдәк".**
**20.30 "100 имен Башкортостана" (12+).**
**21.00 "Следопыт" (12+).**
**21.30 Новости.**
**22.30 "Итоги недели" (на башк. яз.).**
**23.15 "Башҡорт йыры представляет…" (12+).**
**24.00 "Легенда о фехтовальщике". Худ. фильм (16+).**
**По окончании: Новости (на башк. яз.).**

## 29 АПРЕЛЯ
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.50, 06.10 "Гусарская баллада". Худ. фильм.
06.00, 10.00 Новости.
07.50 "Смешарики. ПИН-код".
08.05 "Часовой" (12+).
08.35 "Здоровье" (16+).
09.40 "Непутевые заметки" с Дмитрием Крыловым (12+).
10.10 "Юрий Яковлев. "Распустились тут без меня!" (12+).
11.15 "В гости по утрам с Марией Шукшиной".
12.00 Новости (с субтитрами).
12.15 "Теория заговора" (16+).
13.10 "Свадьба в Малиновке". Музыкальная комедия (16+).
15.00 "Эээх, Разгуляй!" (16+).
17.25 "Ледниковый период. Дети".
19.25 "Лучше всех!"
21.00 "Воскресное "Время".
22.30 "Что? Где? Когда?" Финал весенней серии игр.
23.50 "Чистое искусство". Триллер (16+).
01.40 "Планета обезьян: революция". Худ. фильм (16+).
04.00 "Бумеранг". Худ. фильм (16+).

### РОССИЯ 1

05.00 "Москва-Лопушки". Худ. фильм (12+).
06.45, 04.00 "Сам себе режиссер".
07.35, 03.35 "Смехопанорама" Евгения Петросяна.
08.05 "Утренняя почта".
08.45 "Вести - Башкортостан. События недели".
09.25 "Сто к одному".
10.10 "Когда все дома с Тимуром Кизяковым".
11.00 "Вести".
11.20 "Смеяться разрешается" (16+).
14.00 "Любить и верить". 4 серии. Мелодраматический сериал (12+).
18.30 Всероссийский открытый телевизионный конкурс юных талантов "Синяя птица - Последний богатырь". Сказочный сезон.
20.00 "Вести недели".
22.00 "Воскресный вечер с Владимиром Соловьевым" (12+).
00.30 "Маршал Конев. Иван в Европе". Док. фильм (12+).
01.30 "Если бы я тебя любил..." Худ. фильм (12+).

### БСТ

**07.00 "Доброе утро!" (12+).**
**07.45 Новости (на башк. яз.).**
**08.00 "Фиксики".**
**09.00 "Йома".**
**09.30 "Бай баҡса" (12+).**
**10.00 "Перекличка" (6+).**
**10.15 "Выше всех!" (6+).**
**10.30 "Ал да гөл" (6+).**
**10.45 "Книга сказок".**
**11.00 "Байтус" (6+).**
**11.15 "Сулпылар".**
**11.30 "Гора новостей" (6+).**
**11.45 "Алтын тирма" (12+).**
**12.30 Итоги недели (на башк.яз.).**
**13.15 "Учу башкирский язык" (6+).**
**13.30 "Үткән ғүмер" (12+).**
**14.00 "Дарю песню" (12+).**
**15.15 "Башҡорттар" (6+).**
**15.45 "Вестник "Газпромтрансгаз Уфа" (12+).**
**16.00 "Дорога к храму".**
**16.30 "Историческая среда" (12+).**
**17.00, 01.00 "Марадона". Худ. фильм (16+).**
**18.45 К Международному дню танца "Бейеу-шоу" (12+).**
**20.15 "Ҡош юлы. Балалар" (6+).**
**20.30 "Моя республика" (12+).**
**21.00 "Дознание" (16+).**
**21.30 "Итоги недели".**
**22.15 "Специальный репортаж" (12+).**
**22.30 "Красная кнопка" (16+).**
**23.15 "Вечер.com" (12+).**
**24.00 "Свидание с джазом" (12+).**

***✓ Шәғбан айының 15-се төүлегенә ҡараған көндө ураҙа тотоп, кисен ғибәҙәт менән үткәрергә бойорған Бәйғәмбәребеҙ. Был байрам Бәра'әт кисе - ҡотолоу, аҡланыу мәғәнәһен аңлата.***



БАҠСА

# КИШЕР СӘСЕҮ СЕРЕ



**Кишерҙе һәр кем үҙенсә сәсә. Тәбиғәт шарттарына ҡарап, был ғәҙәттә май баштарына тура килә. Тик һуңынан көндәр ҡоро тороу сәбәпле, кишер оҙаҡ ҡына шыта. Беҙ һеҙгә үҙенсәлекле ысул тәҡдим итәбеҙ.**

10-12 көн алдан кишер орлоғон сепрәккә һалып бәйләйбеҙ ҙә, бер көрәк тәрәнлегендә соҡор ҡаҙып, күмеп торабыҙ. Был ваҡыт эсендә орлоҡтарҙан уларға шытып сығырға ҡамасаулаусы эфир майҙары осоп бөтә. 12 көндән сепрәкте ерҙән ҡаҙып алабыҙ. Орлоҡтар бүртеп, эреләнеп, шытып киткәнен күрерһегеҙ. Һауытҡа һалып, саҡ ҡына крахмал өҫтәйбеҙ. Хәҙер улар ҡулға йәбешеп тормай, шулай уҡ тупраҡта яҡшы күренә. Түтәлгә сәсеп сыҡҡас, өҫтөнә ҡоро тупраҡ йәки ҡом һибәбеҙ. 3-5 көндән кишер шытып сығасаҡ. Һыу һибергә кәрәкмәй, юғиһә ҡыҫҡаҡ, тәмһеҙ кишер үҫәсәк. Әйткәндәй, һыу һипһәң, тупраҡтың өҫкө ҡатламы ҡата ла, орлоҡтарға уны тишеп сығыуы тағы ла ауырлаша.

# ТОМАТ ҮҪЕНТЕҺЕНӘ...



**Томат үҫентелә саҡта уҡ төрлө сирҙәргә бирешеп бара. Бындай осраҡта ябай йод иҙелмәһе ярҙамға килә.**

3 л һыуға 1 тамсы йод тамыҙырға һәм үҫентеләргә һибергә. Томаттар яҡшыраҡ үҫә башлаясаҡ, матур итеп сәскә атасаҡ, помидорҙар ҙа эре буласаҡ. Фитофторанан һаҡлау өсөн 250 г һөткә 1 л һыу өҫтәп, бер нисә тамсы йод тамыҙып, һибергә. 2 аҙна һайын ҡабатларға.

# ҠЫЯР ОРЛОҒО ЙЫЛЫ ЯРАТА



**Ҡыяр яҡшы үҫһен, оҙаҡ уңыш бирһен өсөн һауа һәм тупраҡ температураһының бер сама, әйтәйек, 20-25° булыуы мотлаҡ. Ҡыяр орлоғо йылыла ғына яҡшы шыта.**

❖ Ҡыярҙы 5-7 көн арауығы менән бер нисә тапҡыр сәсеү яҡшыраҡ. Мәҫәлән, тәүге сәскәнегеҙ һыуыҡта өшөһә, аҙағыраҡ сәскән ҡыярҙар үҫеп китә ала. Ҡырау төшмәй башлағас, артыҡ төптәрҙе алып ташларға мөмкин. Орлоҡ төртөп сыҡҡас та, тупраҡты йомшартырға кәрәк, сөнки тамырға һауа үтеп инергә тейеш. Ҡыярҙы йыш сәсмәгеҙ, оялар яһап сәсһәгеҙ, унда 3-4 үҫенте булһын. Әгәр ҙә рәт итеп сәсһәгеҙ, араларында 12-15 см арауыҡ ҡалһын.

❖ Үҫентеләр баш күтәреп, үҫеп киткәс, беренсе тапҡыр ашлайҙар. Бының өсөн органик ашламалар ҡулай. Тик түтәл яһағанда уҡ тупраҡҡа янған тиҙәкте күп итеп һалһағыҙ, ашламаһағыҙ ҙа була. Ҡыяр мыйыҡ ебәргәс тә ашлауҙы туҡтатаһың. Ҡыяр өлгөргән мәлдә ашлау бөтөнләй тыйыла, сөнки ашламалар ҡыярҙа ла тупланасаҡ. Ҡыярҙың тәме яҡшырһын өсөн сәскә атҡан саҡта бер ояға 150-200 г көл һалығыҙ.

❖ Ҡыяр былтыр картуф, кукуруз, борсаҡ, помидор үҫкән ерҙә яҡшы уңыш бирә. Йәшелсәләрҙең урынын ошо рәүешле алыштырып тороу тупраҡты ла байыта.

❖ Ҡыярҙы асыҡ һауала орлоҡтарҙы 2-3 см тәрәнлектә сәсәләр. Алдан үҫентеләр әҙерләһәгеҙ, башҡаларға ҡарағанда ҡыярҙы 2 аҙнаға алданыраҡ ашай башлаясаҡһығыҙ. Июнь башында асыҡ һауаға күсереп ултыртыр өсөн үҫентене ошо ваҡытта өйҙә сәсәләр. Ул яҡынса 20-25 көн эсендә әҙер була.

❖ Ҡыярға дөрөҫ итеп һыу һибә белергә лә кәрәк. Тупраҡ кибеп, үҫентеләр һулып китеүгә юл ҡуймағыҙ. Эҫе көндә һыу һиптергес ҡулланығыҙ, уның аша һыу аҙлап, саң кеүек кенә оса. Был ысул парник тәьҫирен бирә, һөҙөмтәлә, үҫемлектәрҙең буйға үҫеү процесы көсәйә. Һәм, әлбиттә, ҡыярға йылы һыу ғына һибәләр. Һыу ҡояшта ултырып йылынып өлгөрһөн.

❖ Тәжрибәле баҡсасыларҙың ҡыяр үҫентеләрен төрлө сирҙәрҙән һаҡлау ысулдары була. Шуларҙың береһе генә: 3-4 япрағы сыҡҡас, түбәндәге ҡатнашма менән эшкәртәләр. 1 биҙрә һыуға 30 тамсы йод, 20 г кер һабыны, 1 л һөт. Ҡатнашманы һиптерергә кәрәк. 10 көн һайын ҡабатлаһаң да була. Химик сараларға ҡарағанда, был ысул зарарһыҙ, бөтөн сирҙәрҙе тиерлек иҫкәртә. Онло ысыҡтан эремсек һыуы һаҡлай. Уны шулай уҡ үҫентеләргә һиптереп сығырға кәрәк.

# БАҠСА ЕЛӘГЕ



**Баҡса еләге мул уңыш бирһен өсөн, түбәндәге ысулды ҡулланып ҡарағыҙ.**

1 стакан ағас көлөнә 2 литр ҡайнар һыу ҡойорға, һыуынғас, тондороп, һөҙөргә. Уға 2 г марганцовка, 2 г бор кислотаһы, 1 ҡалаҡ йод ҡушырға. Ошо ҡатнашманы шунда уҡ бер мискә һыуға өҫтәп, еләк япраҡтары ныҡ итеп һыуланғансы һибергә. Бер юлы ашлайбыҙ ҙа, ҡоротҡостарҙан да ҡотолабыҙ.

# ҺУҒАН



**Һуған - беҙҙең төбәктә яҡшы үҫкән, артыҡ иғтибар һәм тәрбиә талап итмәгән культураларҙың береһе.**

1 л һыуға 3 ҡалаҡ тоҙ өҫтәп, һуған орлоғон 3 сәғәт ошо төнәтмәлә тоторға кәрәк. Бынан һуң 2 сәғәт марганцовка төнәтмәһендә тотоп, таҙа һыу менән йыуып, шунан һуң ғына әҙер түтәлгә сәсергә.

Һуған себене уңышты юҡҡа сығармаһын тиһәгеҙ, үҫентеләрҙе эшкәртергә кәрәк. Беренсе ҡыяҡтар сыҡҡас та, иң тәүҙә һыу һибергә. Шунан түбәндәгесә эшкәртәбеҙ: 1 биҙрә һыуға 2 ҡалаҡ нашатыр спирты өҫтәп, түтәлгә һибәбеҙ. Аҙағынан тағы таҙа һыу һибәбеҙ. 10-14 көн үткәс, 2-се этабын башҡарабыҙ. Шул уҡ схема буйынса эшләнә, тик нашатырлы һыу урынына 1 л һыуға 1 ҡалаҡ тоҙ һалып яһалған төнәтмә ҡушылған һыу ҡулланабыҙ. Тағы ла 10 көндән марганцовка төнәтмәһе менән эшкәртәбеҙ.

Һуған сүпрәле ашлама ярата. 1 биҙрә һыуға 100 г сүпрә һалып, 1 сәғәт төнәтәһең. Һуғанға башта һыу һибәһең, шунан сүпрәле һыу менән туҡландыраһың, аҙағынан һыу һибеп ҡуяһың. Һуған өлгөрөп етә башлағас та һыу һибеүҙе туҡтаталар. Һуғанды өҙгәс, ҡояшта "ҡыҙҙырып" алыу мотлаҡ.

# НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1439 һижри йыл.*

| Апрель (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 23 (7) дүшәмбе | 4:27 | 5:57 | 13:30 | 19:03 | 20:33 | 22:03 |
| 24 (8) шишәмбе | 4:25 | 5:55 | 13:30 | 19:04 | 20:34 | 22:04 |
| 25 (9) шаршамбы | 4:23 | 5:53 | 13:30 | 19:06 | 20:36 | 22:06 |
| 26 (10) кесе йома | 4:20 | 5:50 | 13:30 | 19:08 | 20:38 | 22:08 |
| 27 (11) йома | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 19:10 | 20:40 | 22:10 |
| 28 (12) шәмбе | 4:16 | 5:46 | 13:30 | 19:12 | 20:42 | 22:12 |
| 29 (13) йәкшәмбе | 4:14 | 5:44 | 13:30 | 19:14 | 20:44 | 22:14 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ШӘҒБАН БАШЛАНДЫ

Ислам динендә 17 апрелдән изге тип ҡабул ителгән айҙарҙың береһе - Шәғбан башланды. Бәйғәмбәребеҙ әйткән: "Рәжәб - Аллаһтың үҙ айы, Шәғбан - минең айым, Рамаҙан - өммәтем айы". Шәғбән айында бәйғәмбәребеҙҙең Аллаһтың илсеһе булыу өсөн әҙерлек дәрестәре тамамлана, диндең төп терәктәренең береһе булған зәҡәт Шәғбан айында фарыз ителә, мосолмандарҙың Ҡиблаһы яңынан үҙенең элекке урыны - Ҡәғба тарафына күсерелә. Икенсе бер риүәйәттә Ҡибланың Ҡәғба тарафына күсерелеүе Рәжәб айында була, тип тә әйтелә. Шәғбан айының 15-се төүлегенә ҡараған көндө ураҙа тотоп, кисен ғибәҙәт менән үткәрергә бойорған Бәйғәмбәребеҙ. Был байрам Бәра'әт кисе, ғәрәпсә ул "Ләйләтүл-бәра'әт" тип атала, тәржемәһе - ҡотолоу, аҡланыу мәғәнәһен аңлата. Был кистә Аллаһы Тәғәлә үә Тәбәрәкә, ҡолдарының ялбарыуына, теләгенә (доғаһына) айырыуса илтифатлы була икән. Бәра'әт кисендә, мәрхүмдәрҙең гонаһтарын ярлыҡауҙы һорап, ихлас күңелдән доғалар уҡыла. **Быйыл Шәғбан айының Бәра'әт кисе миләди тәҡүим буйынса 30 апрель көнөнә тура килә.** Был кистә, ошо кисте ҡаршыларға әҙерләнгәндә, изгелектәр ҡылырға тырышырға кәрәк. Мохтаждарға, меҫкендәргә, матди хәле мөшкөл кешеләргә хәйер, саҙаҡалар биреү айырыуса сауаплы.

# ҠОТЛАЙБЫҘ!

Апрель айында тыуған көндәрен билдәләүселәр - **Әбйәлил районы** Ҡужан ауылынан Ғарифулла Хәйруллин, Байым ауылынан Йомабикә Яҡупова, **Шишмә районы** Түбәнге Хәжәт ауылынан Ләйсән Төхвәтуллина, **Өфө ҡалаһынан** Фуат Ҡолдәүләтов, Гөлдәр Әхмәтғәлиева, Йәүһәрә Зәйниева, **Стәрлебаш районы** Табылды ауылынан Салауат Вәхитов, **Баймаҡ районы** Таулыҡай ауылынан Заһира Оморҙаҡова һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас ҡотлайбыҙ!

Ҡояш йылыһы йыһанды йылытҡан миҙгел күңелегеҙгә көс-ҡеүәт, тормошоғоҙға дәрт өҫтәһен. Ныҡлы һаулыҡ, нурлы көндәр, рух ныҡлығы теләйбеҙ!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

**Әйткәндәй, "Киске Өфө"гә яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙға тыуған көндәрегеҙҙе лә яҙып, редакцияға ебәрһәгеҙ йә булмаһа телефон аша хәбәр итһәгеҙ, уҡыусыларыбыҙҙы гәзитебеҙ аша тыуған көнө менән ҡотлау - беҙгә лә мәртәбә, һеҙгә лә шатлыҡ өҫтөнә шатлыҡ өҫтәр ине. Хәбәрҙәр көтәбеҙ!**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



## М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**21 апрель "Прометей"** (М. Кәримдең "Ташлама утты, Прометей!" пьесаһы буйынса) 14+

**22 апрель "Алтын асҡыс"** (А. Толстой), музыкаль мажара. Башлана 12.00 0+

**22 апрель "Баллы, тирәкле Балтирәк"** (А. Ишбулдина), лирик комедия 12+

**25 апрель "Әлифбанан бер себеш"** (А. Кивиряхк), монодрама 12+

**26 апрель "Әбейүшкә@тущка.ru"** (Р. Кинйәбаев), заманса комедия 12+

## М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**21 апрель "Тылсымлы тирмән"** (М. Кәрим), әкиәт. Башлана 12.00 0+

**22 апрель "Чиполлино"** (Д. Родари), мажара. Башлана 12.00 0+

**22 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

## Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**21 апрель "Волшебник изумрудного города"** (А. Волков). Башлана 12.00, 14.00 6+

**21 апрель "Тысяча и одна ночь"** (П. Васильев). Башлана 18.00 16+

**22 апрель "Кот в сапогах"** (Н. Шувалов). Башлана 12.00, 14.00 0+

**22 апрель "Почему весна красна?"** (В. Щербакова). Башлана 16.00 0+

## Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**21 апрель "Хәлит Фәтиховҡа - 60!"** Башҡортостандың халыҡ артисы Х. Фәтиховтың концерты 6+

**26 апрель "О чем поют птицы?"** өлкәндәр һәм балалар өсөн концерт-әкиәт. Башҡортостандың Халыҡ уйын ҡоралдары милли оркестры 0+

**27 апрель "DANCE... TANZEN... ТАНЕЦ... БЕЙЕҮ..."** Халыҡ-ара бейеү көнөнә арналған концерт 6+

## Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**26 апрель "Ағиҙел тулҡындары"** Бейеү театры концерты 6+

**27 апрель "Ҡарауыл! Атай өйләнә..."** (Б. Рацер, В. Константинов), комедия 12+

*АФАРИН!*

# БЕРЕНСЕ РЕСПУБЛИКА ТУРАҺЫНДА...

## беренсе фильм

**"Тере таҫма" кинокомпанияһы менән "Башҡортостан" дәүләт киностудияһы "Беренсе республика" тип аталған яңы фильм өҫтөндә эш башлай. Был турала журналистар менән осрашыуҙа фильмдың режиссеры Булат Йосопов белдерҙе. Сарала шулай уҡ продюсерҙар - "Башҡортостан" дәүләт киностудияһы директоры Азамат Хужахмәтов менән Леонид Филинов, сценарий авторҙары - Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың халыҡ артисы Таңсулпан Бибичева менән Гөлсәсәк Саламатова, композитор Ришат Сәғитов ҡатнашты.**




Башҡортостандың 100 йыллығына арналған был фильмды 24 майҙа төшөрә башларға ниәтләйҙәр. Азамат Шәриф улы билдәләүенсә, әлеге мәлдә павильон әҙерләнә, рәссамдар декорациялар төшөрөү менән мәшғүл. Фильм 1920-1956 йылдарҙы үҙ эсендә аласаҡ һәм ул республиканың тарихына, шулай уҡ билдәле йәмәғәт эшмәкәрҙәренең, ғалимдарҙың, шағир һәм яҙыусыларҙың, композиторҙарҙың яҙмышына нигеҙләнә. Ваҡиғалар бер герой - "Башҡортостан" гәзитенең тәүге редакторҙарының береһе Ҡасим Аҙнабаев яҙмышы аша күрһәтеләсәк. Ҡулға алынып, һөргөнгә һөрөлгәс тә рухы һынмай, иленә һөйөүе лә кәмемәй уның. Был геройҙы Мәскәүҙә йәшәүсе яҡташыбыҙ, актер һәм каскадер Роберт Йылҡыбаев уйнаясаҡ. Шулай уҡ Вәлиулла Мортазин-Иманский, Мәкәрим Мәһәҙиев, Зәйтүнә Бикбулатова, Дауыт Юлтый, Нинель Юлтыева, Һәҙиә һәм Ғөбәй Дәүләтшиндар, Яков Быков һ.б шәхестәрҙең ижады һәм тормош юлы сағылясаҡ. Сценарий авторҙары Таңсулпан Бабичева менән Гөлсәсәк Саламатова бер нисә йыл элек сәйәси репрессиялар ҡорбандарына арнап "10 июль. Көн һәм быуат" тип аталған әҙәби-тарихи драма яҙып, Өфө дәүләт сәнғәт институты студенттары менән сәхнәләштергәйне. Ошо ваҡыттан алып материал туплау эше туҡтағаны булмаған да. "Тарихи фильм өсөн ҙур материал тупланды, улар 10 фильм төшөрөү өсөн дә етер ине", - тине Таңсулпан Бабичева. Картинаның 90 процентында тарихи ваҡиғалар сағыласаҡ, нәфис фильм булараҡ, художестволы алымдар ҙа ҡулланылған.

- Минең өсөн республикабыҙға нигеҙ һалынған осор бик мөһим. Башҡортостан - хәҙерге Рәсәйҙә барлыҡҡа килтергән федерализм принцибына нигеҙ һала. Ошо йәһәттән ул Рәсәй тарихында - Беренсе республика. Республиканың үҫешенә йоғонто яһаған эштәр башҡарған шәхестәр ҙә ҡыҙыҡ минә. Әлбиттә, улар барыһы ла сәйәси репрессиялар ҡорбандары, беҙ был тарихи фактты урап үтә алмайбыҙ, әммә фильм был турала түгел. Был шәхестәр - төҙөүселәр, еңеүселәр. Тәү маҡсат - уларҙың эшен иҫкә алыу. Мин уларҙы өйрәнәм, уларҙы аңларға тырышам. Фильм бөгөнгө йәштәр өсөн файҙалы буласаҡ - беҙ ошо шәхестәрҙе иҫебеҙҙә тоторға һәм уларҙан өлгө алырға тейешбеҙ, - ти фильмдың режиссер-ҡуйыусыһы Булат Йосопов.

Төп ролдәрҙе республика театрҙары артистары башҡарасаҡ. Яҙыусы Дауыт Юлтыйҙы - Рафиҡ Хәсәнов, ғалим, башҡорт филология фәненә нигеҙ һалыусы Ғабдулла Амантайҙы - Фәнил Толонғужин, беренсе башҡорт яҙыусы ҡатын-ҡыҙы Һәҙиә Дәүләтшинаны - Лилиә Исҡужина, башҡорт милли театрына нигеҙ һалыусы Вәлиулла Мортазин-Иманскийҙы Руслан Хайсаров, композитор Ғәзиз Әлмөхәмәтовты Артур Ишмөхәмәтов, актриса Зәйтүнә Бикбулатованы Рушанна Бабич, башҡорт театры реформаторы Мәкәрим Мәһәҙиевты Артур Ҡунаҡбаев башҡарасаҡ тип көтөлә.

**Ләйсән ДАЯНОВА.**

*СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ*

# "МИРАҪ"ТАР - ИЛ БУЙЛАП...



**"Мираҫ" йыр һәм бейеү фольклор ансамбле "Донъя бейеүҙәре һәм музыкаһы" Халыҡ-ара фестивале сиктәрендә ЮНЕСКО-ның Штаб-квартираһында сығыш яһаясаҡ.**

"Донъя бейеүҙәре һәм музыкаһы" Халыҡ-ара фестивале CIOFF (Фольклор һәм традицион сәнғәт фестивалдәре Халыҡ-ара советы) ойошторған үҙенсәлекле проекттарҙың береһе. Фестиваль 29 июндә Парижда үтә һәм сараның 5 йыллығына арналған. Унын ҡунаҡтары һәм тамашасылары - ЮНЕСКО-ның ил-ағзалары делегациялары вәкилдәре, төрлө дәүләттәр илселектәре хеҙмәткәрҙәре, шулай уҡ Парижда йәшәүселәр. Ансамблдең матбуғат хеҙмәте хәбәр итеүенсә, "Мираҫ" һәм гастролдәрҙә ҡатнашыусылар Франция буйлап фестиваль турына сығасаҡ. Улар Нигерия, Чили, Аргентина, Никарагуа, Франция, Эстония, Сәғүд Ғәрәбстанынан килгән иң яҡшы коллективтар. CIOFF Президенты Филипп Боссан Рәсәйҙән бер генә коллективты - "Мираҫ" ансамблен саҡырған. 2018 йыл Башҡортостан менән CIOFF араһында хеҙмәттәшлек итеү йылы ла, сентябрҙә Өфөлә Советтың Бөтөн донъя конгресы үтәсәк.

# БАРЫБЕР ЕҢЕҮСЕ!



**"Мисс Россия-2018" Милли һылыулыҡ бәйгеһендә башҡорт ҡыҙы Земфира Байдәүләтова иң яҡшы милли костюм номинацияһында диплом менән бүләкләнде.**

19 йәшлек Земфира Байдәүләтова 70 ғариза араһынан Топ-20 эсенә инде. Тамашасылар араһында барған интернет-тауыш биреүҙә ул 7-се урынға сыҡты. Земфира - ғаиләлә һигеҙенсе бала, унын өлкән алты ағаһы һәм апаһы бар. Яратҡан китаптары - Һәҙиә Дәүләтшинаның "Ырғыҙ"ы һәм Лев Толстойҙың "Война и мир" романы. Яратҡан киноһы - Айнур Асҡаровтың "Өфөнән һөйөү менән" фильмы. Һылыуҡай баскетбол менән дә шөғөлләнә. Үткән аҙнала "Мисс Россия" Милли һылыулыҡ конкурсының 26-сы финалы үтте. Быйыл унын темаһы сәнғәттәге матурлыҡ булды. Бәйге тарихында беренсе тапҡыр финалистар симфоник оркестр оҙатыуында сыҡты, баһалама ағзалары ла ижади шәхестәрҙән торҙо. Еңеүсе тип Сыуашстандан Юлия Полячихина табылды. "Bashkirian Beauty" студияһы директоры Линара Таһирова билдәләүенсә, 70 һылыуҡай араһынан финалға үтеп, улар араһында илдең иң сибәр 20 ҡыҙы исемлегенә инеү үҙе үк ҙур уңыш.

*АҠЫЛ-ҠАҘНА*



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ЙҮНЛЕЛӘР БИТ...

## йүнһеҙҙәрһеҙ йәшәй алмай

Ҡайһы саҡта беҙ кемделер түбәнһетеү өсөн икенсе берәүҙе күтәрәбеҙ...

**(Ф. Ларошфуко).**

Үҙҙәре ышанып етмәһә лә һинең турала гел насарҙы һөйләгән, һине күрә алмаған дошмандар һәм һинең турала бар яҡшыны белеп тә бер һүҙ ҙә әйтмәгән дуҫтар араһында нисек йәшәмәк кәрәк?!

**(А. Ривароль).**

Кеше ысындан да маймылға оҡшаған шул: юғарыға үрмәләгән һайын арт һанын ғына күрһәтә.

**(Ф. Бэкон).**

Кешеләрҙең йәшәү шарттарын яҡшыға төҙәтегеҙ - ул саҡта кешеләр был шарттарға лайыҡлы булырға тырышасаҡ.

**(Х. Флэтчер).**

Бөгөн донъя нәфрәт менән сирләй. Әгәр ҙә беҙ ошоға ҡаршы дарыу тапмаһаҡ һәм нәфрәтләнеүселәрҙе күрә алмауҙы дауам итһәк, үҙебеҙ нәфрәт һаҙлығына батасаҡбыҙ.

**(И. Ильин).**

Кешеләрҙе юҡҡа ғына йүнлегә һәм йүнһеҙгә бүләбеҙ. Ә бит был тормошта йүнләләр йүнһеҙҙәрһеҙ йәшәй алмай.

**(Н. Шамфор).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Әбүғалисинаның бик тырыш һәм ҡыҙыҡһыныусан уҡыусыһы була. Бер саҡ бөйөк табипҡа һуҡырайған кешене килтерәләр. Табип уҡыусыһына дарыу әҙерләргә ҡушып, уның составына ниндәй ҡушылмалар инергә тейешлеген әйтә. Уҡыусыһы барыһын да уҡытыусыһы әйткәнсә эшләй. Ауырыуҙың күҙҙәренә ул әҙерләгән дарыуҙарҙы һалалар, бер аҙҙан һуҡыр кешенең күҙҙәре асыла.**

**Шунда уҡыусы үҙенең күршеһендә лә бер һуҡыр кеше йәшәгәнен иҫенә төшөрә. Ул тиҙ генә өйөнә ҡайта ла, күршеһен саҡырып алып, тап уҡытыусыһы ҡушҡанса дарыу әҙерләй һәм һуҡырҙың күҙҙәренә һала. Икенсе көндө һуҡыр күршеһенең күҙҙәре бөтөнләй ағып сыға. Шунан уҡыусы Әбүғәлисина эргәһенә илап килә һәм: "Хөрмәтле уҡытыусым, нисек улай килеп сыға инде? Мин бит дарыуҙы тап һин өйрәткәнсә эшләгәйнем..." - ти. Әбүғалисина уҡыусыһының ҡылығынан ҡайғыға ҡалған килеш шулай тип яуаплай: "Һуҡырлыҡ төрлө ауырыуҙарҙан барлыҡҡа килергә мөмкин: тәндең ҡоро булыуынан, дымлылыҡтан, әҫенән, һыуыҡтан һәм башҡалар. Мең төрлө һуҡырҙың мең төрлө сәбәбе бар. Ә һин бер төрлө генә дауалау алымы менән барыһын да дауаларға маташыуың менән ғилемдә еңел юл эҙләүеңде иҫбат иттең. Бар, улым, һин ашнаҡсы булып ҡына эшлә..."**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир: **Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәрририәт:** Ләйсән НАФИҠОВА, Зәйтүнә ӘЙЛЕ, Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА, Гөлназ МАНАПОВА, Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА, Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**

«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 20 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 4587
Заказ - 701/04